ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

1-7 июнь (һөтай)

2019

№22 (856)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Йәйҙең өйө киң



3

Маңлайҙы ыуыуҙан ни файҙа?



7

Туған телдән яҙҙырыу….

балаларҙы тыуған илһеҙ ҡалдырыу ул!



8-9

Каш төҙәтәм, тип…




12

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!***

***Әлеге мәлдә республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 2019 йылдың икенсе яртыһына - 624 һумға, абонент йәшнигенә - 594 һум 06 тингә; Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I-II группа инвалидтары - 563 һум 40 тингә, абонент йәшнигенә - 539 һум 46 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур баҫмалар һәм Башҡортостан "Юлдаш" радиоһы фонды аудиокитабы менән бүләкләнер. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Балаларҙы ярларға кәрәк икәнен - 1 июндә, балаларҙы тәрбиәләргә кәрәк икәнен 1 сентябрҙә генә иҫкә төшөрәбеҙ ҙә онотабыҙ түгелме хәҙер?

***Ғәлимйән ИШМЫРҘИН, мәғариф ветераны, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Бөрйән районы:*** Хаҡлы ялға китеүемә тиҫтә йылдан ашһа ла, мәктәп тормошонан киткәнем юҡ: балалар, уҡытыусылар менән йыш осрашып торам, мәктәптә үткән сараларҙан торғоҙоп ҡалдырғандары юҡ, рәхмәт. Үҙем юллап йөрөп һалдырған мәктәптә ун биш йыллап уның директоры булып эшләгәс, тыуған йортомдай эҫе күрәм уны. Биология уҡытыусыһы булараҡ, мәктәп баҡсаһына ла тап шул йылдарҙа нигеҙ һалынды, хәҙер ундағы алмағастар, слива һәм ҡарағаттар емешенән һығылып ултыралар; күп итеп йәшелсә ултырта балалар, уны тәрбиәләй, һыу һибә, утайҙар. Мин был мәктәп баҡсаһында булырға бигерәк яратам. Балаларҙың тырышып эшләүен күреү күңелемә рәхәтлек бирә: бөгөнгө быуын үҫмерҙәрен һәм йәштәрен кем әйтә эшләргә яратмай улар, тип? Мәктәп баҡсаһы - ысын мәғәнәһендә тәрбиә мәктәбе ул. Һәр класс үҙенә түтәлдәр, емеш ағастарын ҡарауҙы бүлешеп алған: кемдең уңышы мулыраҡ була, көҙ ул класс бүләкләнә. Әйткәндәй, 1 сентябрь етеүгә баҡсала күҙ яуын алырлыҡ сәскәләр ҡаршылай балаларҙы һәм уҡытыусыларҙы. Үҙ хеҙмәттәренең емешен күреү уҡыусыларға ҙур ғорурлыҡ һәм ҡыуаныс: бер генә сәскәне өҙөргә лә бирмәй, күҙ ҡараһылай ҡурсып тора улар баҡсаны. Инанғанмын: бөтөн тәрбиәнең башында - хеҙмәт. Әгәр бала эш һөйөүсән булып үҫә икән, уның киләсәге бар, ул яҡшы, йәмғиәтенә файҙалы кеше буласаҡ. Ә хеҙмәт күнекмәһен ул датанан теге датаға тиклем бүлгеләп үткәреп булмай, сөнки тормош - ул көндәлек хеҙмәт. Бына шуға өйрәнеп үҫһен балалар, ә әҙергә - бәҙер әҙәмдәр булып түгел. Ҡала балалары ни менән көн үткәрәлер - белмәйем, ә бына ауыл ерендә буш ваҡытын нисек үткәрергә белмәй аптырап йөрөргә түгел. Ауылыбыҙҙа бына тигән стадион төҙөлдө. Балалар һәм йәштәр генә түгел, эштән һуң унда хатта өлкәндәр ҙә волейбол уйнарға сыға. Бына шундай тәрбиә ала беҙҙә балалар.

(Дауамы 2-се биттә).

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# БАШҠОРТ МӘКТӘПТӘРЕ ЛӘ...

## ҡарлуғастары менән хушлашты

**Ил буйынса үткән Һуңғы ҡыңғырау сараһы күптәр өсөн байрам кеүек ҡабул ителһә лә, сығарылыш уҡыусылары өсөн һағышлы бер көн, мәктәп менән хушлашыу, һынауҙар алдына баҫыу ул. Сығарылыш уҡыусылары вальста әйләнеп, үҙҙәрен ҙур кешеләр итеп тойоп йөрөһәләр ҙә, әлеге мәлдең тормоштарындағы мөһим ваҡиға икәнен аңлап та етмәйҙәрҙер. Сөнки әле уларҙың хис-тойғолар, яңылыҡтар менән баштары әйләнгән. Тағы ла бер нисә йылдан тап бына ошо көндөң ҡәҙере һәм мәғәнәһе артасаҡ, йәштәр Һуңғы ҡыңғырауҙың үҙҙәре өсөн ниндәй төшөнсәгә әйәлеген аңлаясаҡ әле. Шулай итеп, Һуңғы ҡыңғырау быйыл баш ҡаланың бөтә белем усаҡтарында 25 май көндө билдәләнде.**

(Дауамы 6-сы биттә).



12+

ИШАРА

**Яңыраҡ, ниндәй темаға фекер алышалар икән, тип, В. Соловьевтың НТВ каналында барған телешоуын ҡарарға булдым.**

# КЕҪӘЛӘ БИШ КЕНӘ ТИН,

## байҙар кеҫәһендәгеһе миңә ҡағылмай…

Был тапшырыуҙы һирәк ҡарайым, сөнки ундағы ярһып ҡысҡырышыуҙар миңә оҡшамай. Был юлы коррупцияға ҡаршы көрәш темаһына яҙыусы һәм сәйәсмән фекер алыша ине. Тапшырыуҙы саҡ ҡына тыңлағас, ниңәлер, "Кин-Дза-Дза" кинокомедияһы иҫемә килеп төштө. Уны күпме генә ҡараһам да, авторҙың нимә әйтергә теләгәнен аңлай алмайым. Кинола ике Ер кешеһе (дядя Володя һәм йәш кенә скрипач) сит планетаға килеп төшәләр. Тирә-яҡтары тик ҡом ғына. Ул планетала иң ҙур ҡиммәт (аҡса урынына) - бер шырпы. Бер бөртөк шырпы биреп, һорауҙарға яуап алып була. Ыҙа сигеп, тамам йонсоған дядя Володя ул планета кешеһенә: "Беҙ һеҙҙең ил башлығына мөрәжәғәт итәсәкбеҙ", - тип янай һәм: "Ә беҙҙең хөкүмәт бөтөнләй икенсе планетала йәшәй бит", - тигән яуап ишетә. Ҡайһы саҡ, ошо фильмдағы кеүек, беҙҙең илебеҙҙә лә ябай халыҡ - бер планетала, байҙар бөтөнләй икенсе планетала йәшәгән һымаҡ тойола.

Бына мин ябай пенсионер, кемгә ришүәт бирә алам? Ришүәт бирерлек аҡсам да юҡ минең. Байҙар үҙ-ара алыш-биреш итеп йәшәй, ығы-зығыларын телевизор аша ла яңғырата, ә ябай халыҡҡа ниңә кәрәк уларҙың был һүҙ көрәштерееүе, талашыуы? Әллә ундай телмәрҙәр халыҡҡа "гипноз курсы" үткәреү генәме?

Ун ете йәшлек кенә студент саҡ. Бер көн "Халыҡ ижады" музейын ҡарап, ҡайтырға сыҡтым. Тар ғына урамда йәш кенә сиған ҡыҙы туҡтатты ла: "Әйҙә, һинең киләсәгенде әйтеп бирәм", - тине. "Минең аҡсам юҡ шул", тип, ары китергә уйлағайным да, был сиған: "Ярар, аҡсаһыҙ юрармын", - тине. Кемдең генә киләсәген алдан белгеһе килмәһен! Ул минең усыма ҡарап: "Һинең бик һәйбәт Борис исемле ирең, өс улың булыр", - тине һәм "Озолоти ручку!" тип тамамланы. "Аҡсам юҡлығын тәүҙә үк һеҙгә әйттем дәһә", - тиһәм, "Минең күҙҙәремә ҡара", - ти. Уның күҙҙәре хас кипкән ағас ботағы төҫөндә, йылтырамайҙар. Сиған миңә "Аҡсаң бар, аҡсаң бар!" тип шыбырлай. Миңә, нисектер, ҡурҡыныс та, шул уҡ ваҡытта йылы ла булып китте. Тиҙ генә уң кеҫәмә ҡулымды тыҡтым - буш, һул кеҫәмдән метроға ултырып ҡайтырға ғына етерлек 5 тинем тәгәрәп килеп сыҡты. Гипноздан арынып, эх, тиергә лә өлгөрмәнем, һуңғы 5 тинемде тартып алып, гипноз оҫтаһы үҙ юлын дауам итте. Тағы бер тапҡыр "Эх", тинем дә, метроға инеп, дежур ҡатынға: "Һуңғы 5 тинемде сиған алды, зинһар, түләүһеҙ индерегеҙ", - тип инәлдем. Үткәреп ебәрҙе...

Бына шулай, гипнозға тиҙ бирелеүсәнбеҙ, буйһоноусанбыҙ инде беҙ. Телеэкрандарҙа, трибуналарҙа барған ығы-зығыларҙы иҫебеҙ китеп тамаша ҡылабыҙ, ә кеҫәбеҙҙә 5 кенә тин ятҡанын, байҙар талашыуынан беҙгә бер файҙа ла булмаҫын онотабыҙ...

...Баяғы тапшырыуҙың аҙағын тағы асып ҡараным. Халыҡ яҙыусыға мәрәйҙе ике тапҡыр күберәк биргән. Сөнки яҙыусы халыҡҡа яҡыныраҡ, ул беҙ йәшәгән планетала йәшәй бит.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Балаларҙы яҡларға кәрәк икәнен - 1 июндә, балаларҙы тәрбиәләргә кәрәк икәнен 1 сентябрҙә генә иҫкә төшөрәбеҙ ҙә онотабыҙ түгелме хәҙер?

**(Башы 1-се биттә).**

***Рәлиә БИКТИМЕРОВА, Өфө районы Шамонин мәктәбе хеҙмәткәре, ике бала әсәһе:*** Был һорау, әлбиттә, балалар тәрбиәһе мәсьәләһенә дөйөм ҡараштан сығып биреләлер, ләкин ул минең үҙем һәм ғаиләм өсөн бөтөнләй ят, шуға ла мин уны ҡабул итә алмайым. Баланы тапҡанһың икән, тимәк, уның ғүмере, яҙмышы өсөн мәңгелек яуаплылыҡ алаһың, тигән һүҙ бит ул. Киләсәктә баланың ниндәй кеше булып китеүе, шәхес дәрәжәһенә күтәрелеүе мәктәпкә лә, шул уҡ кимәлдә ғаилә мөхитенә лә бәйле. Мәктәптә, уҡыған класында бала төрлө йоғонтоға, төрлө мөнәсәбәткә дусар ителә, сөнки йөҙ төрлө баланың йөҙ төрлө холоҡ-фиғеле; уларҙың тәрбиәлеһе, иплеһе лә, тәрбиәһеҙ, тупаҫтары ла бар. Ә бала күңеле теге йәки был тәртип моделен бик тиҙ отоп алыусан. Шуға күрә ғаиләбеҙҙә бала тәрбиәһе тигән ҙур эштең бер генә миҙгелгә лә туҡталып торғаны юҡ. Үҙебеҙ - эштән, биш йәшлек ҡыҙыбыҙ - балалар баҡсаһынан, быйыл беренсе класты бөтөргән улыбыҙ мәктәптән ҡайтып инеү менән бергәләп киске ашҡа ултырғас, үткән һәр көнөбөҙ хаҡында уртаға һалып барлап сығабыҙ: балаларҙың дәрестәрен әҙерләүҙән алып, артабан көн оҙоно кем ниндәй файҙалы ғәмәлдәр башҡарған, кемдәр менән аралашҡан, нимәгә шатланған, нимәгә борсолған, ниндәй ҡыйынлыҡҡа осраған тигән кеүек көн дә булып торған хәл-ваҡиғалар тураһында һөйләшәбеҙ, теге йәки был осраҡтарға бергәләп баһа бирәбеҙ. Баланың тәртибен, холҡон көн дә күҙәтеп, көйләп-дөрөҫләп кенә торорға кәрәк, тип уйлайым, сөнки бала бишкә төрләнә, тигән әйтемдәгесә, бөгөн балалар күңеленә интернеттан да, телевидение яғынан да агрессив мәғлүмәти һөжүм бара. Тимәк, балалар ата-әсә һөйөүенә, наҙлауына ғына түгел, уларҙың яҡлауына ла бик мохтаж. Баланы уның тыуған мөхитенә ят булған шыҡһыҙ виртуаль донъя менән яңғыҙын ҡалдырырға ярамай. Киләсәктә бала ышанып барыусан, тиҙ ҡабыныусан, ҡыйыуһыҙ йә киреһенсә, агрессив холоҡло булып үҫмәһен өсөн уларҙы зыянлы йоғонтоларҙан ваҡытында һаҡлай һәм яҡлай белергә лә кәрәк. Бының өсөн баланың ата-әсәһе лә, тәрбиәсеһе лә, дуҫы ла, иң яҡын серҙәше лә булырға тырышаһың инде, юғиһә, тәрбиә, һеҙ әйтмешләй, 1 сентябрҙә генә иҫенә килеп төшөүе бар бәғзеләрҙең. Ундайҙар былай ҙа бар арабыҙҙа: имен булмаған ғаиләләр, тип тә әйтәләр бит улар хаҡында. Тик шулай ҙа көн тәртибенә ҡуйған һорауығыҙҙы ғәҙәттәге күренеш тип әйтә алмаҫ инем...



***Зәкиә ТОЛОМБАЕВА, мәктәп интернаты тәрбиәсеһе:*** Һуңғы ваҡыт мәктәптәрҙә "буллинг" тигән төшөнсә хаҡында йыш һөйләйҙәр, фекер алышалар, бәхәсләшәләр. Буллинг - ул ябай тел менән әйткәндә, балаларҙың үҙ-ара агрессив мөнәсәбәте, йә булмаһа, айырым бер уҡыусыға күмәкләшеп "көн күрһәтмәү", кәмһетеү, туҡмау, ҡурҡытыу, туҡмалған хәлдә уны фотоға төшөрөп мыҫҡыллау, рисуай итеү һ.б. Бөгөн мәғариф хеҙмәткәрҙәре һәм ата-әсәләр өсөн бик ауыртҡан тема был. Ундай күренеште тамыр йәйергә бирмәй, мәлендә киҫәтеп ҡалыу мәктәп коллективы, уҡытыусылар һәм тәрбиәселәрҙең һөнәри булдыҡлылығына, ата-әсәләрҙең әүҙем эшмәкәрлегенә бәйле. Шуныһы насар: был күренеш реаль тормошобоҙҙан балаларҙың виртуаль донъяһына ла үтеп ингән: кибербуллинг тип атала уныһы. Был хаҡта яңыраҡ ҡына Өфөгә килеп киткән Балалар хоҡуҡтары буйынса Рәсәй президенты вәкиле Анна Кузнецова ла бик борсолоп һөйләне. Уның фекеренсә, бындай хәл бер нисә сәбәпкә бәйле. Беренсенән, ғаиләлә тәрбиәүи эштең дөрөҫ ҡуйылмауы. Әйтәйек, бындай ғаиләлә бала үҙһүҙле һәм лидерлыҡ итеү теләге менән үҫә; был маҡсаты хаҡына ул теләһә ниндәй юлға бара: үҙенән көсһөҙҙәрҙе ҡыйырһыта, башҡаларҙы һанламай. Икенсенән, киреһенсә, бала көс ҡулланыуҙы ғаилә мөхитендә күреп үҫә, һәм үҙе лә агрессорға әүерелә. Ҡайһы саҡ уҡытыусының уйламайыраҡ эш итеүе лә буллинг күренешенә сәбәп була: берәй баланың шәхси сифаттарын тикшереү, исем атау, кәмһетеү артабан уҡыусылар өсөн кире "өлгө" була ала. Тәрбиә - ул дөйөм эш. Ул фәҡәт ғаиләнең йә мәктәптең генә бурысы түгел. Уларҙан тыш, тәрбиә эшендә, мәғлүм булыуынса, хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәре лә әүҙем ҡатнашырға, мәктәптәрҙә йышыраҡ булырға, ҡыҙыҡһынырға, төрлө мәсьәләләр буйынса балалар алдында сығыш яһарға тейештәр, тип уйлайым. Йәйге каникулдар башланды. Балаларҙы юл-хәрәкәт фажиғәләренән, машиналар бәреп китеүҙән, уттан-һыуҙан һаҡларға кәрәк. Балаларҙы тәрбиәләү - асылда уларҙы, уларҙың мәнфәғәттәрен, киләсәген яҡлау ҙа ул. Бөгөн балаларын ташлап китеүсе выжданһыҙ, хаяһыҙ ҡатындар күбәйҙе, уларҙы хатта әсә тип әйтергә тел дә әйләнмәй. Дәүләт ташландыҡ балаларҙы етем итмәй, әлбиттә, тик барыбер ата-әсәһеҙ бала үҙен кәмһетелгән, кәрәкһеҙ, бәхетһеҙ тип хис итәсәк. Әле яңыраҡ ҡына Мәскәү поликлиникаларының береһендә "ул миңә ҡамасаулай", тип, ике йәшлек ҡыҙын ташлап киткән ҡатынды бер ниндәй яҙаһыҙ суд залынан сығарғандар, тигән хәбәр булды. Бына шундай яуапһыҙлыҡ, ҡылғаны өсөн яҙаһыҙ ҡалдырыу этәрә лә кешене енәйәти аҙымға. Йәмғиәтебеҙ әхлаҡһыҙлыҡ күренештәренә шул тиклем күнеккәнте, минеңсә: уларға аптырап өлгөрөү түгел, ҡылынған яуыҙлыҡтарҙың артынан күҙәтеп өлгөрөп булмай...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, Ураҙа байрамы уңайынан быйыл 4 июнь ял - байрам көнө тип иғлан ителгән. Дүшәмбе, 3 июндә, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. Хеҙмәт кодексы статьяһы нигеҙендә, йыллыҡ төп йәки өҫтәмә түләүле отпуск бирелгәндә, 4 июндәге байрам көнө уның иҫәбенә индерелмәй, тип асыҡлыҡ индерҙеләр Хеҙмәт министрлығында.

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Молдавия президенты Игорь Додон менән осрашты. Ике республика лидерҙары сауҙа-иҡтисади һәм мәҙәни хеҙмәттәшлекте нығытыу мөмкинлектәрен тикшерҙе. "Республикаларыбыҙ араһындағы сауҙа күләме нығ түбән. Ҡеүәт бик ҙур тип ышанам. Ошо килешеүҙәргә ҡул ҡуйғандан һуң беҙҙең үҙ-ара бәйләнеш кимәлен күтәреү мөмкин булыр тигән өмөттәмен. Беҙгә сауҙаны кәмендә бишалты тапҡырға арттырырға кәрәк", - тине Игорь Додон.

✓Тамара Ғәниева Башҡортостандың 17-се халыҡ шағиры исеменә лайыҡ булды. Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров уға ошо абруйлы исемде тапшырҙы. "Шағирҙың аҡылы, күңеле һәм туған теленән башҡа эш ҡоралы юҡ. Туған телгә иғтибарлы мөнәсәбәтегеҙ өсөн һеҙгә, Радий Фәрит улы, рәхмәтемде еткерәм. Ғүмеремде туған тел ярҙамында һүҙ сәнғәтен булдырыуға арнаным. Туған телебеҙгә, тыуған Башҡортостаныбыҙға һөйөүегеҙ өсөн рәхмәт һеҙгә!" - тине Тамара Ғәниева, награданы ҡабул итеп.

✓Республика етәксеһе хакимиәтендә уҙған "Төҙөлөш сәғәте" кәңәшмәһендә Башҡортостандың баш ҡалаһында яңы футбол стадионы төҙөлөшө тикшерелде. Затонға илткән юлда, Ағиҙел йылғаһы күперен үткәс тә, 20 мең кеше һыйҙырышлы спорт объекты һалына. Урындың икенсе варианты - "Мега" сауҙа комплексы янында. Стадион тирәләй ике мең автомобиль өсөн парковка һәм 15 автомобиль өсөн йәмәғәт транспорты туҡталышы ҡаралған. Эштәрҙе башлау һәм тамамлау ваҡыты әлегә билдәләнмәгән. Радий Хәбиров республикала йәшәүселәр стадиондың дизайны буйынса тәҡдимдәр индерһен ине тигән теләк белдерҙе.

✓Өфөлә АИ-92 маркалы бензиндың хаҡы, 20 май менән сағыштырғанда, 0,1 процентҡа артып, бер литры 41,41 һумға еткән. Яғыулыҡтың башҡа төрҙәренә хаҡтар үҙгәрмәгән. Әйтәйек, хәҙер Өфөлә яғыулыҡ ҡойоу станцияларында АИ-95 маркалы бензиндың бер литры - 44,34 , АИ-98 - 49,43, дизель яғыулығы 45,09 һум тора.

*✓ Ризыҡҡа сабырлыҡ менән ҡарау, самалап ашау - үҙе бер күркәм сифат, мәҙәнилек билдәһе. Ошондай мәҙәнилектең тере миҫалына беҙ ай буйына сабырлыҡ менән ураҙа тотҡан диндәштәребеҙ йөҙөндә шаһит булдыҡ.*



БЫЛ АЙҘА...

# ЙӘЙҘЕҢ ӨЙӨ КИҢ

**Йәйгә сыҡтыҡ, сәхрәгә аяҡ баҫтыҡ - инде бирешмәбеҙ, тип, әҙәм балаһы һәр ваҡыт йәйҙе көтөп, ҡояш нурына, йәшеллеккә мул осорҙо һағынып ҡыш сыға ла, йәй мәле күбәләк шикелле елпелдәп кенә, күҙ асып йомғансы үтә лә китә... Һәм тағы - оҙон ҡыш. Ни хәл итәһең, беҙ йәшәгән пояс климаты шулай ҡоролған: ни бары өс кенә ай ирәүәнләп ҡала алабыҙ. Халыҡтың тапҡыр һүҙендәге "Ҡыш - ҡыҫыл, яҙ - яҙыл, йәй - йәйел" тигәндәй, өс ай буйы беҙгә тәбиғәттә ял итергә, тирләп-бешеп эшләргә, һыу инергә, ҡыҙынырға, еләк-емешкә туйынырға форсат бирелә.**



Тик һуңғы ваҡыт быңдай ниәттәребеҙ тәбиғәт ҡарары менән йыш ҡына тап килешмәй башланы. Быйылғы йәйҙең дә һалҡын һулышы хаҡында иң тәүге фараздар күңелгә борсоу һалғайны. Унан май урталарындағы тәбиғәт көйһөҙлөгө тамам шиккә төшөрҙө: йәйебеҙ йәйсә булырмы? Ни тиһәң дә, йәй ҡышты туйҙыра, тигәнде иҫтә тотоп, йылға етерлек уңыш үҫтереү, уны юғалтыуһыҙ йыйып алыу бурысы тора бит ауыл эшсәндәре алдында. Йыл килеүенә ҡарап та, май айының көтөлмәгән сюрприздарынан сығып та июндәге һауа торошон бер аҙ сырамытырға булалыр, ләкин фаразлауҙарҙың раҫҡа сығырына бер ышаныс та юҡ: һауа торошо тәүлек эсендә танымаҫлыҡ хәлгә үҙгәрә ала бөгөн. Ә иртәгә ни булырын бер Алла ғына белә. Рәсми фаразлауҙар төрлөсә күрһәтеүгә ҡарамаҫтан, йәй йәйлеген итер әле, үҙенә кәрәген алыр, тип йыуанырға һәм йылы, аяҙ көндәргә өмөт итергә ҡала, сөнки беләбеҙ: йәй бөтәһен дә үҙенә һыйҙыра. Халҡыбыҙ белмәй әйтмәгәндер: йәйҙең өйө киң.

Һөтәйҙың иҫтәлекле көндәре, йола булараҡ, Балаларҙы яҡлау көнөнән (**1**) башлана торғайны, быйыл ул 6-сы йыл рәттән Бөтөн донъя ата-әсәләр көнө менән бер ҡатар билдәләнә. Шулай дөрөҫөрәктер ҙә: бала менән ата-әсә һәр саҡ бергә булырға тейеш. Бының менән ул көндө булдырыусылар ғаилә һәм әхлаҡ ҡиммәттәренең бер тамырҙан үрелеүенә ишаралап, Ер йөҙөндә балаларҙың һәр ваҡыт атайлы-әсәйле булырға тейешлеген кешелектең хәтеренә төшөрөп тормаҡсылыр. Был сәләмәт тормошобоҙҙоң рухи күрһәткесе булһа, уның икенсе шарты - сәләмәт туҡланыу. Был йәһәттән хатта махсус дата - Сәләмәт туҡланыу көнө (**2**), аныҡлабыраҡ әйткәндә, артыҡ ашауҙан баш тартыу көнө булдырылған июндә. Артыҡ ашауҙың организмға ни тиклем зыян килтереүен һөйләп тороу ҙа кәрәкмәйҙер. Ярай ҙа күңелең булғанса ашағас, ул калорияларҙы яндырырлыҡ итеп эшлә йә хәрәкәт ит ине. Ауыл халҡы шулай эшләйҙер ҙә: уларҙың эше һәр саҡ муйындан, ә бына ҡаланыҡы ашай-ашай ҙа диванына ауып китеп, телевизор тоҡандыра, йә булмаһа машинаһына ултыра. Әүҙем хәрәкәт сикләнгәнлеге - артыҡ ауырлыҡҡа, ә уныһы туп-тура сиргә алып килә.

Ризыҡҡа сабырлыҡ менән ҡарау, самалап ашау - үҙе бер күркәм сифат, мәҙәнилек билдәһе. Ошондай мәҙәнилектең тере миҫалына беҙ ай буйына сабырлыҡ менән ураҙа тотҡан диндәштәребеҙ йөҙөндә шаһит булдыҡ. Ураҙа байрамында (**4**) уларҙың йөҙҙәре яҡты, намыҫтары керһеҙ, ғәмәлдәре сауаплы булыр, иншалла. Хаҡ Тәғәләгә инаныуҙарын һәм тоғролоҡтарын фиҙаҡәр рәүештә иҫбатлай алған Алла бәндәләре бынан ары теләһә ниндәй тормош һынауҙарын да еңеллек менән үткәрә алыр. Әйткәндәй, һөтәйыбыҙ ҙа беҙҙе өҫтәмә ял көндәре менән ҡыуандырасаҡ: Ураҙа байрамы менән Рәсәй көнө (**12**). Ваҡыт ҡәҙерен белгәндәр был көндәрҙе бушҡа сарыф итмәҫ, тип ышанайыҡ.

Милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуған көнөнә бағышлап (**16**), республикабыҙҙа Салауат Юлаев көндәре (**10-20**) үткәреү һәйбәт йолаға әүерелде. Ә шулай ҙа был мөһим тарихи датаны йыл да бер үк төрлөгә әйләндереп, формаль сараға торғоҙоп ҡалдырыуҙан һаҡ булһаҡ ине. Бер аҙ ғына фантазияны эшкә егеп, уны йыл да аныҡ берәй темаға арнау (атта сабышыу, милли көрәш, уҡ атыу, шиғыр яҙыу кеүек батырыбыҙ эйә булған һәләттәрҙе үҫмерҙәр һәм егеттәрҙә һынап ҡарау һ.б.) маҡсатҡа ярашлылыр. Хәйер, байрам программаһын әҙерләүгә БР Мәҙәниәт министрлығы былай ҙа иң талантлы драматургтар, яҙыусылар һәм режиссерҙарҙы йәлеп итәлер, моғайын. Ә бәлки, бер йыл алдан иң яҡшы сценарийға конкурс иғлан ителер? Һәр хәлдә, был көндәрҙе сираттағы ябай уйын-көлкә, йыр-бейеүҙән тыш, белмәгәндәргә, үткәнебеҙҙе онотоп киткәндәргә һабаҡ булырлыҡ итеп тарихи факттар, күргәҙмә материалдар менән нигеҙләп, йәнләндереп алып барыу кәрәктер. Ошо фекергә ялғап, Өфө ҡалаһы көнөн (**12**) үткәреү моделенең дә фәҡәт күңелһеҙ һөҙөмтәһе - сүп-сарға күмелгән, тәртипһеҙлек хөкөм һөргән ахыры ғына иҫтә ҡалыуын әйтеп китергә була, мөмкинлектән файҙаланып...

Июндәге башҡа мөһим даталарҙы ла һанап сығыу фарыздыр. Халыҡ-ара һыу яткылыҡтарын таҙартыу (**1**), Рус теле, йәғни Пушкин көнө (**6**), Социаль хеҙмәткәр (**8**), Халыҡ-ара архивтар, Халыҡ-ара дуҫтар (**9**), Миграция хеҙмәткәрҙәре (**14**), БР Матбуғат һәм мәғлүмәт хеҙмәткәрҙәре (**14**), Халыҡ-ара блогер (**15**),Медицина хеҙмәткәрҙәре (**16**), Хәтер һәм ҡайғы көнө, Бөйөк Ватан һуғышы (1941) башланған көн (**22**), Славяндарҙың дуҫлыҡ һәм берләшеү (**25**), Сығарылыш тантанаһы (**25**), Наркотиктар ҡулланыуға һәм уларҙың законһыҙ әйләнешенә ҡаршы көрәш (**26**), Йәштәр (**27**), Бөтөн донъя балыҡсылыҡ (**27**) көндәре билдәләнә.

**Июндә тыуғандар:**

**2** - филолог, яҙыусы, филология фәндәре докторы, профессор, 1954-1964 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Әхнәф Харисов**тың тыуыуына - **105 йыл** (1914-1977).

**22** - педагог, философ, журналист, педагогика фәндәре докторы, 1990-2005 йылдарҙа БДУ, М.Аҡмулла исемендәге БДПУ профессоры **Самат Мөхәмәтйәнов**ҡа - **70 йәш** (1949).

**24** - танылған ҡурайсы, педагог, 1949-1983 йылдарҙа М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры, БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы **Ғата Сөләймәнов**тың тыуыуына - **105 йыл** (1914-2001).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ШАҢДАУ

**Яратып уҡыған гәзитебеҙҙең быйылғы 13-сө һанында "Миллилек тойғоһо рухи ихтыяж булараҡ нығына" тигән мәҡәлә баҫылғайны. Унда телгә алынған мәсьәләләр мине лә күптән борсой, шуға мәҡәлә авторының фекерҙәре менән тулыһынса килешәм.**

# АРАЛАШЫУ УРЫНЫ...

## бик тә кәрәк беҙгә

Ысынлап та, башҡорт донъяһына арналған ниндәйҙер саралар үткәрергә булһа, уны ойоштороусылар тәғәйен урын, зал йә иркен фойе кеүек урын таба алмай ҡаңғыра; теге йәки был мәҙәниәт һарайы етәкселегенә инәлергә, түләргә тура килә. Мин үҙебеҙҙең "Башҡорт йорто"н булдырыу хаҡындағы фекергә бер аҙ өҫтәп әйтергә теләйем, тел төбөн аңлағанһығыҙҙыр. Бына шундай саралар, йәки башҡорт дебет шәлдәре, бал һәм бал продукттары, оҫта ҡулдар тауарҙарынан күргәҙмә-сауҙа саралары, һәр төрлө конкурс, ярыштар ҙа әлеге үҙебеҙҙең бинала үткәрелер ине. Әлбиттә, унда ла зал, урын өсөн түләргә тура киләсәк, уның ҡарауы, берҙән, был арзаныраҡҡа төшһә, икенсенән, аҡса ла ситкә китмәйәсәк. Бына әле мосолман халҡы көтөп алған ураҙа ла ахырына килеп етте. Күптәр яҡындары, дуҫ-иштәре менән осрашып, ифтар (ауыҙ асыу) мәжлесен бергә үткәрергә теләй. Әлеге йортобоҙҙағы ашхана йәки кафе ошондай саралар, шулай уҡ аят мәжлестәре үткәреү урындарына ла әйләнәсәк, иманым камил. Ә инде айыҡ башҡорт туйҙары, юбилей кисәләре тураһында әйтеп тормаһаң да аңлашыла. Мәҡәлә авторы хаҡлы: был, әлбиттә, ашап-эсеү, күңел асыу урыны ғына булмаясаҡ. Мәҫәлән, әсә телен өйрәнергә теләгән кешеләр өсөн курстар эшләһен ине бында. Ошо уңайҙан бер факт тураһында телгә алып китмәксемен. Ҡыҙымдың Әлиә исемле хеҙмәттәше бәләкәйҙән башҡортса белмәй үҫә, сөнки атаһы башҡорт булһа ла, әсәһе икенсе милләттән икән. Ғаиләлә һәр саҡ русса аралашалар, ләкин был ҡыҙ үҫә килә башҡорт теле менән ҡыҙыҡһына башлай, сөнки бергә уҡыған, эшләгән дуҫтарының, үҙе әйтмешләй, "иң яҡындары, тоғролары" - башҡорттар. Әлиәне улар ҙа өйрәтеп ҡарай һөйләшергә, ләкин был ҡыҙ бик ныҡышмал булып сыға. Ул башҡортса уҡырға һәм яҙырға ла ныҡлап өйрәнергә теләй, тик Өфөлә ундай мәктәп тә, хатта курс та булмауын асыҡлап, аптырашта ҡала. Ахырҙа, ваҡытты бушҡа юғалтмайым, тип, татар теле курсына яҙыла...

Бына шулай көтөлмәгән хәлдәр ҙә булып тора, шуға ла туған телен өйрәнергә, бер-беренеһе менән аралашырға теләгән кешеләргә, бигерәк тә йәштәргә ярҙам итеү һәм тейешле шарттар булдырыу йәһәтенән дә бик кәрәк үҙебеҙҙең "Башҡорт йорто."

**Ҡәҙриә ӨМӨТБАЕВА,**
**хаҡлы ялдағы уҡытыусы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓1 июлдән Башҡортостандың район хакимиәттәрендә "хакимиәт башлығының эшҡыуарлыҡ буйынса урынбаҫары" тигән яңы вазифа индерелә. "Барлыҡ 63 муниципалитетта эшҡыуарлыҡ проблемаларын аңлаған һәм хакимиәттәрҙә тейешле ҡарарҙарҙы раҫларға һәләтле кеше була", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Өфөлә үткән "Минең бизнесым" үҙәге менән таныштырыу сараһында.

✓Күмертау ҡалаһы хакимиәтенең элекке башлығы Борис Беляев Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры - торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Бынан алда ошо вазифаны биләгән Михаил Киреев хәҙер хөкүмәттә хәүефһеҙлек, Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы, Юстиция буйынса дәүләт комитеты, Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы менән үҙ-ара килешеп эш итеү мәсьәләләре өсөн яуаплы. Элек был йүнәлештәр өсөн яңыраҡ донъя ҡуйған Артур Әхмәтханов яуап бирҙе.

✓Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы ойошторолоуының 80 йыллығын билдәләне. Ҙур залда "Башҡорт дәүләт филармонияһы: 80 йыллыҡ роман" исемле юбилей гала-концерты уҙҙы. Юбилярҙарҙы Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы исеменән мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова ҡотланы. Юбилей миҙгеленең йомғаҡлау концерты тамашасыларға бай театрлаштырылған тамаша бүләк итте.

✓"Уралсиб" банкы ағымдағы йылдың 27 майынан 6 йылға вклад аҫҡан граждандар өсөн ипотека кредиты буйынса ставканы йылына 5,5 процент билдәләргә хәл итте (элек 6 процент ине). Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе урынбаҫары Егор Родин фекеренсә, бындай үҙгәрештәр ипотека ставкаһын кәметеү йәһәтенән "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проектын һәм "Башҡортостан Республикаһы ипотекаһы" төбәк проектын тормошҡа ашырыуҙа мөһим аҙым булып тора.

✓"Тамыр" телеканалының бер юлы ике эше "ТЭФИ-Kids 2019" Рәсәй милли телевизион премияһының финалына сыҡты."Тау-тау хәбәр" проекты "Балалар өсөн аҙналыҡ мәғлүмәт программаһы" номинацияһында өс финалсы иҫәбенә инде. Милли премия еңеүселәре 18 июндә Мәскәүҙә бүләкләү тантанаһында иғлан ителә. Премияны ойоштороусы - Рәсәй телевидениеһы академияһы.

✓ *Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезында республика Башлығының үҙе белгән тиклем башҡорт телендә сығыш яһап, башҡорт телен модаға индерәйек, тигән тәҡдиме шунда уҡ ыңғай ҡабул ителде.*



ҠЫҪҠАСА

# АЙЫҠ БАЙРАМДАР

✓ **Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "йоланы" боҙоп, һабантуйҙарҙы спиртлы эсемлекһеҙ уҙғарырға тәҡдим итте.** Республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары Башҡортостан ҡалаларында һәм ауылдарында һабантуй көндәрендә алкоголь һатыуҙы сикләүгә йүнәлтелгән закон проектын ҡарай башланы. Унда Йәштәр көнөндә (27 июндә), Белем көнөндә (1 сентябрҙә, әгәр 1 сентябрь йәкшәмбегә тура килһә, 2 сентябрҙә), республиканың һәр районында айырым бер көндә үткәрелгән һабантуй халыҡ байрамында спиртлы эсемлек һатыуҙы тыйырға тәҡдим ителә. "Әйҙәгеҙ, ҡунаҡтарҙы алкоголһеҙ эсемлек менән һыйлау йолаһын башлайыҡ, - тип тәҡдим итте Хәбиров. - Беҙҙең сикләүҙәр бөтәһенә лә: халыҡҡа ла, чиновниктарға ла, етәкселәргә лә ҡағыла. Югиһә беҙ ошо идеяны юҡҡа сығарырбыҙ, ниәт изге, һаулыҡҡа һәм именлеккә йүнәлтелгән".

✓ **Республика Дәүләт Йыйылышы депутаттары Башҡортостан Башлығын һайлау көнөн тәғәйенләне. Һайлау 8 сентябрҙә буласаҡ.** Һайлау тураһында республика кодексының 10-сы статьяһына ярашлы, республика башлығы вәкәләттәрен ваҡытынан алда туҡтатҡан осраҡта, һайлау сентябрҙең икенсе йәкшәмбеһендә уҙғарыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республика парламенты депутаттары һайлау участкаларының эшен ике сәғәткә оҙайтты. Башҡортостан Башлығын һайлауҙа улар иртәнге сәғәт 7-нән киске 9-ға тиклем эшләй. "Был норма күпселек халыҡҡа тауыш биреү мөмкинлеген бирергә тейеш, - ти Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Хәҙер бөтәһенең дә эш графигы төрлөсә. Күптәр сменалап эшләй, йәкшәмбе көндө барыһы ла ял итмәй, айырыуса уныш йыйыу осоронда. Эш ваҡытын арттырыу һайлау комиссияларының эшендә ҡыйынлыҡ тыуҙырмаҫ тип уйлайым".

✓ **Башҡортостан - һанлы һайлау участкаларын индереү буйынса федераль эксперименттың пилот төбәктәре иҫәбендә.** Эксперименттың асылы шунда: 8 сентябрҙә - Берҙәм тауыш биреү көнөндә - Мәскәүҙә 30 һанлы участка асыла, уларҙа Башҡортостанда йәшәүселәрҙең республика Башлығын һайлауҙа һанлы бюллетень менән тауыш биреү мөмкинлеге бар. Сөнки республикала йәшәгән 6 мең самаһы һайлаусының тауыш биреү көнөндә Мәскәүҙә булыуы ихтимал. Улар илебеҙҙең баш ҡалаһындағы 30 һанлы участканың береһенә килеп, Башҡортостан Республикаһы Башлығын һайлауҙа тауыш биреү мөмкинлегенә эйә буласаҡ. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Элла Памфилова менән осрашыуында 2019 йылда Рәсәйҙә төбәк һайлауҙарын уҙғарыу мәсьәләләре тикшерелде.

КӨНАУАЗ

# ЙӨРӘКТӘРҘЕ ЙЫЛЫТАЙЫҠ!

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың башҡорт теленән диктант яҙғанда: "Районларға сыҡһаң да, ҡалаларҙа ла оло йәштәге кешеләр килеп, башҡорт телендә мөрәжәғәт итә. Әлбиттә, уларға үҙ телендә һөйләшеүе, беҙгә нимәләр аңлатыуы еңел. Улар менән миңә лә башҡортса һөйләшергә тура килә. Икенсе яҡтан, башҡортса мөрәжәғәт итеп, шул телдә яуап алһалар, кешеләрҙең йөрәге йылына, уларға күңеллерәк булып китә", - тигәйне.**

... Сираттағы ялымды ауылда үткәргән бер мәлдә район хакимиәтенән бер төркөм белгестәр халыҡ менән осрашырға килде. Сара ауыл клубында үтте. Ҡыҙыҡһынып, мин дә барырға булдым. Зал шығырым уҡ тулы булмаһа ла, халыҡ байтаҡ йыйылған, күбеһенсә, оло йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар һәм бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәре. Президиумда урын алған ҡунаҡтар халыҡты райондың социаль-иҡтисади хәле менән таныштырып сығыш яһаны, әммә телмәрҙәрендә яңылыш ҡына булһа ла башҡортса бер һүҙ ҙә ишетелмәне. Ахырҙа, залдан, башҡортса һөйләгеҙ, беҙ бер нәмә лә аңламайбыҙ, тигән реплика ташлай башланылар. Ә сығыш яһаусыларҙың үҙ туҡһаны туҡһан - һөйләп бөттөләр ҙә, ниндәй проблемалар барлығын, халыҡты нимә ҡәнәғәтләндермәгәнен белешә башланылар. Әлбиттә, бюджет тармағында эшләүселәр бындай осраҡта шым ҡалыуҙы хуп күрә, ә русса белмәгән ололар дөрөҫөн әйтергә ҡурҡмай ҙа бит, әммә башҡортса бер ауыҙ һүҙ әйтмәгән власть әһелдәренә нисек итеп белер-белмәҫ руссалары менән аңлатһындар? Ә бит белгестәр саф башҡорт ауылы икәнен белеп килгән, улар бюджеттан аҡса ала, ни өсөн улар республикалағы икенсе дәүләт телен өйрәнергә теләмәй? Ана бит, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының I Бөтә Рәсәй съезында республика Башлығының үҙе белгән тиклем башҡорт телендә сығыш яһап, башҡорт телен модаға индерәйек, тигән тәҡдиме шунда уҡ ыңғай ҡабул ителде. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышында Әлфәрис Байсуриндың башҡортса сығыш яһауы бығаса бер ишара булды - хәҙер башҡорт депутаттары фекерҙәрен үҙ телендә белдерергә оялмай.

БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа башҡорт телендәге сығыш ыңғай ҡабул ителгәс, хәҙер район Советтары ла яйлап башҡорт телен ҡулланылышҡа индерә башланы. Ошо көндәрҙә Салауат район Советында үткән сираттағы сессияла ла, уның рәйесе Ринат Әбдрәшитов белдереүенсә, бик күп мәсьәләләр араһында балаларҙың йәйге ялын ойоштороу һорауын башҡорт телендә ҡарағандар икән. "Депутаттар араһында башҡа милләт вәкилдәре лә, рустар ҙа бар, улар был яңылыҡты нисек ҡабул итте?" - тип ҡыҙыҡһынам. "Уларға мәғлүмәтте рус телендә тараттыҡ, фекер алышыуҙарҙы тәржемә иттек. Ни тиһәң дә, ултырышта депутаттарҙан тыш, район прокуроры ла, башҡа ведомство вәкилдәре лә була. Был аҙымды башҡорт телен популярлаштырыу маҡсатынан эшләүебеҙҙе аңлаттыҡ. Барыһы ла аңлап ҡабул итте", - ти Ринат Хәтмулла улы.

Хәйбулла районынан да гәзит уҡыусылар район Советы ултырышының башҡортса үтеүенә ҡыуанып шылтыратты редакцияға. Тимәк, башҡорт теле - ыҙғыш алмаһы түгел, аңлашып, килешеп эшләгәндә, ыңғай ҡарашлы башҡа милләт вәкилдәре лә дәүләт кимәлендәге рәсми сараларҙың башҡорт телендә алып барылыуына ҡаршы түгел, бары тик үҙебеҙгә, ошо телдә һөйләшеүселәргә, уны киңерәк ҡулланырға һәм хоҡуҡтарыбыҙҙы талап итә белергә һәм ошо йүнәлештә ныҡлы позицияла торорға кәрәк.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЕР БАЙЛЫҒЫ КЕМДӘ?

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров төбәктә хоҡуҡ тәртибен тәьмин итеү буйынса даими эшләгән координация кәңәшмәһе ултырышы үткәрҙе һәм республика бюджетына ер аҫтын файҙаланыу өлкәһенән керемдәрҙең һиҙелерлек артыуын билдәләне.**

Билдәләнеүенсә, бөгөнгә республикала 200-ҙән ашыу "рәсми" ер аҫтын файҙаланыусы иҫәпләнә, уларҙың бер өлөшө табыш тураһында отчет бирмәй, файҙалы ҡаҙылмалар сығарған өсөн һалым түләмәй һәм лицензия талаптарын үтәмәй. Шуға күрә уларҙың эшмәкәрлеген контролдә тотоуҙы тағы ла көсәйтергә кәрәк, тип иҫәпләй төбәк етәксеһе. Әйтәйек, былтыр лицензия хужаларының 139 закон боҙоу осрағы асыҡланған. 100-гә яҡын ойошма административ яуаплылыҡҡа тарттырылған. Республикаға килтерелгән зыян 31 миллион һум тәшкил иткән. "Бындай компанияларҙың күпме аҡса эшләгәнен иҫәпкә алғанда, беҙ һалған штрафтар ҙур түгел. Ошо турала, шулай уҡ намыҫһыҙ предприятиелар өсөн язаны көсәйтеү мөмкинлеге хаҡында уйларға кәрәк. Беҙгә тейешле тәҡдимдәр менән федераль кимәлгә сығырға кәрәк булыуы ихтимал, - тине Радий Хәбиров. - Лицензияны тартып алыу көйөк вариант бар. Уҙған йылда - 41, быйыл беренсе кварталда - 15, 2018 йылда 71 лицензия гәмәлдән сығарылған, ағымдағы йылдың беренсе кварталында - тағы 46". Ултырышта билдәләүҙәренсә, быларҙың барыһы ла йыш ҡына "законлы эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлегенең законһыҙ тормошҡа ашырылыуы" һөҙөмтәһе булып тора. Икенсе төрлө әйткәндә, тыштан ғына законлы эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге күренеше булдырыла. Былтыр Башҡортостанда рейдтар ярҙамында дөйөм таралған файҙалы ҡаҙылмаларҙы рөхсәтһеҙ сығарыуҙың 160 осрағы асыҡланған. Дүрт енәйәт эше ҡуҙғатылған.

# НИҢӘ ТЫУЫМ АҘ?

**Ағымдағы йылдың беренсе кварталында Башстат республикала тыуымдың кәмеүен һәм үлемдең аҙайыуын теркәгән. Ғинуар-мартта төбәктә 10446 сабый тыуған (2018 йылдың беренсе кварталына ҡарағанда 1145-кә аҙыраҡ). Үлем осраҡтары 16957-нән 16366-ға тиклем кәмегән. Был хаҡта Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин хәбәр итте.**

Үлем сәбәптәре элеккесә ҡала. Йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән үлем осраҡтары 16 процентҡа артҡан, онкология сирҙәренән үлем 3 процентҡа кәмегән, тышҡы сәбәптәрҙән - 29 процентҡа аҙыраҡ. Ләкин шуның менән бергә юл-транспорт ваҡиғаларында үлем осраҡтары 30 процентҡа артҡан - беренсе кварталда юлдарҙа 21-гә күберәк кеше һәләк булған. Ҡалаларҙа йышыраҡ инфекцияларҙан һәм яман шештән вафат булалар. Ауылдарҙа иһә тын алыу органдары, аш һеңдереү, бөйөр-енес сирҙәренән һәм тышҡы сәбәптәрҙән. Сабыйҙарҙың үлем осраҡтары ла артҡан: уҙған йылдың ғинуар-мартында - 72 (1 йәшкәсә сабыйҙар), быйыл беренсе кварталда 76 бала яҡты донъя менән хушлашҡан. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров башҡа төбәктәрҙең тыуымды арттырыу буйынса тәжрибәһен өйрәнергә һәм иң ауыр күрһәткестәр теркәлгән райондарҙың мәғлүмәттәрен тикшерергә ҡушты.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөгә 100 туҡталыш павильоны һатып алыу һәм төҙөү өсөн 100 миллион һум бүленә. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының эшсе төркөмө ултырышында ошо хаҡта белдерелде. Депутаттар фекеренсә, республикала автобус туҡталыштары етешмәй. Был хәл пассажирҙарҙың хәүефһеҙлегенә лә йоғонто яһай. Эшсе төркөм ағзалары юл ведомствоһына ошо мәсьәләне өйрәнергә һәм республикала туҡталыш павильондарын төҙөү буйынса тәҡдимдәр индерергә кәңәш итте.

✓Кот-д'Ивуарҙа халыҡ-ара шашка буйынса Донъя кубогы этабы тамамланды. Башҡортостан спортсыһы Тамара Танһыҡҡужина Африкала Донъя кубогы этабында еңеү яуланы, Айгөл Иҙрисова - Донъя кубогының дөйөм иҫәбендә беренсе. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында Донъя кубогының дөйөм иҫәбендә Айгөл Иҙрисова беренсе урынға сыҡты (457 мәрәй), икенселә - Тамара Танһыҡҡужина (447 мәрәй), Айнур Шәйбәков - рейтингтың бишенсе баҫҡысында.

✓Милли проекттар сиктәрендә Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә 16,4 миллиард һум бүленә. Шуның ете миллиард һумдан ашыуын йөрәк-ҡан тамырҙары һәм онкология сирҙәренә ҡаршы көрәшкә тотоноу ҡуҙаллана. Өфөлә онкология диспансерының яңы хирургия корпусы сафҡа индерелә. Башҡортостандың баш ҡалаһында, шулай уҡ Күмертауҙа, Нефтекамала, Стәрлетамаҡта, Октябрьскийҙа, Салауатта, Белорет, Бөрө һәм Дыуан райондарында амбулатор онкология ярҙамы үҙәктәре барлыҡҡа килә. Был республика районарында йәшәүселәргә тейешле медицина ярҙамын алыу өсөн 300 саҡрым алыҫлыҡтағы Өфөгә барырға кәрәкмәй тигәндә аңлата.

✓"Салауат Юлаев" хоккей клубы голкиперы Юха Метсола Континенталь хоккей лигаһы 11-се миҙгеленең иң шәп ҡапҡасыһы тип танылды. Был хаҡта 2018/19 миҙгелен ябыу тантанаһында иғлан ителде. Тантанала Юха Метсоланың донъя чемпионатта 35 еңеү яулауын һәм үҙ ҡапҡаһына ырғытылған 1978 (94,1 процент) шайбаны кире ҡағыуын билдәләнеләр.

✓Башҡорт режиссеры Булат Йосоповтың "Бабич" һәм "Беренсе Республика" фильмдары FESTPRO халыҡ-ара кинофестивалендә еңде. Фестиваль 13-19 майҙа Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Пензала һәм Владимирҙа уҙҙы. "Бабич" кинотаҫмаһы бер нисә номинацияла еңеү яуланы. Кинофестивалгә бөтәһе 60 илдән 568 ғариза килде. Конкурс төбәктәрҙә кинематографты популярлаштырыу һәм кинематографистарға ярҙам күрһәтеү маҡсатында уҙғарыла.

✔ *Киске программа сәғәт 6-ла "Өфө - Беренсе республиканың баш ҡалаһы" тип аталған театрлаштырылған тамашанан башланасаҡ. Зәйнетдин, "Арғымаҡ", "Каруанһарай" төркөмдәре, Рушана Вәлиева сығыш яһаясаҡ.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Был көндәрҙә баш ҡалала ла байрамдар парады тантана итте: "Яҙғы бал", "1000 велосипедсы көнө", ветерандарҙың "Боевая высота" патриотик йыр фестивале, Халыҡ-ара Балаларҙы яҡлау көнөнә арналған саралар. Ҡала округы хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмә лә ошо сараларҙы барлауҙан башланды. Ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин район хакимиәттәре башлыҡтарына, ҡыҙыҡһыныусы ведомстволар хеҙмәткәрҙәренә алда торған сараларҙы ла юғары кимәлдә үткәреү һәм балаларҙың, тамашасыларҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү бурысын йөкмәтте. Шулай уҡ Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың бер нисә көнүҙәк мәсьәләгә иғтибар йүнәлтеүе, атап әйткәндә, район-ҡалаларҙа һабантуй байрамдарын, шулай уҡ халыҡ күп йөләп ителгән сараларҙы уҙғарғанда алкоголь продукцияһын һатыуҙы тыйыу мәсьәләһен күтәреүен билдәләп үтте. Был мәсьәлә баш ҡалаға ла ят түгел, шуға күрә ҡала хакимиәте башлығы уны район хакимиәттәре башлыҡтарына контролгә алырға ҡушты.**

# ОЛО БАЙРАМ - КЕСЕ ТУЙ

Оператив кәңәшмәнең көн тәртибендә Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныу көнө, Рәсәй көнө һәм башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаевтың тыуған көнө уңайынан әҙерләнгән байрам сараларына әҙерлек һәм уларҙы үткәреү мәсьәләләре ҡаралды. Хакимиәттең Мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралыҡ начальнигы Шамил Абдраҡов белдереүенсә, тантаналарҙың рәсми өлөшө 11 июндә үтәсәк. Ул республика һәм Өфө ҡалаһы хакимиәте етәкселеге ҡатнашлығында Дуҫлыҡ монументына һәм Салауат Юлаев һәйкәленә сәскәләр һалыуҙан башланасаҡ. Шул уҡ көндө Ҡала мәҙәниәт һарайында "Берҙәмлек" Халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивалендә ҡатнашыусыларҙың хәйриә концерты үтәсәк. 12 июндә байрам саралары бер нисә төп майҙансыҡта: Ленин исемендәге майҙанда, "Торатау" конгресс-холы артындағы амфитеатрҙа, ҡала райондарының ял һәм мәҙәниәт парктарында уҙасаҡ. Ленин исемендәге майҙанда иртәнән халыҡ кәсептәре, биҙәү-ҡулланма сәнғәт оҫталарының "Оҫталар ҡалаһы" күргәҙмәһе ҡуйыласаҡ. Сәғәт 10-да байрам сараларына балалар һабантуйы старт бирәсәк. Тантаналы мәлдәрҙең береһе булып Өфө гарнизонының яңығын һүндереү техникаһы парады торасаҡ.

Беренсе тапҡыр Ленин майҙанында "Өфө өсөн уйнайым", "Яраткан ҡаламды төшөрәм", "Өфөмә телэгем" акциялары ойошторолаҫаҡ һәм барлыҡ теләүселәргә яраткан көйҙәрен уйнарға, яраткан йырҙарын йырларға, тыуған ҡалаһына теләген яҙырға мөмкинлек биреләсәк. "Өфө өсөн уйнайым" акцияһында ҡатнашыусылар, билдәле шәхестәр төрлө музыка ҡоралдарында уйнап, видеоны уҙҙәренең социаль селтәрҙәрҙәге сәхифәләренә ошо хештег менән һаласаҡ. Акцияны ҡала халҡы ла күтәреп алыр, тигән өмөт бар. Артабан ул Ленин исемендәге майҙанда 12 июндә дауам итәсәк. Рәссамдар өсөн "Республиканың 100 йыллығына - 100 рәссам" акцияһы сиктәрендә асыҡ һауала пленэр уҙасаҡ һәм унда 100 йәш рәссам баш ҡала күренештәрен һүрәтләп, ҡалаға бүләк итәсәк. Иҫтәлеккә фотоға төшөү өсөн махсус фотозоналар ҙа буласаҡ.

Бер үк ваҡытта М. Ғафури исемендәге мәҙәниәт һәм ял паркында "Тыуған көнөң менән, яраткан ҡалам!" тигән мәҙәни сара үтәсәк. Байрам көнөндә сәғәт 12-лә Ленин майҙанындағы гидродинамик сәғәт фонтанын асыу ҙа планлаштырыла. Шулай уҡ бейеү флешмобы ойоштороласаҡ һәм баш ҡаланың тыуған көнөнә уны матур итеп биҙәү буйынса ойошторолған "Байрамса Өфө" конкурсы еңеүселәре бүләкләнәсәк. Сәғәт берҙә майҙандағы ҙур экрандан Айнур Асҡаровтың "Из Уфы с любовью" фильмы күрһәтеләсәк. Рус драма театры алдындағы төп майҙанда сәғәт 3-тә "Берҙәмлек" Халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивалендә ҡатнашыусыларҙың гала-концерты башланасаҡ. Унда донъяның төрлө мөйөштәренән килгән 300 кешенең ҡатнашыуы күҙаллана. Артабан "Асыҡ микрофон" ҡала конкурсы еңеүселәре сығышы көтөлә. Бөгөнгә 50-нән ашыу ғариза бирелгән, иң-индәр 7 июндә һайлап алынасаҡ. Киске программа сәғәт 6-ла "Өфө - Беренсе республиканың баш ҡалаһы" тип аталған театрлаштырылған тамашанан башланасаҡ. Көн дауамында ижади коллективтар тамашасыларҙы уҙҙәренең сығыштары менән ҡыуандырасаҡ. Зәйнетдин, "Арғымаҡ", "Каруанһарай" төркөмдәре, Рушана Вәлиева сығыш яһаясаҡ.

"Торатау" конгресс-холы артындағы амфитеатрҙа 12-15 июндә "Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәттәр фестивале үтәсәк. Сара программаһы "Симфония тәнә" һәм "Этнотөн" вәғәҙә итә, шулай уҡ Аскар Абдразаковтың, Радик Юльяҡшиндың, Башҡортостандың популяр төркөмдәренең, саҡырылған ҡунаҡтар - Алһыу һәм Валерий Меладзеның сығыштары көтөлә. Дүрт көн дауам иткән фестивалдә 100 меңдән ашыу кеше ҡарау ихтималлығы бар. 12 июндә "Евразия йөрәге" фестивален Милли кейем байрамы асасаҡ. Сәғәт 12-лә ҡатнашыусылар М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры алдынан Конгресс-холл артындағы амфитеатрға тиклем парадта үтәсәк. Унда Башҡортостанда йәшәгән барлыҡ милләттәр ҡатнашасаҡ, уларға Өфөлә белем алыусы сит ил студенттары ла милли кейемдәре менән ҡушыласаҡ. Парадты Дуҫлыҡ әйләнә-бәйләне тамамлаясаҡ. Шул уҡ ваҡытта амфитеатрҙа Надежда Бабкинаның "Рәсәй йырҙары" фестиваль-марафоны башланасаҡ. Унда Башҡортостан исеменән "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле сығыш яһаясаҡ. Киске сәғәт 11-ҙә амфитеатр майҙанында байрам фейерверкы атыласаҡ.

Әлбиттә, байрамдар килә лә китә, була ла үтә. Бер мәлгә тура килгән оло байрамдар бер кесе туй кеүек булһа ла, көндәлек тормош ығы-зығыһы бер генә минутка ла иҫтән сығырға тейеш түгел. Әлеге ваҡытта Өфөлә юлдарҙағы соҡорҙарҙы "ямау" менән бер рәттән, ихаталарҙы капиталь ремонтлау эшенә тотондолар. Быйылға "Башҡорт ихаталары" программаһына ингән 85 ихата, 145 йорт ремонтланырға тейеш булһа, 16 ихатала һәм 20 йортта әлеге ваҡытта ремонт эштәре башланған. Әгәр конкурс процедураларында финанс сығымдарын экономиялау ихтималлығы барлыҡҡа килһә, резервта тағы ла 25 ихата территорияһы һәм 25 күп фатирлы йорт тора. Шулай уҡ башҡа тармаҡтар буйынса ла йәйге ремонт эштәре дауам итә.

Земфира ХӘБИРОВА.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

## БЕЙЕП КИНӘНДЕЛӘР

**Баш ҡаланың бөтә белем усаҡтарын берләштергән сараларҙың береһе - сығарылыш уҡыусыларының "Яҙғы бал"ы һигеҙенсе тапҡыр үткәрелдә. "Уфанет" компанияһының масштаблы проектында быйыл биш меңгә яҡын уҡыусы ҡатнашты, Өфөләге Совет майҙанына уларҙы ҡарарға меңәрләгән тамашасы йыйылды.** "Яҙғы бал" традицион рәүештә айырым майҙансыҡтарҙа төрлө бейеү төнәрәктәрендә шөғөлләнгән коллективтарҙың сығыштары, бейеү оҫталығын күрһәтергә теләүсе йәштәрҙән ярыштары менән башланып китте. Шулай ҙа иң ҡыҙыҡлыһы - Пушкин урамы буйлап 231 метрға һуҙылған "Сығарылыш уҡыусылары аллеяһы" булғандыр. Быйылғы 11-селәр араһында - 123 Анастасия, 96 Диана, 75 Екатерина, ә башҡорт исемдәренән 41 Тимур, 17 Әлиә, 13 Әминә, 10 Айнур, Әмир, Искәндәр. Сығарылыш уҡыусыларының фотоһүрәттәре аҫтында һәм буласаҡ һөнәрҙәренә бағышланған плакаттарында ла бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерелгәйне. Йылдағыса, иң популяр һөнәрҙәр араһында был юлы ла табип һөнәрен - 150, программист - 148, инженер - 101, иҡтисадсы һөнәрен 85 уҡыусы һайлаған. "Яҙғы бал" сараһының төп өлөшөндә уҡыусыларҙы Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин һәм Каринэ Хәбирова тәбрикләне. Быйыл шарҙар осорорға рөхсәт ителмәһә лә, сағыу ялтырауыҡлы таҫмаларҙан фейерверк, 2029 йылдың сығарылыш уҡыусыһы яңғыратҡан ҡыңғырау сыңы Совет майҙанына йыйылған сығарылыш уҡыусыларының шатлығын күккә ашырҙы.

## БЕРҘӘМ КАРТА МЕНӘН

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса, 1 июлдән республикала берҙәм транспорт картаһын индереү буйынса проект старт ала. Шул ваҡыттан алып Өфөлә, Стәрлетамаҡта һәм Салауатта ҡала һәм ҡала яны бәйләнешендәге йәмәғәт транспортында уның менән файҙаланырға мөмкин, тип белдерҙеләр республиканың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетында.** Транспорт картаһының хаҡы 50 һум була. Водителдән билет һатып алыу мөмкинлеге һаҡлана, ләкин ул ҡиммәтерәккә төшә. "Бөгөн республика билеттың сикке суммаһы - 25 һум. Шуға ярашлы, автобуста бер тапҡыр теге йәки был яҡҡа йөрөү ошо сумманан юғарыраҡ булмаҫ", - тине Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе Тимур Мөхәмәтйәнов. Берҙәм транспорт картаһын "Рәсәй почтаһы" бүлексәләрендә, "Өфө-матбуғат" киоскыларында, ҡайһы бер магазиндарҙа, "Һаҡлыҡ банкы" һәм "Уралсиб" бүлексәләрендә, Берҙәм транспорт картаһын хеҙмәтләндереү пункттарында һатып алырға мөмкин. Граждандарҙың айырым категориялары өсөн барлыҡ льготалар һаҡлана. Проекты тормошҡа ашырыуҙың киләһе этабында Берҙәм транспорт картаһының төрлө тарифтарын индереү күҙаллана. Һүҙ, атап әйткәндә, транспорттың төрлө төрҙәрен файҙаланыу тураһында бара. "Тәү сиратта был Өфө агломерацияһына ҡағыла. Мәҫәлән, Өфөнән алыҫтағы тораҡ пункттан йәки Шакшанан, икенсе тораҡ пункттан юлға сыҡҡан кеше транспорттың төрлө төрҙәрендә берҙәм тариф буйынса транспорт картаһы менән ҡуллана ала. Беренсе этапта, был - автобус. Киләсәктә троллейбустарҙы, трамвайҙарҙы, ҡала электричкаһын йәлеп итеү күҙаллана", - тип өҫтәне Тимур Мөхәмәтйәнов.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Үпкәләү

❖ Үпкәләргә яратыусыларға "Дельфин илауы" тип аталған күнегеү. Иғтибар иткәнегеҙ бармы, сабыйҙар нисек илай? Улар ике тапҡыр шәпшәп итеп тын ала һәм бер тапҡыр оҙон итеп тын сығара. Был уларға тәбиғәттән һалынған. "Дельфин илауы" тигәне лә ошо, ошо рәүешле "илап" алһағыҙ, үпкәләрегеҙ йыйылмаҫ.

### Теш ҡаҙнаһы

❖ Теш ҡаҙнаһы ҡанаһа, эт дегәнәге үләненең спирттағы төнәтмәһе менән ҡаҙналарҙы ыышҡығыҙ.

### Үксәләргә

❖ Ҡабаҡтың йомшаҡ өлөшөн бер аҙға үксәләргә һалып, йыуып төшөрһәгеҙ, аяҡ тиреһе йомшарып китәсәк.

### Бәпембә

❖ Артритты дауалау өсөн: 6 грамм бәпембә тамырына 1 стакан һыу ҡойорға, 10 минут ҡайнатырға, ярты сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Лямблиоз мәлендә: 1 ҡалаҡ ваҡланған бәпембә тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 15 минут ҡайнап ултырған һауытта тоторға, 45 минут төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмәгә 1 стакан күләменә еткәнсе һыу өҫтәргә. Һыуытҡыста 2 тәүлек һаҡлана. Көнөнә 3-4 тапҡыр, йылытып, ашарҙан 15 минут алда 1/3 стакан эсергә.

❖ Метеоризмдан: 2 ҡалаҡ ваҡланған бәпембә тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 8 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр, ашарҙан алда 1/4 стакан эсергә.

❖ Бауыр циррозынан: а) 1 балғалаҡ бәпембә тамырына 1,5 стакан һыу ҡойорға, 5 минут ҡайнатырға һәм сәй итеп эсергә; б) бәпембә сәскәһен йыйып, уны һауыттың төбөнә бер ҡат итеп һалып сығырға, өҫтөнә шәкәр һибергә һәм 1-2 аҙнаға пресс менән баҫтырып ҡуйырға. Варенье урынына ҡулланырға.

Айбикә ЯҠУПОВА.

✓ *Мәктәп төҙөлгәндә 500 самаһы балаға иҫәпләнһә, быйылғы уҡыу йылында ике сменала 858 бала белем алған. Ә инде беренсе сентябргә балалар һаны 970 буласаҡ, сөнки 1-се синыфҡа барлығы 150 бала килеүе көтөлә.*



ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!

# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

**Таулы Бөрйәндә XX быуаттың 50-70-се йылдарына ҡараған балаҫтарҙа фон бөтөнләй юҡ. Биҙәк тар буйҙарҙан (киңлеге 1-3 см) тора. Төҫтәренә килгәндә, зәңгәр, алһыу, ҡурай еләге төҫө күберәк ҡулланыла, күк, шәмәхә төҫтәре сағыу һары һәм ҡара, йәки ҡыҙыл һәм һары төҫтәр менән бергә килә. Ҡара төҫ көньяҡта, ҡыҙыл төньяҡтараҡ таралған. Ғәҙәттә, бер балаҫта 5 төҫ ҡулланыла.**

Башҡортостан Республикаһының Милли музейы коллекцияһында Бөрйән районы Кейекбай ауылынан килтерелгән балаҫтың бер өлөшө һаҡлана. Уның киңлеге 19 см. И. Филатованың экспонатты һүрәтләүе Ағиҙел йылғаһы бөгөлөнә хас балаҫ һуғыу традицияһын асып бирә: "Нигеҙҙең ептәре - өйҙә иләнгән һарыҡ һәм кәзә йөнөнән, улар анил буяуҙары менән һары, зәңгәр, ҡурай еләге төҫө, ҡара, күккә буялған. Ҡылыс ебе ике ҡатлы, киндерҙән, тәбиғи төҫөндә. "Туғыҙ буй" тип аталған биҙәк нигеҙ төҫтәренән яһалған. Һулдан уңға: күк буй (1,5 см), ҡурай еләге төҫө (2,5 см), уртала тар ғына (0,5 см) ҡара буй; зәңгәр (3 см), уртала нигеҙ ебенән һары буй (0,8 см); артабан һары (2 см), күк (1 см), ҡурай еләге төҫө (2 см), зәңгәр (2,2 см), ҡара (1,7 см) буй. Бер төҫтән икенсеһенә күсеү "тештәр" менән, ике төҫтө ике нигеҙ ебе менән сиратлау ярҙамында башҡарыл-



*Бөрйән районы (Брәтәк ауылы) балаҫы. Автор фотоһы. 1976*

ған". "Тештәр" күк-ҡурай еләге төҫө, ҡурай еләге төҫө-зәңгәр, һары-зәңгәр, һары-күк, ҡара-зәңгәр, ҡара-күк.

Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фототекаһында Брәтәк ауылы балаҫтары фотоһы бар (Бөрйән районының төньяҡ-көнбайышы). Унда алда әйтелгән төҫтәр ҡулланылған, бары тик көрән һәм ҡара төҫ юҡ. Ҡурай еләге төҫө һәм зәңгәр төҫ нигеҙ булып килә һәм уларҙа шәмәхә һәм сағыу һары буйҙар айырылып тора. Ҡасандыр ҡыҙыл төҫ киң таралған булһа, хәҙер уның урынына ҡурай еләге төҫөн ҡулланалар. Балаҫ орнаменттарының раппорты бер төрлө:

*//[шәмәхә (1,0) - һары (0,5) - шәмәхә (1,0)] - [һары-зәңгәр (0,5) - һары (1,0) - зәңгәр/һары (0,5)] - [ҡурай еләге төҫө (0,5) - шәмәхә (0,5) - ҡурай еләге төҫө (1,0)] - [зәңгәр/һары (0,5) зәңгәр (0,5) - һары/зәңгәр (0,5) - ҡурай еләге төҫө (1,0)]//

"Тештәр"ҙән торған линиялар, схеманан күренеүенсә, һары-зәңгәр.

*//[аҡһыл - зәңгәр - аҡһыл] (1,0) - [ҡурай еләге төҫө - шәмәхә - ҡурай еләге төҫө] (1,0) - [аҡһыл - һары -аҡһыл] (1,0) - [шәмәхә-һары-шәмәхә] (1,0) - ҡурай еләге төҫө (0,5)//

"Тештәр" аҡһыл фонда һары һәм зәңгәр, ҡалған линиялар тигеҙ.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАШҠОРТ МӘКТӘПТӘРЕ ЛӘ...

## ҡарлуғастары менән хушлашты



**(Башы 1-се биттә).**

• Өфөнөң милли мәктәптәрендә сығарылыш уҡыусылары өсөн айырыуса матур тантаналы саралар ойошторолдо. Мәҫәлән, **Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында** яңы традицияға нигеҙ һалып, башланғыс синыфты тамамлаусы 4-се синыф уҡыусылары 11-се синыфтарға ҡыңғырауҙар бүләк итте. Ә ағай-апайҙары үҙ сиратында быйыл башлап "Әлифба"ны үҙләштергән кескәй дуҫтарына сағыу китаптар тапшырҙы. Уларҙың вальс бейеүе лә үҙенсәлекле килеп сыҡты: сығарылыш уҡыусылары уҡытыусылары, ата-әсәләре менән моңло көйгә талғын ғына өйөрөлдө. Әллә сара тик башҡорт телендә алып барылғанғамы, әллә саҡырылған ҡунаҡтар һәм ата-әсәләр балаларға иң изге теләктәрен туған телдә еткергәнгәме, гимназияның Һуңғы ҡыңғырау байрамы бигерәк тә күңелгә ятты. Белем усағы директоры Зөлфиә Ғәлийәнова хәбәр итеүенсә, был уҡыу йылында гимназияла 768 бала белем алған, шуларҙан 61 уҡыусы 9-сы синыфты, 35 уҡыусы 11-се синыфты тамамлай.

Сығарылыш уҡыусыларын һәм уларҙың ата-әсәләрен Совет районы хакимиәте башлығы Рөстәм Рәхмәтуллин, БР Мәғариф өлкәһендә контроль һәм күҙәтеү идаралығы етәксеһе урынбаҫары Тимур Кәримов, БР Мәғарифты үҫтереү институты проректоры Сынтимер Баязитов, 11-се синыфтарҙың класс етәкселәре Эльмира Хәсәнова һәм Альбина Дәминова тәбрикләне. Һуңғы ҡыңғырау сыңын тыңлаған уҡыусылар менән аралашҡанда барыһы ла яратҡан гимназияларын һағынасаҡтары тураһында әйтте һәм бында бөтәһе лә үҙ-ара дуҫтарса мөнәсәбәттә булыуҙы һыҙыҡ өҫтөнә алды. Уҡыусы күңелендә туған теленә, мәҙәниәтенә ҡарата һөйөү тәрбиәләгән, дуҫлыҡ төшөнсәһен аңлатҡан, аң-белемгә ынтылыш һалған белем усағы ҡарлуғастары менән бына ошолай хушлашты.

• Быйылғы уҡыу йылында **Дим районының 102-се Башҡорт гимназияһында** 11-се синыфты - 22, 9-сы синыфты 79 бала тамамланы. Гимназия директоры Илһам Зиннур улы Ғайсин әйтеүенсә, белем усағы был райондың үҙенсәлекле милли үҙәге булып тора. Гимназия үҙенең микрорайонындағы барлыҡ балаларҙы ла уҡырға алырға тейеш булғанлыҡтан, быйыл, мәҫәлән, бында барыһы 14 милләт вәкиле уҡыған. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бында ишек төбөнән үк башҡорт мөхите бөркөлөп тора. Уҡыу йортоноң үҙенең журналистар клубы, радиоһы, телевидениеһы, хоккей командаһы, уҡытыусылар коллективы тарафынан төҙөлгән үҙешмәкәр театр ҙа бар.

• Ә бына киләһе йылда асылыуының 10 йыллығын билдәләргә әҙерләнгән **Өфө районы Шамонин дөйөм белем биреү мәктәбендә** Рәсәйгә даны таралған "Дарман" бейеү ансамбле, республикала алдынғылыҡты бирмәгән йәш саңғысылар, волейболсылар, баскетболсылар, шулай уҡ буласаҡ сәхнә оҫталары белем ала. Мәктәп төҙөлгәндә 500 самаһы балаға иҫәпләнһә, быйылғы уҡыу йылында ике сменала 858 бала белем алған. Әле 11-се синыфты - 11, ике параллель 9-сы синыфты 46 уҡыусы тамамланы. 11-се синыфтар араһынан - ике, 9-сы синыфтарҙан 4-5 кеше миҙалға дәғүә итә, әммә барыһын да имтихандар асыҡлаясаҡ. Ә инде беренсе сентябргә балалар һаны меңгә яҡынлашып, 970 буласаҡ, сөнки 1-се синыфҡа барлығы 150 бала килеүе көтөлә.

• **Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика интернат-гимназияһында** ла Һуңғы ҡыңғырау, һәр йылдағыса, шаулап-гөрләп үтте. Балаларҙы тәбрикләү өсөн мәртәбәле ҡунаҡтар ҙа килгәйне һәм улар ихласлап ҡотлау һүҙҙәрен еткерҙе. Уҡытыусыларҙың һәм тәрбиәселәрҙең теләк-кәңәштәре, уҡыусыларҙың хушлашыу һүҙе лә яңғыраны. Унан 2018-2019 уҡыу йылында үткәрелгән бөтә Рәсәй төбәк олимпиадаларында еңеүсе, призер булған уҡыусыларға Маҡтау ҡағыҙҙары тапшырылды һәм матур сараны концерт номерҙары менән "Аҡйондоҙ" халыҡ бейеүҙәре ансамбле биҙәй барҙы. Тантананы йомғаҡлап, байрамда ҡатнашыусылар уҡыу йортона исем биргән Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповты иҫкә алып, уның барельефына сәскәләр һалды. Аҙаҡтан йәшле күҙҙәрен йәшергән бер нисә сығарылыш уҡыусыһын туҡтатып, кисерештәрен уртаҡлаштыҡ:

**Гөлиә Солтанова:** Гимназия-интернат - ул республиканың иң алдынғы балаларын бер урынға туплаған икенсе өй, ә бындағы уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр - икенсе әсә. Шуға күрә, бәләкәй класта уҡығандарға бындағы һәр көндөң ҡәҙерен, тәмен тойоп йәшәгеҙ, тип әйтке килә. Киләсәктә гимназиябыҙҙың бәҫен төшөрмәй, илебеҙгә файҙалы шәхестәр булырға һүҙ бирәбеҙ.

**Римма Хәлимова:** Мин әле бала саҡта ул интернат-гимназияла уҡырға хыяллана инем. Бына, минең хыялым тормошҡа ашты - гимназияны тамамлайым. Беҙҙең мәктәп башҡаларҙан нимәһе менән айырыламы? Бында белем генә түгел, ә тиҫтерҙәрең менән аралашырға, үҙаллы булырға, кешеләр менән мөнәсәбәт ҡорорға өйрәнелә. Был беҙҙең ғаиләнән ҡала тәүге оло донъябыҙ. Ошонда тәүге дуҫлыҡ хистәрен, ҙурайыу төшөнсәләрен дә тойғанбыҙ. Бик күп йылы һәм онотолмаҫ мәлдәребеҙ, ниндәйҙер ҡайғы-хәсрәттәребеҙ ҙә, оҙаҡ хәтерләй торған иҫтәлектәребеҙ ҙә кисерелгән. Шунлыҡтан, интернат-гимназия ул ябай мәктәп кенә түгел, ә беҙҙең тормоштоң, ғүмерҙең бер киҫәге лә.

**Салауат Махийәнов:** Оҙаҡ йылдар интернат-гимназия республикала беренселектә килә. Бында тырыш, һәләтле балалар уҡый. Башҡортостандың төрлө төбәктәренән йыйылған йәштәр бер ҡыйыҡ аҫтына тупланып, бер ғаилә булып йәшәп китә һәм был дуҫлыҡ күптәрҙә мәктәптән һуң да дауам итә. Мин дә бында ысын дуҫым Санъярҙы таптым һәм беҙ уның менән күп нәмәләрҙе бергә кисерҙек. Йүнәлеш буйынса социаль-иҡтисади профилде һайланым, был өлкәләге уҡытыусыларыма сикһеҙ рәхмәтлемен. Уҡыу барышында "Аҡйондоҙ" бейеү ансамблендә шөғөлләндем һәм етәксебеҙ Әнүәр Хәким улы хаҡында иң йылы тойғоларҙы алып китәм.

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

2

Туған телем!

1-7 ИЮНЬ (һөтай) 2019 йыл

№22 (856)

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# МАҢЛАЙҘЫ ЫУЫУҘАН НИ ФАЙҘА?

**Республика йәмәғәтселеге Бөрйән районында урынлашҡан Шүлгән мәмерйәһе тирәләй булып алған ҡыҙыу бәхәстәрҙе хәтерләйҙер, моғайын. Заманында был мәмерйәлә фәнни нигеҙҙә тикшеренеүҙәр уҙғарған ғалимдарҙың башҡортса ер-һыу атамаларын һанға һуҡмауы, ә урындағы хакимиәт органдары етәкселегенең һәм ғилми учреждениеларҙағы зыялыларыбыҙҙың битарафлығы арҡаһында бөтә донъя кимәлендәге мәҙәниәт ҡомартҡыһы бөгөнгә көндә "Капова" атамаһы аҫтында билдәле. Илдә үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, "Башҡортҡа аҡыл һуң төшә" тигәндәй, бер төркөм илһөйәр заттар мәмерйәбеҙҙең исеме тирәләй матбуғатта моназара ҡороп алды. Тик... урыҫ телендә нығынған заманса фразеологик берәмекте ҡулланып әйткәндә, "поезд ушел" ине шул.**



Ер-һыу атамаларына ҡағылышлы шундай уҡ мәғәнәһеҙлектәрҙе Баймаҡ районындағы "Куянтаево" (дөрөҫ атамаһы "Ҡуянтау") менән Сибай ҡалаһы биҫтәләренең береһе булған "Худолаз" (ысын исеме "Төйәләҫ") миҫалдарында ла күрергә була. Был топоним менән гидроним тирәләй шулай уҡ ҡыҙыу ғына бәхәстәр ҡуйырып алды, уларҙың тарихи исемдәрен кире ҡайтарыу буйынса эшлекле тәҡдимдәр әйтелде. Әммә, әлеге лә баяғы, поезд күптән киткәйне шул. Һуң тигәндең ғилләһе шунда: ер йөҙөндәге һәр географик берәмек картаға төшөрөлә. Был эш менән совет осоронда Министрҙар Советы ҡарамағындағы Геодезия һәм картография идаралығы шөғөлләнә. Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, ул Геодезия һәм картографияның федераль агентлығы тип үҙгәртелә (2008 йылға тиклем). Бөгөнгө көндә ул Кадастр, картография һәм дәүләт теркәүенең федераль хеҙмәте тип атала. Картаға бер төшөрөлгән географик атамаларҙың исемдәрен үҙгәртеү бик тә ҡыйбатлы ғәмәл. Уның өсөн миллион долларҙар менән иҫәпләнгән аҡса түләргә кәрәк икән. Был эштең ҡиммәткә төшөүен әлеге атамаларҙың халыҡ-ара каталогтарға индерелеүе менән аңлаталар.

Егерме беренсе быуат башында Учалы районы биләмәһендә бик боронғо осорға ҡараған стоунхендж (обсерватория) табылды. Боронғолоғо буйынса уны Англия биләмәләрендәге стоунхенджддарға тиңләйҙәр. Шул осорҙа әлеге табылдыҡты Баҡшай тип атауҙар һәм яҙыуҙар китте. Гәрсә, "Баҡшай" атамаһын этимологик күҙлектән бер нисек тә аңлап һәм аңлатып булмай. Табылдыҡтың төп мәғәнәһенән сығып фекер йөрөткәндә, уның дөрөҫ яҙылышы - Бағышай. Бағыш + ай, йәғни, айҙы бағыу, күҙәтеү урыны. "Ай" һүҙе аҫтында, ғөмүмән, күк есемдәре күҙ уңында тотола. Әйткәндәй, обсерватория төшөнсәһе һүҙлектә шул уҡ мәғәнәлә бирелә: "специализированное научное учреждение, оборудованное для проведения астрономических, физических, метеорологических и т.п. исследований". Шул күҙлектән ҡарағанда, "Бағышай" тигән төшөнсә стоунхендж (обсерватория) һүҙенә тулыһынса тап килә һәм уның идентик термины була ала, тип әйтергә батырсылыҡ итәм. Ул, әлбиттә, урыҫ телендә "Багишай" тип яҙылырға һәм атап йөрөтөлөргә тейеш.

Ә берниҙе лә аңлатмаған "Баҡшай" һүҙенә килгәндә, ул әлеге "Бағышай" атамаһының боҙолған формаһы ғына. Халыҡ телендә географик атамаларҙың ундай боҙолоу осраҡтары байтаҡ. Мәҫәлән, беҙҙең тарафтарҙағы Муса ауылын халыҡ ниңәлер Мунса ауылы тип атай. Ғәли (Ғәлиәхмәр) ауылын Ғәлауылы, Оҙонгүлде Өҙөңгөл, Өскүлде Өскөл тип йөрөтәләр. Урыҫ телендә "ҫ" хәрефе булмау сәбәпле, Белорет районындағы Ырыҫлыҡай ауылы Рысыҡай, Әбйәлилдәге Ырыҫҡужа Рысҡужа булып йөрөй.

Дөйөмләштереп әйткәндә, ер-һыу атамалары беҙгә тарихи-географик мәғлүмәт еткереүҙәре менән ҡиммәт. Бигерәк тә, Шүлгән, Бағышай кеүек халҡыбыҙҙың боронғолоғона ишаралаған атамалар. Капованы үҙенең төп асылындағы исеме менән фәнни әйләнешкә индереп булмаған хәлдә лә, исмаһам, Бағышайҙың рәсми сығанаҡтарҙа дөрөҫ яҙылышын тәьмин итә алһаҡ икән. Бөтә донъя әһәмиәтендәге мәҙәни ҡомартҡыбыҙға яттар яҫҡынмаһын өсөн, уның исемен тағы туҡһан туғыҙға түкмәстереп, үҙләштермәһен өсөн. Юҡһа, һаман да шул бер тырмаға баҫып, аҙағынан маңлайҙы ыуыуҙан ни файҙа, киткән поезд артынан йоҙроҡ төйөп, эш үткәс төкөрөк сәсеп бәхәс ҡороуҙан ни фәтүә?..

**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН.**

КӨНАУАЗ

# ҮҘ ДИАЛЕКТЫҢДА ҺӨЙЛӘШ,

## ә әҙәби тел нормаларын һанла!

**Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты тигәндә, шуны иҫкә төшөрөп үтәйек. Октябрь революцияһына тиклем башҡорт, татар, мишәр һәм типтәрҙәр дөйөм төрки-татар яҙмаһы нигеҙендә белем алған. Мөғәллимдәре Өфө, Ҡаҙан, Стәрлебаш, Ҡарғалы мәҙрәсәләрен тамамлаған һәм улар уҡымышлы кешеләр булараҡ, дәрес үткәргәндә генә түгел, халыҡ менән аралашҡанда ла татарсаға яҡын төрки һүҙҙәре ҡушып һөйләшкән. Кем дә кем төрки-татар һүҙҙәрен ҡушып һөйләй, ул кеше уҡымышлы, абруйлы иҫәпләнгән.**

Аҙаҡ совет осоронда саф башҡорт ауылдарында ла, революцияға тиклемге ғәҙәт буйынса, уҡытыусы кешегә "апа", "абый" тип өндәшә торғайныҡ. Был күренеш мәктәптәрҙә әле лә дауам итә.

Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының диалект теле башҡорт һөйләшенә дөйөм төрки теле һүҙҙәре ҡушылып, заманында беҙгә күсенеп килеп, ер алыр өсөн башҡорт булып яҙылған татарҙар менән тығыҙ аралашып йәшәүҙән, татар теленең байтаҡ элементтары өҫтәлеүенән барлыҡҡа килгән, тип уйлайым. Хәҙерге Көйөргәҙе районының Яңы Мораптал ауылын ғына алайыҡ. Ассимиляция процестарының фотоға һәм киноға төшөрөрлөк факттар менән дауам итеүен ошо ауыл миҫалында ла һөйләп була. Революцияға тиклемге халыҡ иҫәбен алыу буйынса бер документта был ауылдағы халыҡтың барыһы ла милләтен башҡорт тип яҙһа, 1926 йылда, ер мәсьәләһе хәл ителгәс, сираттағы халыҡ һаны иҫәбен алғанда барыһы ла татар булып яҙылған. Яңы Морапталда бөгөн башҡорттар халыҡтың 25 процентын ғына тәшкил итә. Башҡорт балалары белемде 1-се синыфтан уҡ татар мәктәбендә алыу сәбәпле, әти, әни, әхи (дуҫ) тип, татарсалап һөйләшә. Яңы Морапталдағы һымаҡ, беренсе синыфтан уҡ татар мәктәбендә уҡып, туған теле менән татарсаны бутап һөйләшеп үҫкән башҡорт балаларының теле лә киләсәктә төньяҡ-көнбайыш диалектына оҡшап ҡалмаҫмы?

Республикала ундай мәктәптәр байтаҡ бит. Мәҫәлән, Ҡырмыҫҡалы районының Ҡабаҡ (элекке башҡорт ауылы Илсекәй ул), Әлшәй районының Никифар (бында башҡорттар Балғажынан күсенә) башҡорттары татарса уҡытыу арҡаһында күҙ алдында ассимиляцияланды. Татар телендә урта мәктәпте тамамлаған башҡортҡа, әлбиттә, башҡорт әҙәби телендәге түгел, ә татар телендә сыҡҡан матбуғатты алдырып уҡыуы анһатыраҡ. Шуға ла төньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләшкәндәр татарса сыҡҡан гәзит-журналдарҙың тиражын ишәйтә. Ә ул гәзит-журналдар "төньяҡ-көнбайыш башҡорттары" тигәнде берәй тапҡыр булһа ла телгә алғаны, уларҙың тарихи үткәне хаҡында материалдар биргәне бармы икән?

Йәнә шуныһы: радио-телевидение тапшырыуҙарын алып барыусылар, унда ҡатнашыусы тел ғалимдары, яҙыусылар, артистар һәммәһе лә матур итеп әҙәби телдә һөйләшһен ине, сөнки үҙен башҡорт тип таныған меңәрләгән тамашасылар уларға ҡарап өлгө ала бит. Юҡһа, сығыш яһағанда улар ауыҙынан йыш ҡына "ниндәй" урынына "нинди", "кемдең" урынына "кемнең", "ашағым килә" урынына "ашайһым килә" тигәнде ишетәһең. Былай барһа, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары диалектына ла күсеп бөтөүебеҙ бар.

Ҡыҙыҡ кешеләр беҙ. Балабыҙ институтҡа уҡырға инә алмаһа - уның башҡорт телендә уҡыуы, мәктәп һәм уҡытыусылар ғәйепле. Ә инде башҡорт телен белеү талап ителгән эшкә урынлаша башлаһалар - әҙәби тел нормалары ғәйепле. Бөтөн ырыуҙарҙың дөйөм тел нигеҙендә барлыҡҡа килгән әҙәби телебеҙ - ата-бабаларыбыҙ, атай-әсәйҙәребеҙ хыялланған, ләкин беҙҙең дәүер кешеләре яулаған ҡаҙаныш ул. Шуны ла онотмайыҡ: башҡорттоң мәшһүр йырҙары, "Урал батыр" эпосы, бер халыҡта ла булмаған рухи хазиналары беҙҙең көндәргә тиклем ниндәй телдә килеп еткән һуң? Әлбиттә, "төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының" ассимиляция йоғонтоһо менән үҙгәртелгән диалектында түгел, ә көньяҡ һәм көнсығыш башҡорттары телендә!

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Йәһүд халҡы, мәҫәлән, күптән юғалған телен терелтте, ни тиклем ауыр булмаһын, хәҙер һәр йәһүд кешеһе туған телен өйрәнә. Ә төрлө байрамдарҙа бына тигән итеп матур милли башҡорт кейемдәре кейергә яратҡан төньяҡ-көнбайыш башҡорттарына әҙәби телгә өйрәнеү бер ни тормаясаҡ. Һөйләшһен, әйҙә, милләттәштәребеҙ үҙ диалектында, тик әҙәби телдә ижад итһендәр, милли үҙаңын юғалтмаһындар.**

**Шамил ТУҠАЕВ.**

*✓ Әммә унда уҡыған башҡорт балалары ижади кеше булып китмәне. Беҙҙең райондан сыҡҡан иң һәләтле кешеләр йә Үргендән һәм Ибрайҙан, йә Абзандан һәм Байыштан - ҡайҙа башҡорт телендә уҡығандар - шунан.*



# ТУҒАН ТЕЛДӘН

## балаларҙы тыуған илһеҙ

**Ейәнсура районында үткән "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса төбәк-ара конкурс сиктәрендә уҡыусыларҙы төрлө иҫтәлекле урындарға экскурсияларға йөрөтәләр. Вертолет майҙансығы урынлашҡан тауҙан төшөп барғанда Белорет районынан барған, күмәк сәхнәлә генә ҡатнашып йөрөгән, ҡатнаш милләттән булған бер уҡыусы, ҡоласын йәйеп, тау яғына борола ла, бар тауышына: "Мин үҙемде беренсе тапҡыр башҡорт итеп тойҙом!" - тип ҡысҡыра. Шул ваҡиғаны уҡытыусыһы сәхнәнән һөйләгәс, конкурста ҡатнашыусылар аяғүрә баҫып уҡыусыны 15 минуттай алҡышлай! Юҡ, был уйҙырма түгел, ә ысынбарлыҡ. Быны бары тик башҡорт теле уҡытыусылары ғына аңлай, сөнки был уларҙың эшенә иң ҙур баһаларҙың береһе! Ләкин бындай еңеүҙәр еңел генә бирелмәй. Ғөмүмән, бөгөнгө башҡорт теле һәм уны балалар күңеленә һалыусылар алдында ниндәй ауырлыҡтар бар, улар ниндәй шарттарҙа эшләргә мәжбүр? Ошо һәм башҡа мәсьәләләр хаҡында Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының 1-се Бөтә Рәсәй съезы делегаттары - Учалынан Фәнил БҮЛӘКОВ, Сибай ҡалаһынан Әлнисә АЛДЫРХАНОВА, Әбйәлилдән Радик ӨМӨТҠУЖИН һәм Ейәнсуранан Наил ЮЛДАШБАЕВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**▸ Бөгөн башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙа проблемалар бик күп икәне мәғлүм, уларҙы нисек хәл итергә мөмкин һуң?**

**Ә. Алдырханова:** Беренсенән, башҡорт мәктәптәрендә башҡорт телен һаҡлап ҡалыу өсөн ҡыҫҡартылған сәғәттәрҙе кире ҡайтарыуҙы төп маҡсат итеп ҡуйырға кәрәк, сөнки күп урындарҙа дәрестәр һанын кәметтеләр. Дүрт сәғәттән өс сәғәткә ҡалдырҙылар, быйылғы уҡыу йылында иһә ике сәғәткә ҡалды, уның береһе - тел, икенсеһе - әҙәбиәт. Әҙәбиәт программаһына ҙур, бай йөкмәткеле, тәрбиәүи әһәмиәтле әҫәрҙәр инә, уларҙың һәр береһен бала күңеленә һалғы килә. Әммә аҙнаһына бер генә сәғәтлек дәрестәрҙә уларҙы үтеп бөтөү, һәр береһенең йөкмәткеһенә инеп китеп уҡыу мөмкин түгел. Бер сәғәт икән, тимәк, бер сәғәттә үтеп бөтөрлөк әҫәрҙәрҙе генә уҡытырға кәрәктер.

Тағы шуныһы - башҡорт мәктәптәрендә мотлаҡ башҡорт телен яҡшы белгән рухлы директор булырға тейеш, сөнки директор икенсе телдә һөйләшә икән, уҡыусыларҙан башҡортса һөйләшеүҙе нисек талап итәһең? Ғөмүмән, башҡорт мәктәбе икән, тәнәфестә бөтә фән уҡытыусылары ла уҡыусылар менән дә, үҙ-ара ла башҡортса аралашырға тейеш, юғиһә, балалар ҙа, уҡытыусылар ҙа урыҫ телендә һөйләшә, мәктәптә бер урыҫ та булмаған уҡытыусылар кәңәшмәһендә ватып-емереп урыҫ телендә һөйләүҙе модаға индереп алдыҡ. Шул рәүешле мәктәбебеҙҙә рухи ҡиммәттәребеҙ яйлап ситкә тибелә. Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр, тигән боронғолар әйтеме дәлилләнә лә инде.

Шулай ҙа башҡорт мәктәптәре, лицей-гимназиялары өсөн иң төп проблема - саф башҡорт балалары уҡыған белем усаҡтарында ата-әсәләрҙән, баламды башҡорт телендә уҡытам, тип ғариза яҙҙырыу - оят, оят ҡына түгел, ғәрлек. Әммә был хаҡта йәки башҡа мәсьәләләр буйынса ауыҙ күтәреп һүҙ ҙә әйтә алмайһың, әйткән хәлдә лә үҙеңә уның ҡоһоро ныҡ төшә. Беҙ һаман да буйһоноп йәшәйбеҙ, кемдер килеп, хәл-торошто үҙгәртер, тип өмөтләнәбеҙ.

**Ф. Бүләков:** Башҡорт телен ата-әсәләрҙән ғариза яҙҙырып уҡытыуҙы ҡайһы берәүҙәр башҡорт теленә ҡаршы ҡорал итеп оҫта файҙалана. Шулай уҡ күп нәмә етәкселектән тора, шуға, башҡорт телен уҡытыуҙа административ ресурсты ла ҡулланырға кәрәктер. Күп осраҡта, киреһенсә, тап шул ресурсты файҙаланып, башҡорт теле сәғәттәрен ҡыҫҡартыу осраҡтары ла булды. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Мәғариф министрлығынан да уҡыу планын ҡабул иткәндә нисә сәғәт башҡорт теле булырға тейеш икәне хаҡында бер ниндәй тәҡдим юҡ. Шуға, башҡа предметтарға теймәйенсә, нисек тә булһа башҡорт теле дәрестәрен ҡыҫҡартырға тырышалар. Хатта милли мәктәптәрҙә лә ҡайһы бер урындарҙа башҡорт теле 4-әр сәғәт уҡытылһа, икенселәрендә өсәр сәғәткә ҡалған. Башҡа предметтар урыҫ телендә уҡытылғанын иҫәпкә алһаҡ, ошо ваҡыт эсендә балаларҙың башҡортса таҙа һөйләшеүенә өлгәшеп булыуы икеле.

Дәреслектәр буйынса ла әйтеп киткем килә: милли мәктәптәр өсөн 5-7-се синыфтарҙың дәреслектәрен ҡәнәғәтләнерлек тип ҡабул итәм. 8-се кластан башлап программа буталсығыраҡ. Хәҙер балаларҙы ҡыҙыҡһындырыуы ҡыйын, шуға, дәреслектәргә икенсерәк әҫәрҙәр индерергә кәрәк, минеңсә. Юҡһа, күңелһеҙ әҫәрҙәр ҙә осрай. 9-сы синыфта ла дәреслекте төрләндереп ебәреү зарур, сөнки телде насар белгән балаларҙа боронғо һүҙҙәрҙең күп биреләүе ауырлыҡ тыуҙыра - уҡыусыларға һәр бер һүҙҙе тәржемә итеп ултырырға тура килә. Әлбиттә, Әбйәлил, Баймаҡ кеүек башҡорт теленә элек-электән мөнәсәбәт ыңғай, тел мөхите көслө булған райондар ҙа бар. Әммә ҡала мөхитендә, шулай уҡ төньяҡ-көнбайыш райондарҙа йәшәүсе башҡорттар барлығын да онотмайыҡ.

**Н. Юлдашбаев:** Ата-әсәгә балаһын ниндәй телдә, ҡайһы класта теләй - шунда уҡытырға рөхсәт биргән закон дөрөҫ түгел. Ул мәкерле ниәттән, тәбиғәт ҡанундарын боҙоп эшләнгән. Һәр милләт балаһы мотлаҡ үҙенең туған телендә уҡырға тейеш, сөнки ата-әсәләрҙең балаларҙы нисек уҡытырға икәнен хәл итергә бер ниндәй хоҡуғы юҡ. Беҙ уларҙы тыуҙырһаҡ та, уларға, уларҙың тәҡдиренә, яҙмышына хужа түгел, уларға тәбиғәт хужа. Ата-әсә баланы донъяға килтереүсе бер тәбиғәт ҡоралы ғына. Беҙ бала ниндәй тәбиғи һәләттәр менән тыуа - шуны үҫтерәбеҙ, башҡорт ғаиләһендә тыуҙы икән - уның белем алыу теле лә башҡорт теле булырға тейеш. Шулай булғас, ни өсөн беҙ баланы йә теге, йә был яҡҡа тартҡылайбыҙ, быға ни хоҡуғыбыҙ бар? Баҡсала помидор йәки ҡыяр шытып сыҡһа, уларҙы үҫкәнсе теге йәки был яҡҡа борғосламайбыҙ, ҡыярҙан - помидор, помидорҙан ҡыяр уңышы алырға теләмәйбеҙ бит.

Әле ата-әсәләргә мәктәптә тел һайлау хоҡуғы биреп, кешенең милли киләсәген юҡҡа сығарыу сәйәсәте алып барыла. Ата-әсә, үҙенең кимәленән сығып, балаһы өсөн телде үҙе һайлай. Белемле кешеләр балаларын үҙенең телендә уҡыта. Ә беҙҙең ҡайһы бер ата-әсәләргә тел кейем һымаҡ күренә: теләһәм - быныһын кейәм, теләмәһәм - икенсеһен. Ә тәбиғәттән бирелгән тел - ул кейем түгел! Уны алыштырып булмай!

Баланың күңеле - аҡ ҡағыҙ, тип тә әйтәләр. Бала күңеле буш түгел, ул тыуғанда уҡ уға Аллаһы Тәғәлә тарафынан нигеҙ һалынған, шул иҫәптән, тел дә ята унда. Уның рухи күңеле ап-аҡ булыуы мөмкин. Рухи ҡәнәғәтлек, күңел бөтөнлөгө табыу өсөн бала үҙенең телендә һөйләшергә тейеш. Организм шуны һорай, ул шул телгә мохтаж. Кешене тәбиғәттең балаһы, тип ҡарайбыҙ икән, беҙ уның йәнле дауамы. Был бәйләнеш миллиард йылдар дауам итә, шуға кешене бер нәмәнән дә айырып алып булмай. Шул сәбәпле ошо законды ҡабаттан ҡарарға кәрәк. Ни өсөндөр әҙселектә булған ҡатнаш никахтарҙы күҙ уңына ҡуябыҙ ҙа, күпселектең ихтыяжын иғтибарҙан ситкә ебәрәбеҙ.

Минең теләк - башҡорт балалары өсөн төҙөлгән уҡыу планына ярашлы уҡыған кластарҙы күбәйтеү. Эш бына нимәлә: башҡорттар рус класында уҡый. Ундай балалар теләйме, теләмәйме, рус балаларына оҡшарға тырыша башлай. Рус телендә һөйләшкән бала рус балаларына хас коллектив аңды үҙләштерә. Был баланың индивидуаллеген бөтөрә, йәғни тәбиғәт биргән һәләтен, ижади мөмкинлектәрен үҫтермәй. Мәҫәлән, үләндең өҫтөнә берәй нәмә ябып ҡуйһаң, уға ҡояш тура төшмәй, шул сәбәпле улар сәлгәнләп үҫә. Башҡаларға оҡшарға тырышыу ҙа кешенең үҙенсәлеген ҡаплап тора. 50-се йылдарҙа Европа психологы Карл Густав Юнг ошоно аса. Ул, оҡшарға тырышыу ни тиклем көслө - индивидуаллек шул тиклем ситкә ташлана, тигән. Шуға күрә, башҡорт балалары рус класында уҡый икән, улар, бәлки, интеллектуаль йәһәттән үҫешер, әммә һәләттәре, ижады юҡҡа сығыр. Хәтерҙәре яҡшырып китеүе мөмкин, сөнки ниндәйҙер һәләт үҫмәй ҡалды икән, уны хәтер компенсациялай. Күҙ һуҡырайһа, ҡолаҡ яҡшы ишетә. Был психологик кимәлдә бара. Әгәр киләсәктә ижади шәхестәрҙе, һәләтле кешеләрҙе үҫтерәбеҙ, тиһәк, башҡорт кластарын күбәйтеү фарыз. 2000 йылда ошо теманы өйрәнеп, тикшереп, мәҡәлә яҙғайным. Иҫәнғолда иң маҡталған урыҫ мәктәбенә иң талантлы балаларҙы йыйып алалар, әммә унда уҡыған башҡорт балалары ижади кеше булып китмәне, береһе лә һәләтле шәхес була алманы. Беҙҙең райондан сыҡҡан иң һәләтле кешеләр йә Үргендән һәм Ибрайҙан, йә Абзандан һәм Байыштан - ҡайҙа башҡорт телендә уҡығандар - шунан.

**Р. Өмөтҡужин:** Телде уҡытыу бар, телгә өйрәтеү бар. Телгә өйрәтеү ул бер мәктәптең генә түгел, ғаиләнең, ауылдың, мөхиттең эше. Ә предмет, фән булараҡ уҡытыуға килгәндә - уныһы мәктәптең, уҡытыусының эше. Телде уҡытыу мәсьәләһе буйынса һүҙ алып барһаҡ, беҙ көрәш юлына баҫҡанбыҙ һымаҡ килеп сыға. Барыһы менән дә көрәшергә кәрәк, ғәйепләне эҙләй башлайбыҙ. Бөтөн булған энергиябыҙ, көсөбөҙ шуға сарыф ителә. Нобель премияһы лауреаты Тереза-Әсәнең шундай һүҙҙәре бар: "Мин һуғышҡа ҡаршы митингыға бармайым, мин тыныслыҡ өсөн митингыға сығам. Ҡасан тыныслыҡ өсөн хәрәкәт башлана, саҡырығыҙ". Беҙҙән алдағы быуындар телде уҡытыу өсөн көрәшмәгән, ул тәбиғи рәүештә барған. Быны нимәгә һөйләйем: ата-әсәләрҙән ғариза яҙҙырыу - үҙҙәренең эгоһын (мин-минлеген) балаһына көсләп тағыу ул. Улар балаларына үҙҙәре хөкөм сығара. Балалар, беҙҙе көсләп уҡыталар, тимәй ул. Был - ата-әсәләрҙән сыҡҡан һүҙ. Ошо хаҡта радио-телевидение тапшырыуҙарын, социаль селтәрҙәрҙе ҡараһағыҙ, унда балалар әйтмәй, яҙмай, уларҙың ата-әсәләре үҙҙәренең фекерен яҙа, балаһына үҙенең теләген көсләп таға. Шул уҡ ваҡытта ыңғай уйлаған кеше, минең балам өс халыҡтың телен белә, өс халыҡтың мәҙәниәтенә яҡынлашты, тиергә мөмкин. Әммә беҙҙә гел киреһен уйларға күнеккәндәр. Мәжбүр итеү тигән һүҙ ҡайҙан килеп сыға ул? Ел ҡайһы яҡтан иҫә? Кем кемде мәжбүр итә? Башҡортостанда йәшәп, башҡорт милләтле ата-әсәләрҙән ғариза яҙҙырыуҙы ла мәжбүр итеү, тип баһаларға мөмкин. Ул юридик яҡтан дөрөҫмө икән? Берәү ҙә шул хаҡта уйламай, юғарынан төшөрә лә ҡуялар. Ата-әсәләр иһә, балағыҙ башҡортса уҡыһа, артабан юғары уҡыу йортонда уҡый алмай, тигәнгә ышана. Был бөтөнләй мәғәнәһеҙлек.

**Ф. Бүләков:** Ата-әсәләр балаларын рус телендә генә уҡытып, балаларыбыҙҙы бөйөк ғалимдар, бөйөк кешеләр итәбеҙ, тип уйлай. Был - төптө хата. Кешенең шәхесе бар икән, ул уны үҙе артабан үҫтерә, үҙен-үҙе кеше итеп яһай. Мөхиттең дә йоғонтоһо бар. Әммә балаға күпме генә тылҡыһаң да, үҙенең теләге булмайынса, ул шәхес булып үҫеп етмәйәсәк. Булыр бала - биләүҙән, тип юҡҡа әйтмәйҙәр бит. Рус телендә генә уҡытып, бер кемде лә бөйөк ғалим йәки инженер итеп булмай. Ата-әсәләр шуны аңлаһын ине. Бер генә миҫал килтергем килә: телевидениела эшләгәндә Мәскәүҙә белем камиллаштырыу курстарында булғайным. Беҙ акцент менән һөйләшәбеҙ бит инде. Белемебеҙҙе тикшереп, диктант яҙҙыралар. Уны "4"-кә, "5"-кә яҙабыҙ, ә рус телле телевидение хеҙмәткәрҙәре "2"-гә, "3"-кә яҙа. Минеңсә, бөтөн нәмә кешенең үҙенең тырышлығынан тора.

**▸ Ысынлап та, тыуғанда уҡ бала ер йөҙөндә булған бөтөн белемгә эйә булып тыуа, әммә ата-әсә уны даими тыйып, балалар баҡсаһында, мәктәптә, вузда кемдер билдәләгән стандарттар буйынса уҡытып, уларҙан роботтар яһай бит.**

**Р. Өмөтҡужин:** Хәҙер кешенең эшен, яҙмышын, бөтөн сифаттарын һан артына ҡуялар, һан менән баһа бирәләр. Беҙҙе лә мониторинг менән еңеп алдылар. Ул бөтөн предметтар буйынса үткәрелә. Һан булған урында сифат йышыраҡ аҡһай.

✓ *Туған телде үҙ күҙлегенән сығып һайлаған ата-әсәләр ҙә балаларын башҡорт теленән генә түгел, дәүләт теленән, ысын мәғәнәһендә Тыуған иленән яҙҙыра, тамырҙарынан айыра, ел ыңғайына осоп йөрөгән ҡамғаҡҡа әйләндерә...*



# ЯҘҘЫРЫУ...

## ҡалдырыу ул!

**Н. Юлдашбаев:** Кеше ни өсөн ауырый? 70 процент сирҙәр тәбиғәт ҡанундарын боҙоуҙан башлана. Ҡайҙа ул тәбиғәт? Ул - беҙ үҙебеҙ. Ошо беҙгә һалынғанды үҫтерергә тейешбеҙ. Тыуғанда уҡ һалынған рухты, телде боҙҙоң икән, шул организмда дисгармония башлана, физик, рухи, менталь һ.б. тәндәр араһында баланс юғала һәм ул киләсәктә ниндәйҙер сир булып килеп сыға. Шуға мин һәр ваҡыт кешеләргә, сирләйһең икән, тәбиғәттең ниндәй законын боҙҙоң, уйла, тип әйтәм. Беҙҙең йәшәү рәүеше генә түгел, белем биреү ҙә ошо тәбиғәт ҡанундары менән үрелеп барырға тейеш. Ә беҙ уны күрәләтә боҙабыҙ...

Беҙ телгә иң беренсе һөйөү ғаиләлә һалына, тибеҙ. Ләкин ул баланың ата-әсәһенең кимәле ниндәй? Улар телде белеү нимәгә кәрәк, тип тә уйларға мөмкин. Ысынлап та, әсә теленең баланың аҡылына, уны тәрбиәләүгә, психикаһының формалашыуына, һаулығына йоғонтоһо тураһында тикшеренеүҙәр башлауҙы ғалимдарға йөкмәтергә кәрәк. Әгәр ошо эш башҡарылһа, уның һөҙөмтәләрен ата-әсәләргә еткерергә, районлар, ауылдар буйлап лекциялар менән йөрөргә кәрәк. Мин һөйләһәм, ата-әсәләр бер төрлө ҡабул итә, әммә Өфөнән килгән кешегә улар ҙа икенсе мөнәсәбәт тыуа. Шул ваҡытта башҡорт теленә ҡул һелтәп ҡараған ата-әсәләр ҙә уйланыр ине. Ғалимдар ауылдарҙа ата-әсәләр алдында сығыш яһаһын, гәзит-журналдарҙа үҙҙәренең тикшеренеүен баҫтырһын, радио-телевидениенан һөйләһен ине. Баш ҡалала Фәндәр академияһында шундай бер көслө команда булдырыу кәрәк. Улар маҡсатлы рәүештә ошо йүнәлештә эш алып барырға тейеш.

**Ә. Алдырханова:** Балалар баҡсаларына, мәктәпкә шул тиклем тәбиғи һәләтле балалар килә - ул йырсылар, бейеүселәр, ижадсылар. Әммә улар түңәрәктәрҙә йөрөй башлаһа, йәки махсус уҡыу йорттарына инһә, шул тәбиғи таланты боҙола ла ҡуя, сөнки улар ҡағиҙә буйынса өйрәтә, билдәле бер сиктәргә индерә һәм баланың тәбиғи асылы юҡҡа сыға. Тағы шул яғы бар: мәктәп шәхестәр тәрбиәләп сығарыуы ла мөмкин, әммә милләт өсөн маяҡ булырҙай кешеләр радио-телевидениела интервью биргән саҡта башҡортса ике һүҙҙе ҡушып һөйләй алмай торһа, һүҙ запасы бөтөнләй булмаһа, уның юғары дәрәжәһенең бәҫе төшә. Шәхес, тәү сиратта, үҙенең йөҙө ҡыҙармаҫлыҡ итеп, бай йөкмәткеле телмәре менән әсә телендә рәхәтләнеп, иркен аралашыуы аша милли йөҙөн күрһәтергә тейеш. Икенсе яҡтан, үҙ һүҙҙәрең менән үҙ телеңдә һөйләү - ул халыҡты ышандыра, аңлайышлыраҡ та була. Ә инде яҙылғанды уҡыйһың икән, тимәк, кемдер яҙып биргән, һинең телмәрең ихлас түгел, кемдеңдер фекерен ҡабатлайһың.

**Мине һәр ваҡыт бер һорау борсой: бына беҙ тел өйрәтеү, уҡытыу буйынса бер туҡтауһыҙ бәхәс алып барабыҙ. Ә бит теле лә асылмаған балаларҙы ҡарағыҙ - улар ниндәй милләттән булыуына ҡарамаҫтан, бер-береһен аңлай, бер-береһе менән "һөйләшә", матур итеп уйнай. Әммә телдәре асылыу менән бер-береһен аңламай башлай. Күрәһең, телгә өйрәтеү мәғариф, белем биреү аша ғына түгел, ниндәйҙер икенсе - менталь кимәлдә лә бара. Йәғни, белем биреү системаһында стандарт алымдар ғына ҡулланыла, ә кешегә тәбиғәттән һалынған мөмкинлектәргә күҙ йомола...**

**Р. Өмөтҡужин:** Менталлек тураһында әйткәндә, рух тигән төшөнсәне онотторға ярамай. Милли рух телде белеүҙән генә тормай, тел - уның бер сағылышы ғына. Ысынлап та шундай һорау тыуа: теле асылмаған балалар нисек аралаша һуң? Рухи яҡтан аралаша улар. Ә беҙ, өлкәндәр, үҙебеҙҙең аҡыллы баштарыбыҙ менән балаларҙы асылынан яҙлыҡтырабыҙ.

**Ә. Алдырханова:** Рухты ла, телде лә үҫтерәбеҙ, тибеҙ икән, беҙгә "Тормош һабаҡтары" дәресен тергеҙергә кәрәк, сөнки унда туған телебеҙгә һөйөү уятырлыҡ, милли рух үҫтереүгә ҡанат ҡуйырлыҡ миҫалдар шул тиклем күп. "Милләттең йәне - туған телендә, ҡото - моңонда, йолаларында, тамыры - тарихында", - ти Мәрйәм апай Бураҡаева. Быуындар сылбыры - бөтөнөһө шул тормош һабаҡтарында ята, ә беҙ сит телдәргә дәрестәр бүлеп, үҙебеҙҙең балаларҙы асылынан, рухынан айырабыҙ, булмышынан мәхрүм итәбеҙ.

**Мәғлүм булыуынса, элек был предмет төбәк компоненты булараҡ уҡытыла ине. Ләкин төбәк компонентын дәрестәрҙә ҡулланыуҙы берәү ҙә алып ташламаны, һәм һәр уҡытыусы, ниндәй генә предметтан уҡытмаһын, дәрестә күпмелер процент нисбәтендә туған ерлектәге материалдарҙы файҙалана ала. Ни өсөн ошо "Тормош һабаҡтары"ндағы миҫалдарҙы башҡа дәрестәргә лә төбәк компоненты итеп индереп ебәрмәҫкә, был бит уҡытыусынан, хатта барлыҡ предмет уҡытыусыларынан тора. Берәү ҙә Мәскәүҙән йәки Питерҙан килеп, дәрестәргә төбәк компонентын индереп ултырмаясаҡ, был - урындағы уҡытыусыларға бирелгән вәкәләт. Ҡайһы бер ғаиләләрҙе ҡарағыҙ: уларҙа төбәк компоненты ла, сәғәт һаны ла юҡ, ә телде өйрәнеү, рух тәрбиәләү үҙенән-үҙе китеп бара... Икенсе төрлө әйткәндә, предмет уҡытыусыһы үҙенең фәнен генә уйлай һәм үҙенең фәнен генә иң кәрәклеһе итеп күрһәтергә тырыша. Белем биреү процесына бер бөтөн итеп ҡарап булмаймы ни?**

**Н. Юлдашбаев:** Ҡарап була, әлбиттә. Был предмет-ара бәйләнеш тип атала. Әммә төрлө предмет уҡытыусылары араһында, һеҙҙең телегеҙ туҡталышҡа барып еткәнсе генә кәрәк, тигәндәре лә осрай. Уларҙың ауыҙын ваҡытында ябыу зарур. Ошо һуңғы 8 йыл эсендә төрлө яҡлап барған баҫымдан күптәр һынды, әммә ныҡ баҫып тороусылар ҙа булды. Бөгөнгө хәл-торош оҙайлы булыр, тип уйламайым, тарих ҡабатланған кеүек, тиҫтә йылдан үҙгәрештәр булыуы мөмкин, әммә шул ваҡыттарҙа ла беҙгә бергә ныҡ торорға, бөгөлмәҫкә кәрәк.

**Ф. Бүләков:** Эргәндә торғанда, мин башҡорттарҙы яратам, тип, рухлы булып күренеп, үҙенең дәресендә балаларға икенсе төрлө һөйләүселәр ҙә бар. Яһалмалыҡ көслө. Әммә балалы өйҙә сер тормай, тигәндәй, һүҙҙәре бит килеп етә.

**Ә. Алдырханова:** Шул яһалмалылыҡ ныҡ бөтөрә. Ул бар, булды һәм буласаҡ. Башҡортта быны аныҡ ҡына итеп, күҙ буяу, тиҙәр. Бик йыш күҙ буяйбыҙ, шуныһы насар.

**Бөгөн мәғариф өлкәһендә законлар үҙгәрҙе, закон сығарыусылар уларҙы яҡшы тип маҡтай, халыҡтың бер өлөшө, киреһенсә, хафалана. Ә бына уҡытыусылар үҙҙәре ошо закондарҙы, уларҙы нисек итеп файҙалы яҡҡа ҡулланырға икәнлеген белеп бөтәме, ғөмүмән, уларҙың хоҡуҡи белеме етерлекме? Бәлки, эште тармаҡ буйынса сығарылған закондарҙы өйрәтеүҙән башларға кәрәктер?**

**Ф. Бүләков:** Беҙгә, ысынлап та, ошо закондарҙы ентекләп ҡарарға, өйрәнергә кәрәк. Төп ҡанун - Конституция. Башҡа ҡанундар унан сығып яҙыла. Беҙгә уларҙың Конституциялағы талаптарға тап киләме, юҡмы икәнен асыҡларға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта, күпме генә тырышһаҡ та, беҙ белмәгән һыу аҫты ағымдары ла бар. Шуға күрә юридик яҡтан белемебеҙ етмәһә, бер нәмә лә хәл итә алмаясаҡбыҙ.

**Р. Өмөтҡужин:** Закондарҙы өйрәткән кеше лә юҡ. Тимәк, беҙҙең белмәү кем өсөндөр ҡулай. Уставтарҙың күбеһе трафарет менән яҙылды. "Язык обучения - башкирский", тип яҙылғандары ла русса уҡытыуға күсеп бөтөп бара, ике телдә уҡытыу ҙа индерелде. Башҡорт гимназияларында уҡытыу ике телдә алып барыла икән, ул ниндәй башҡорт гимназияһы булһын инде? 1949 йылда аталары һуғышта үлеп ҡалған балалар өсөн интернаттар, шул иҫәптән Өфөлә лә ул ваҡытта 9-сы мәктәп, хәҙер Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты асыла. Беҙҙең ошо оазисыбыҙ бар. Әбйәлилдә, мәҫәлән, башҡорт гимназияһы юҡ. Ә бит ошо Рәми Ғарипов гимназияһы өлгөһөндә, "Йәйләү" программаһы нигеҙендә беҙ һәр районда шундай гимназиялар ойоштора алабыҙ бит. Уларҙың эш тәжрибәһен ҡабатларға ғына кәрәк. Был да телде һаҡлап ҡалыу өсөн бер сара. Хоҙай беҙгә үҙе өмөт биргән, ҡарағыҙ, күрегеҙ, булдырып була бит, шулай эшләгеҙ, тип.

Икенсе яҡтан ҡарағанда, класта төрлө бала, барыһы бергә уҡый. Әгәр насар уҡыған бала лидер икән, ул яҡшы уҡығандарҙы ҡыҫа. Ә шул яҡшы уҡыған бала махсус милли интернатта уҡыһа, уның мөмкинлектәре тиҙерәк асылыр ине, беҙ милли кадрҙарҙы Өфөлә генә түгел, райондарҙа ла күпләп тәрбиәләр инек. Беҙгә шундай гимназия-интернаттар күберәк кәрәк.

**Съезда республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров башҡортса сығыш яһағанда уҡытыусылар илап ултырҙы, тиҙәр. Трибуна артынан яңғыраған һүҙҙәр күңелегеҙҙе тынысландырҙымы, әллә ниндәйҙер кире күренеш һаман да уны өйкәп торамы?**

**Ә. Алдырханова:** Сәхнәгә сыҡҡан һәр береһе, "Хөрмәтле коллегалар", ти ҙә, һүҙ башлай. Нишләп, бөйөк Аҡмулла, Вәлиди, Салауаттар кеүек ауыҙ тултырып, оло ғорурлыҡ менән "Һаумыһығыҙ, башҡорттарым, милләттәштәрем, арҡаҙаштарым, рухташтарым, замандаштарым", тип, һәр башҡортто уятып, рух оҫҡоно бөркөп, күңелен тулҡынландырырҙай һүҙҙәр әйтмәҫкә?

**Р. Өмөтҡужин:** 1980 йылда Аҡмулланың 100 йыллығын үткәргәндә СССР Яҙыусылар берлеге рәйесе Сергей Михалков килә. Сара русса бара, барыһы ла русса һөйләй. Башҡа союздаш республикаларҙан да ҡунаҡтар була. Абдулхаҡ Игебаевҡа һүҙ биргәс, трибунаға сығып: "Мин Аҡмуллаға арнап шиғыр яҙҙым", - ти ҙә, уҡый ҙа, төшөп китә. Халыҡ аяғүрә тороп ҡул саба. Сергей Михалков: "Ҡаҙаҡтар беҙҙеке тип талаша, татарҙар - беҙҙеке, ти. Ниһайәт, беҙ Аҡмулланың ниндәй милләттән икәнен белдек", - ти. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Әлфис Байсуриндың, Радий Хәбировтың башҡортса сығыш яһауы - бөгөнгө Башҡортостан өсөн батырлыҡ һымаҡ күренә, ҙур аҙым яһалды. Математика уҡытыусыһы ҡайҙа ла математика уҡытыусыһы, әммә башҡорт теле уҡытыусылары Башҡортостанда һәм башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә генә бар. Башҡорт теле уҡытыусыларының съезы йолаға әйләнһен, беренсеһе менән генә туҡтап ҡалмаһын, башҡорт теле уҡытыусылары үҙҙәренең оло хөрмәткә лайыҡ икәнлеген аңлаһын һәм шуны аҡлаһын ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы 2019" төбәк-ара конкурс лауреаты Сәриә Ҡаһарманова: "Рус мәктәбендә эшләнем дә, һуңынан гимназияға күстем. Бер ваҡыт мин эшләп киткән рус мәктәбендә уҡытҡан рус телле уҡыусым кабинетҡа килеп инде: "Һеҙ беҙгә хыянат иттегеҙ!" - тип, илай башланы. Аптырап, нимә булды, тип һорайым. "Һеҙ уҡытҡанда башҡорт теле кабинеты беҙҙең Тыуған илебеҙ кеүек ине. Һеҙ беҙҙе Тыуған илһеҙ ҡалдырҙығыҙ!" - тип, ишекте шарт ябып сығып китте", - тип һөйләгәйне. Бөгөнгө әңгәмәселәремдең тел төбөнән аңлашылыуынса ла, туған телде үҙ күҙлегенән сығып һайлаған ата-әсәләр ҙә балаларын башҡорт теленән генә түгел, дәүләт теленән, ысын мәғәнәһендә Тыуған иленән яҙҙыра, тамырҙарынан айыра, ел ыңғайына осоп йөрөгән ҡамғаҡҡа әйләндерә...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

**Тыйыуҙар күп төрлө, ә мин үҙемдә бер тәртәлә тотоу, әҙәптән, тәүфиҡтан айырылмаҫ өсөн күңелемдән генә ошо һүҙҙәрҙе әйтеп, тыйылып йөрөйөм.**

# КҮҢЕЛЕМ ТЫЙЫУҘАРЫ

♦ Ололанма, һылыумын, тип,
Һылыулығың һулып китер.
Ололанма, уңғанмын, тип,
Уңғанлығың бөтөп китер.
Ололанма, мин бейектә,
Һеҙ түбән, тип,
Бейеклегең түбән төшөр.
Шул сағында
"түбәндәрең" нимә тиер?
Нимә тиһен, кафыр, тиер...

♦ Сәскәләр араһында сүп булма - тамырындан йолҡоп ташларҙар; сүптәр араһында сәскә бул - сүпте утарҙар, үҙенә һоҡланырҙар.

♦ Һис үсекмә, ҡылтайма: ҡылтым кеше - ҡалтайған таҡта, йәйгеҡышҡы селләлә шартлап һына, юҡҡа сыға.

♦ Бейек ҡаяға менеп баҫҡас, күккә аштым, тип маһайма: ел-дауылдар ҡаяларҙы ла он-талҡанға әйләндерә.

♦ Алты ағзаң теүәл булғанда,
Ысын дуҫтар булһа яндарыңда,
Йөрәгеңдә дәртең бар саҡта,
Рух ҡошоң әйҙәп торғанда,
Ут һүндермә һис тә усаҡта.
Утың һүнһә әгәр усаҡта,
Булмайһың бит донъяла
ул саҡта...
Ут һүндермә һис тә усаҡта.

♦ Ғүмер аты бик йылғыр, теҙгенде лә, йүгәнде лә өҙөп ташлай, алға саба, туҡтау белмәй. Ә шулай ҙа:
Һис бошонма ғүмер уҙа, тиеп,
Һис уфтанма сәсем аҡ, тиеп.
Шатлан, ғорурлан,
уҙған ғүмер юлым
Аҡ сәскәләй ап-аҡ, паҡ, тиеп.
Ҡалған йылдарым да,
Алла бирһә,
Булыр әле паҡ һәм хаҡ, тиеп.

♦ Йүн сыҡһа, йүнләп, һүҙ сыҡһа, һөйләп ҡал.

♦ Киреләнмә: кире кеше кәкерәйеп үҫкән ҡарт ағас ул, уны балта менән киҫеп, юнырға ғына кәрәк.

♦ Соҡор төбөнән мәғдән эҙләмә: соҡор йотор, юҡ итер; хәләл аш биргән ерҙе онотма: атлатыр ҙа, данлар ҙа.

♦ Йәш инек - ҡыҙыл инек,
Ҡартайҙыҡ - алһыуландыҡ,
Индек сабый хәкөмөнә.
Раҫ йәшәйек
Хоҙайҙың биргән көнөнә,
Шатланайыҡ һәр бер
яҡты көнөнә,
Зарланмайыҡ ҡара,
ҡыҫҡа төнөнә.
Теләйексе, бер Хоҙайҙан,
Иман менән индерһен, тип,
Киң һәм яҡты гүренә,
Һәм дә хисап биреүһеҙ
йәннәтенең түренә.

♦ Һәр саҡ иҫеңдә тот: кешеләр һине кешегә һанаһындар өсөн Кеше бул.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**

ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ



**Бәғзе ваҡыт, туған телдәге ниндәйҙер берәй һүҙ хаҡында фекерләй башлаһаң, уйҙарың үҙеңде әллә ҡайҙарға алып китә. Мәҫәлән, барыбыҙ ҙа ун алты килограмм ауырлыкты "бер бот" самаһы, тип әйтергә гәҙәтләнгәнбеҙ.**

# БҮКӘН ҺҮҘЕ...

## ултырғысты ғына аңлатамы?

Ун литрҙан ҙурыраҡ биҙрәләрҙе элек әсәйем мәрхүмә "ботлоҡ" биҙрә тей торғайны. Уртаса ҙурлыҡтағы эре мөгөҙлө малдың беҙ - "бот", рустар "бедро" тип атаған өлөшөн беҙҙең яҡта бурбай тип тә әйтәләр. Ана шул бот үлсәме, "пуд" тип аталып, борондан төрки телле халыҡтар менән алыш-биреш иткән урыҫтарҙың теленә лә инеп киткән. Күп һүҙҙәр беҙгә рус теленән килгән булһа ла, беҙҙән уларға күскәндәре лә бар. "Деньги" һүҙе лә төрки телдәге "тәңкә"-нән килеп сыҡҡан, тип фаразлайҙар.

Яңы йыл алдынан Сибайҙан алыҫ булмаған Татлыбай ауылына һуғым һуйырға барҙыҡ. Унда Зәбир исемле бер егәрле фермер хәләл ефете Айгөл менән менән күпләп йылҡы, эре мөгөҙлө мал үрсетеп, көҙөн уларҙы һимертеп, кешеләргә һуғымға һата. Бер яҡыным уның малының һәр саҡ һимеҙ булыуы хаҡында һөйләгәс, мин дә был яҡташ менән танышып, һуғымлыҡты унан алырға ҡарар иттем. Ул һатҡан турыҡай, ысынлап та, күр генә булып сыкты, әлхәмдүлиллаһ. Шулай, рәхәтләнеп, башҡортсалап һөйләшә-һөйләшә, ниәтләгән эшебеҙҙе атҡарып йөрөүебеҙ. Шул саҡ был яҡташ ауыҙынан "бүкән" тигән һүҙҙең элек миңә бөтөнләй мәғлүм булмаған бер мәғәнәһен белдем. Беҙҙең Баймаҡ яғында ултырғысты (табуретка), башлыса, шулай тип атайҙар. Шулай уҡ аңра һымағыраҡ кешене "күҙле бүкән" тип әрләүҙә бар. Ҡайһы бер яҡтарҙа ағас төбөрөн дә бүкән тиҙәр икән.

- Хәлил ағай, бүкәнен айырым сабып бирәйем әле үҙеңә, - тип, тайҙың артҡы өлөшөн (умыртҡа бағанаһының билдән алып ҡойроҡҡа тиклем булған, утыҙ биш - ҡырҡ сантиметр самаһы урыны) бүлә башланы.

- Малдың да бүкәне була икән, - тип гәжәпләндем, - ғүмеремдә ишеткән нәмәм түгел. Кеше ултыра торған ағас бүкәндә беләм...

- Иттең иң тәмле ере бына ошо бүкәндә инде, - тип өҫтәне Зәбир.

Анатомик терминды ҡулланып әйткәндә, беҙҙең ултырыш ҡоймос һөйәге (копчик) менән тамамланған, "крестец" (крестцовый отдел позвоночника) тип аталған өлөшөбөҙҙә. Бына шул яҡтан уйлап ҡарағанда, "бүкәнгә ултыр", тип әйтһәк, нисек итеп һәм ҡайһы еренә ултырыуға ишара булып яңғырай ҙа баһа. "Бүкән" һүҙе "ултырғыс" йә табуретка булып китер алынан, иң тәүҙә ана шул үҙебеҙҙең ултырышыбыҙҙы аңлатҡан булһа кәрәк.

Халыҡта кемделәр "бүкән баш", тип әрләһәләр, шунда уҡ әлеге ултырғыс күҙ алдына килә. Ә инде был һүҙбәйләнеш юғарыла бәйән ителгән бүкәндә күҙ уңында тотоп әйтелгән икән, тимәк, был кешенең башы уның артҡы һаны менән сағыштырыла була түгелме? Боронғо ата-бабаларыбыҙҙың берәй "әсе телле" вәкиле тарафынан әйтелгән был һүҙбәйләнеш ләғәтебеҙгә бик ҡулайлы ғына йәбешеп, ошо көнгә тиклем һаҡланып килгән. Башҡортса-русса һүҙлектә, "бүкән баш", тип ҙур башлы кеше хаҡында әйтелә, тип тә яҙылған. Ә минең уйымса, был һүҙбәйләнештә баштың размерынан бигерәк уның уйлау һәләте күҙ уңында тотола...

Шулай, телебеҙҙе яҡшыраҡ белер өсөн ауыл кешеләре менән йышыраҡ аралашыу кәрәк. Электән килгән бик күп һүҙҙәребеҙ башҡорт ауылдарында йәшәгән яҡташтарыбыҙ телендә, береһенән-береһенә күсә килеп, әлегәсә һаҡланып ҡалған. Беҙҙең яҡта ауылдаштарыбыҙ, гәҙәттә, йыш ҡулланып һөйләшкән "буйтым" (русса - вдоволь, вполне), "шыпа" (бөтөнләйгә), "уба-туба" һәм башҡа шундай күп кенә һүҙҙәрҙе мин китаптарҙа, гәзит-журналдарҙа бер ҡасан да осратканым юҡ. Башҡортса-русса һүҙлектән генә эҙләп тапҡылайым. Һүҙлектә "уба-туба"ның мәғәнәһе, ҡайһылыр райондарҙа ҡулланылған диалектҡа ярашлы, "соҡор" тип бирелә, ә беҙҙең яҡта (Баймаҡ) ул "һәүетемсә, байтаҡ ҡына", тигән мәғәнәләрәк әйтелә. Мәҫәлән, "шул яланда йөрөй торғас, йыйған емеш-еләктәребеҙ ҙә уба-туба ғына булып китте...", тиҙәр.

Һәр төрлө ырыуҙарыбыҙҙың һөйләш диалектын өйрәнеү - телебеҙҙе байытыуға һыҙ ярҙам итәсәгенә ныҡлы ышанам. "Беҙҙең район ғына әҙәби, саф башҡорт телендә һөйләшә, ә һеҙ дөрөҫ һөйләшмәйһегеҙ", тип бәхәсләшергә яратҡан бәғзе яҡташтарыма бына шуны әйткем килгәйне.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ДӨРӨҪ ҺӨЙЛӘШӘЙЕК!

# ХАТАЛЫ ЯҘЫУҘАР ХАҠЫНДА

**Гәзитебеҙҙең 20-се һанындағы "Әйт, тиһегеҙ..." рубрикаһында сыҡҡан мәҡәләләгә һүрәткә иғтибар иттем. Унда бер уҡыусы ҡыҙ бала таҡталағы "хәкимиәт" һүҙен "хакимиәт"кә төҙәтеп тора. Бына ошо һүҙҙең ҡайҙан килеп сығыуын миҫал итеп килтереп, туған телебеҙ хаҡында бер аҙ үҙемдең фекеремде лә әйтеп китмәксемен.**

Әлеге һүрәттәге ҡыҙҙың төҙәтеп торған һүҙе телебеҙгә бынан мең йылдар самаһы элек динебеҙ менән бергә килеп ингән бихисап ғәрәп һүҙҙәренең береһе ул. Ғәрәп алфавитында "х" хәрефе бәрәү генә түгел, ә ике төрлө. Тәүгеһе "хә", йәғни нәҙек итеп уҡылһа, икенсеһе, өҫтөндә нөктә торғаны "ха" тип уҡыла. Мәҫәлән, ғәрәптән күскән "хәрәкәт", "хәрәм", "хәрби", хәреф" һүҙҙәре нәҙек "хә" менән яҙылып, башҡорт теленә лә шул көйө инеп киткән. "Хата", "халыҡ", "хазина" һәм башҡа күпмелер һүҙ ҡаты, йәғни "ха" хәрефенә башлана. Ә күп кенә һүҙҙәр ғәрәпсә ҡаты "ха" менән яҙылып, әйтелеүенә ҡарамаҫтан, беҙҙең телгә "нәҙегәйтелеп" күсеп киткән. Мәҫәлән, "хәсрәт", "хәтәр" һәм башҡалар. Башта иҫкә алып киткән "хакимиәт" һүҙе ғәрәпсә шулай ҙа "хәкимиәт" тип яҙыла. Ата-бабаларыбыҙ быуаттар буйы уҡыған ғәрәп алфавитын Октябрь революцияһынан һуң рус хәрефтәренә күсерелгән, башҡорт теле һүҙлеген төҙөгән телселәребеҙгә ана шулай ҡулайыраҡ булып тойолғандыр. Юғиһә, беҙ хәҙер "хасрәт", "хатар" тип һөйләшер инек, моғайын.

Телебеҙгә ғәрәптәрҙән ингән бихисап башҡа һүҙҙәребеҙ ҙә, әлбиттә, шул көйө генә һаҡланмаған. Мәҫәлән, ғәрәп алфавитында "в" хәрефе бөтөнләйгә юҡ. Әммә "уатан", "уаҡыт", "үәкил" һымаҡ һүҙҙәр (уҡылышы һаҡланып ҡалған хәлдә лә) "ватан", "ваҡыт", "вәкил"гә әйләнгән. "Жауап", "жәннәт", "жәһәннәм", "жин", "сурәт" һымаҡ ҡайһы бер һүҙҙәр татар теленә үҙгәрмәгән килеш ингән, ә башҡортса улар "яуап", "йәннәт", "йәһәннәм", "ен", "һүрәт" булып киткән. Ә ғәрәптәге "хедмәт" һүҙе татарсаға "хезмәт", башҡорттар өсөн "хеҙмәт"кә әйләнгән.

Беҙҙең телгә "татарлашып" килеп ингән ғәрәп һүҙҙәре лә күп. "Ҙолом" (несправедливость), "ҙаң" (мнение), "ғаҙаб" (мучение) һымаҡ күп кенә ғәрәп һүҙҙәренең "золом", "заң", "газап" булып китеүен дә күптәр белмәй. Былары инде ҡасандыр беҙҙең атай-олатайҙарыбыҙҙы уҡытҡан татар телле мөғәллимдәрҙән күскән, тип фаразлау кәрәктер. Әммә быуат элек башҡорт һүҙлегенә шулай тип инеп киткән һүҙҙәрҙе хәҙер "Бынығы - хата", "Бынығы - дөрөҫ", тип аныҡ ҡына әйтергә маташыу кәрәкмәй, минеңсә. Юғиһә, уныһ ҙа күп булған һәр төрлө сетерекле тел проблемаларынан "бутҡа" яһалып ҡуймаҫ тимә. Исемдәребеҙгә килгәндә лә шул уҡ хәл (мәҫәлән, Ғәзимде беҙ Ғәзим тип атап өйрәнгәнбеҙ). Был миҫалдарҙы кемделәр төҙәтеү йәиһә кем менәндер бәхәсләшеү маҡсатында килтермәнем. Киреһенсә, йөҙ йылға яҡын һаҡланып килгән, тел белгестәребеҙ тарафынан ҡасандыр төҙөлгән, күптән инде үҙебеҙ күнеккән һүҙлегебеҙгә йүнәлеш алып, "Башҡорт теле" дәрестәрендә нисек өйрәткәндәр, ана шулай һөйләшәйек, тимәксемен.

Ике тел дәүләт теле тип таныған күп милләтле республикабыҙҙа бәғзе һүҙҙәрҙе (айырыуса исемдәрҙе) тәржемә итмәгән көйө береһен икенсеһенә күсерергә мәжбүрбеҙ. Мәҫәлән, беҙҙең Баймаҡ районындағы Һаҡмар йылғаһы аша һалынған бер күпер янында әлегерәк "р. Сакмара" тип яҙылғайны. Һуңғараҡ уны "р. Хакмар" тип төҙәтеп ҡуйҙылар. Ошондай күсереүҙәр мәлендә "Һөйәргол", "Һөйөндөк" һымағыраҡ исемдәр бер килке уңайһыҙлыҡ тыуҙыра. Шуға күрә, бындай эштәрҙе байҡабыраҡ атҡарыу кәрәк. Телебеҙҙәге хаталарға килгәндә, мин шәхсән уны ҡәтғи рәүештә "наҙанлыҡ" тип уҡ атау яғында түгел. Тик, әллә ни тарих төпкөлөнә төшөп, артыҡ соҡонмай ғына, махсус белемле башҡорт теле уҡытыусыларын тыңлайыҡ, уларҙың иҫкәрмәләренә иғтибар итәйек, хәҙергә башҡорт һүҙлеген өйрәнәйек, тимәксемен...

**Хөрмәтулла ҠЫУАНДЫҠОВ.**

**✓ Ҡайҙандыр йыр ишетә башлай ҙа, был моң уларҙы үтеп киткәс тә бер арауыҡ оҙата бара. Тауыш ер аҫтынан да, ҡайҙандыр өҫтән дә ағылғандай тойола, әммә туристар башҡарыусыларҙы күрә алмай.**



- Нишләп улай иртә торҙоң? - Рамаҙан Любаның былай яҡын ултырыуынан уңайһыҙланып, теләнә-теләнмәй һүҙ башланы. Был ҡыҙҙы ул тәүге көндә ашхана ла уҡ күҙгә элгәйне. Улай тиһәң, уны бындағы һәр ир күҙгә элгәндер. Бигерәк һылыу бит. Нәфис йөҙөнә, күлдәй күҙҙәренә ҡарап, зәғифлеген дә онотор-ға була һымаҡ.

- Мин иртәсел ул. Берәүгә егәрле ҡатын булыр инем дә, бына алыусы ғына юҡ, - тип шаярыуға бороуы бөтөнләй ҡаушатты егетте. Ҡыҙ уның юғалып ҡалыуын аңғарып, шыңғыратып бер көлдө лә, иҫән ҡулы менән арҡаһынан тупылдатып һөйөп уҡ ҡуйҙы.

- Мосолман егете бит әле һин, Ромка, шулаймы? Ҡустым кеүек күрәм һине, минең дә һинең йәштәге ҡустым бар ине...

- Ҡайҙа ул хәҙер?

- Хәрби ине ул, ҡырҡ икенсе йыл училищеһын тамамлап, һуғышҡа ингәндән хәбәрһеҙ юғалды... Мин Ленинградта биш йылдан ашыу уны көтөп йәшәнем.

- Һин Ленинградтанмы?

- Эйе, мин Ленинградта тыуып үҫтем. Атайым хәрби булды, ике ағаһы ла, ҡустым да, мин дә - хәрбиҙәр династияһы беҙ. Атайым штабта бомба аҫтында ҡалған, ағайҙарына ла ҡара ҡағыҙ килгән. Әсәйем блокада ҡорбаны булды. Ғаиләбеҙҙән бына ошондай хәлдә бер үҙем генә тороп ҡалдым.

- Ә һин... ҡайҙа былай?.. - Рамаҙан ҡыҙҙы рәнйетеүҙән ҡурҡып, хәбәрен әйтеп бөтөрмәне.

- Мин музыка мәктәбен тамамланым, фортепиано буйынса. Ярайһы ғына йырлай ҙа инем, - тип яуабын бөтөнләй икенсе төптән башланы ҡыҙ. - Тик үҫеп еткәс, атайымдың ҡул аҫтындағы йәш капитанға үлеп ғашиҡ булдым да, әсәйемдең тыйыуынан ҡасып китеп, разведшколаға уҡырға индем. Һуғыш башлангас та, алдағы-дөрөҫөн бергә ҡушып, тырышып-тырмашып уның янына барып урынлаштым...

Люба башын ҡырын һалып, йылы ҡараштары менән аҫтағы бурыҡ һыуҙы иркәләй биреп ултырҙы ла, дауам итте:

- ППЖ тинеләр беҙҙе фронтта, походно полевая жена, ишетмәгәнең булдымы? - Рамаҙандың "әллә" тип яурындарын һикертеүен күҙгә лә элмәне үҙе. - Тылда ҡатыны, балалары бар икәнен белә тороп, мин уға яу юлындағы ҡатын булдым... Сөнки яраттым! Мине күптәр гәйепләне... Ә һин гәйепләйһеңме мине, Рома? - яңы ғына йылмайып ултырған ҡыҙ ҡай арала йәш тулған күҙҙәре менән төбәлде егеткә.

- Мин?.. Нишләп?.. Юҡ! - Рамаҙан был кҿк йөҙө ише асыҡ зәңгәрлеккә арбалып ҡалып тотлоҡто, буталды. - Люба, илама, йәме...

- Иламайым... Мин күптән иламайым инде, - йәштәре субырлап ағып төштөп китте, ә ирендәре һаман йылмайҙы. - Ҡырҡ дүрттең ғинуар һыуығында өс кеше разведкаға сыҡтыҡ. Һаҙлыҡ аша ҡаршы яҡтан немецтар беҙҙе әҫәрһеҙ артиллерия утында тота, бер нисек тә йырып сығып булмай ине. Әллә күпме араны шыуышып барып уларҙың кәрәкле пункттарын картаға төшөрөп алдыҡ. Тик кире ҡайтҡанда засадаға эләгеп, икәүебеҙ ятып ҡалды. Мин ҡабаланып сигенгәндә һаҙ аша үтә торған хәүефһеҙ һуҡмаҡтан яҙлыктым һәм үҙебеҙҙең яҡҡа сығып етер саҡта ғына һаҙлыҡҡа батып, шунан сығам тип ярты тән көрәштем...

- Сыҡҡанһың бит, ҡотолғанһың, Люба? - егет ҡыҙҙың итәгендә ҡалтырғанған кескәй генә ҡулын йылы устарына алды. - Тереһең бит, бына ниндәй матур булып янымда ултыраһың.

- Сыҡтым, эйе... Беҙҙекеләр иртәнсәк килеп тапҡандар... Һаҙға ҡуша туңғанмын... Ҡутарып алғандар. Аҙаҡ шул яҡ ҡулым менән аяғым серей башланы... ҡырҡтылар... унан тағы ҡырҡтылар. Мине шулайтып тунап бөтөрҙөләр, Рома...

Рамаҙан ҡыҙҙың ҡулын нығыраҡ ҡыҫты. Башҡаса ярҙам да итерлек түгел уға, йыуатыр һүҙ ҙә юҡ.

- Һөйгән кешем, капитаным, ҡатынын айырам, мине алам тигән кеше, хәлемдә килеп күрҙе лә, хушлашмай ҙа китеп олаҡты. Фронттан иҫән-һау ғаиләһенә ҡайтҡан тип ишеттем... Бына шундай хәлдәр минең, туғанҡайым, - Люба күңелһеҙ генә йылмайып ҡабаттан Рамаҙанға баҡты, - Ғәфү ит инде, нишләптер һинә асылдым... борсоном һине...

- Юҡ-юҡ, бер ҙә борсоманың. Мин барыбер... тик ултыра инем.

- Йырлап ултыра инең бит, - Любаның шатлығы ла, ҡайғыһы ла бер урында, сылтыратып көлөп тә ебәрҙе. - Йырла әле тағы ла...

- Ҡуйсы, юҡ, Люба, мин бит былай ғына, күңел баҫыр өсөн...

- Тауышыңдың моңло ғына баритон икәнен аңғарып өлгөрҙөм инде. Ә минеке - сопрано, юғары. Әйҙә, һин башла ла, мин ҡушылып ҡарайым, - тип нәҙек бармаҡтары менән егеттең ҡаты беләгенә сат йәбеште.

Рамаҙан был ҡыҙҙан ҡотола алмаҫын аңлап, тәрән итеп һулыш алды, ҡат-ҡат тамаҡ ҡырҙы. Әйтерһең, ҙур сәхнәгә сығып баҫҡан әртис. Унан яурындарын турайтып, күкрәген кирә бирҙе лә, ярымтауыш менән генә йыр башланы:

*Рассветали яблони и груши,*
*Поплыли туманы над рекой...*

Киләһе юлдарҙан Люба ла элеп алды:

*Выходила на берег Катюша,*
*На высокий берег на крутой!*
*Выходила песню заводила...*

Бер-береһенә һыйынышып тигәндәй ултырған был икәү йыр артынан йыр һуҙҙы. Йырлаған һайын Рамаҙан да батырайҙы, хәҙер инде уның тауышы яр башынан ары китеп, күл өҫтөн дә, казармалар яғын да тултырҙы. Уға ауаздаш булған нәҙек тауыш йырҙы тағы ла яңғырауыҡлыраҡ, моңлораҡ итеп ебәрҙе. Нисәнселер йырҙарын тамамлауҙарына, артта сәпәкәй һуҡҡан тауыштар ишетелде. Доктор Соломон менән бер нисә медсестра килеп торған, аҫәрләнеп тыңлайҙар икән. Осраҡлы тамашасыларынан унайһыҙланды Рамаҙан, хатта ҡуҙғалып китергә лә иткәйне, доктор яурынына баҫып туҡтатты:

- Бик яҡшы дуэт сыға һеҙҙән. Берәй гармунсы ла тапҡанда, концерт бирә алаһығыҙ. Ә нишләп, кистәрен күңелһеҙләнеп ултырғансы, рәхәтләнеп йыр тыңлар инек.

- Идея! Захар Соломонович, хор төҙөйбеҙ! - тип сәрелдәп тә ебәрҙе йырлап тауышы асылған Люба.

- Хор? Була, ә нишләп? - Захар Соломонович та күтәреп алды. - Әйткәндәй, йыр ул бик яҡшы терапия.

- Вася гармунда уйнай, тик гармуны ғына юҡ, - тип һүҙгә ҡушылды Рамаҙан да.

- Ә гармун табырға булырмы икән, Захар Соломонович? - Любаның ялбарыулы ҡарашына доктор ҙа ҡаршы төшә алмай:

- Булыр. Киләһе ылауға хор өсөн кәрәкле инструменттарҙы яҙырбыҙ, - тине.

Алдына алғанын ҡуймай торған ҡыҙ икән Люба ла. Шул кисте уҡ йыйылыш йыйып, хорға халыҡ туплай башланы. Башта бот сабып көлөп тыңлаһалар ҙа, был сибәр ҡыҙға ярарға тырышыусылар ҙа, йәки бер эшһеҙ ятыуҙан ялҡыусылар ҙа, хатта ярайһы уҡ моңло булғандар ҙа табылды. Ике тиҫтәләп йыраусыны йыйып алғас, ҡыҙҙар килгәс тә китапхана итеп йыйыштырып алған ҙур ғына бүлмәлә йырлаша башланылар. Башта ҡулдарын болғап алда торған Любаны тыңламай, кем нисек теләй, шулай аҡырҙы. Өгөтләй-өгөтләй уларҙың урындарын алмаштырҙы, ҡабаттан тыңлап ҡараны, тағы йырлатты ла тағы алмаштырҙы. Бер башлатты, бер туҡтатты, нисек торорға, нисек тын алырға, нисек ауыҙҙы асырға икәнде күрһәтте. Тиргәшеп, үпкәләшеп тә бөттөләр, үсегеп сығып киткәндәр ҙә булды, әммә күпмелер ваҡыттан бүлмәнән ярайһы уҡ тыңларлыҡ ауаздар ишетелә башланы.

Оҙон ҡыш буйынаса шөғөлләнәсәк был хор менән Люба һәм Рамаҙан. Яҙ сығыуға уларҙың хорын бер түгел, өс гармунсы һәм бер скрипкасы биҙәйәсәк. Ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар тауышы менән хорҙа иллеләп кеше булып китәсәк. Алға китә биреп сер сискәндә... Валаам утрауы тәңгәленән үткән пассажир пароходтары пансионатҡа етәрәк ҡайҙандыр йыр ишетә башлай ҙа, был моң уларҙы үтеп киткәс тә бер арауыҡ оҙата бара. Тауыш ер аҫтынан да, ҡайҙандыр өҫтән дә ағылғандай тойола, әммә туристар башҡарыусыларҙы күрә алмай, ҡараштары менән яр баштарын ҡапшап эҙләй. Һәм тик бер мәлдә, пароход менән тау өҫтөндәге бейек ҡойма кимәле тигеҙләнгән бер урында ғына ял итеүселәр ҡойма арьяғындағы убаға теҙелешкән сәйер төркөмдө шәйләп ҡала. Был төркөм илһамланып йыр артынан йыр һуҙа. Аҫтағылар уларҙы тыңлап ҡинәнә, ҡул саба, ҡәнәғәтлектән һыҙғыра, ҡыҫҡыра. Ә хор тынмай йырлай ҙа йырлай. Әле пароход үтеп киткәс тә убала теҙелешеп ултырған "танкистар", ҡәрзин эстәрендәге "самауырҙар", таяҡтарында таянып торған сатан-сулаҡтар илһам ҡомарынан арына алмай. Уларҙың хоры әүәһеҙ ваҡыт Валаам утрауын тетрәндерә әле. Һәм был утрау күл буйлап сәйәхәт итеүселәр телендә "йырсы утрау" тигән атама ала...




## Яусы

Пансионатҡа ҡатын-ҡыҙҙарҙың килеүе бындағы фронтовиктарҙы тыйнаҡландырып ҡына ҡалманы, уларҙа ир-егет тойғоларын да уятты. Һәр кемдең ҡаршы енес күҙенә яҡшыраҡ булып күренгеһе, ниндәйҙер ыңғай эштәре менән телдәренә эләккеһе килде. Шул ҡыҙҙарҙың бер генә иркә ҡарашына юлығыу, йылмайыуҙары шаһиты булыу йәки ағымлы һүҙҙәрен ишетеү өсөн әллә ниҙәрен бирерҙәй булып йөрөгәндәр күбәйҙе. Ҡалайтаһың, ир-егеттең дә яртыһынан күбе утыҙға саҡлы егет-елән бит, тап ҡатын ҡосоп, ғаилә ҡороп йәшәй торған саҡтары. Аяҡ-ҡулдар булмау әле бит йөрәк юҡты аңлатмай. Теләк юҡты, хис юҡты, тәбиғи инстинкттар юҡты...

Рамаҙан ситтән генә ҡәнәғәтләнеп күҙәткән бер ҡыҙыҡ хәл дә бар. Оҙон ҡыш айҙарында "китапхана" тип ҡайнап йөрөгән Василий менән Зинаиданың бер береһенә ылығып китеүе. Зинаида Захаровна китапхана ойоштороп ебәргәйне, уға кәштәләр яһап биреүсе булып оҫта ҡуллы Вася ялланды ла, нисә айҙар инде ҡушарлап йөрөп бергә эшләйҙәр. Васяның телендә лә хәҙер өҙлөкһөҙ "Зина ла Зина": "Зина әйтте", "Зинка һораны", "Зинаның үтенесе" һәм башҡалар. Зинанан һәм шул китапхананан башҡа донъяһын да, дуҫтарын да, хатта хәсрәтле хәлен дә онотҡандай. Казармалағылар башта төртмә телләнеп шаяртһа ла, был ике етди кешенең уртаҡ һүҙҙәре лә, фекерҙәре лә булыуы береһен дә аптыратманы. Тыныс һәм белемле Василий менән төплө, эшлекле Зинаида бындағы күптәр өсөн өлкән апай-ағай итеп ҡабул ителгән, уларға кәңәшкә киләләр, ярҙам һорап мөрәжәғәт итәләр ине. Зинаида яҙыу-һыҙыуға оҫта, грамоталы булып, егет-ҡыҙҙарҙың төрлө документтарын йүнләшеүгә, туған-тумасаларын эҙләшеүгә һәм башҡа мәшәҡәттәренә булышлыҡ итә. Василий үҙ сиратында ғәрип-тәрҙең йөрөшөн һәм йәшәйешен еңеләйтеүҙең юлдарын эҙләй: әле береһенә уңайлы таяҡтар, икенсеһенә арба, өсөнсөһөнә терәлеп ултырыу ҡулайламаһы, дүртенсеһенә караватынан тора алыуға бер йайлама яһай. Ошо изгелектәре һәм ярылып ятҡан көслә рухтары, миһырбанлы ҡатылыҡтары өсөн дә яраталар уҙҙәрен.

- Зинаида Захаровнаның һуғышҡа тиклем ғаиләһе булғанмы? - тип һораны бер көн оҫтахана итеп бирелгән бүлмәлә дуҫына кипкән ағастарын юнышҡан Рамаҙан.

Василий гәҙәтенсә ҡапыл ғына яуап бирмәй, Рамаҙан да быны төшөнөп бөткән инде, шуға һорауын ҡабатламай ҙа, сабырһыҙланып төбәлмәй ҙә. Бына ул ҡулындағы шымартып ултырған таяғынан юнышҡы саңын өрөп осора ла, башын бора:

- Булған. Ире тәүге йылда уҡ һәләк булған. Ике ҡыҙы тылға оҙатылған да, юлда поезды самолеттар бомбаға тотоп, балалары юғалған. Тереме-үлеме икәнлектәрен дә белә алмаған.

- Һы... Ауыр хәл, - Рамаҙан әлеге һөйләшеүҙе ҡайҙан башлаған хәлгә ҡалды, бындайҙы уҡ ишетермен тип уйламағайны шул. - Көслө ҡатын икән улайһа Зинаида ысынлап та, үҙендә ниндәй хәсрәт булып та, башҡаларҙы ҡайғыртып йәшәй.

- Ҡыҙҙарын эҙләп төрлө урындарға хаттар яҙып, гәзиттәргә мәҡәләләр ебәреп йөрөп әллә күпме кешеләрҙе табыштырған, яҙмыштарҙың юғалған еп осторын ялғашҡан ул. Әле лә өмөтөн өҙмәй, һаман яҙа, эҙләй, көтә...

Ирҙәр бер мәлгә тынып ултырып алды. Кеме нимә хаҡында уйлағандыр, шул мәл Рамаҙандың башына бик елле уй килде лә төштө. Һәм ул был уйын, холҡона хас булғанса, шундуҡ теленә лә төшөрҙө:

- Ә нишләп һеҙгә өйләнешмәҫкә, ә?

Вася киң йылмайҙы ла, рыя ғына ултыра бирҙе.

- Ҡара, Вася, ысынлап әйтәм һиңә. Зинаида менән һеҙ бына тигән пар. Икегеҙ ҙә ғаиләһен юғалтҡан, икегеҙҙә бер ҡайғы. Шул ҡайғыларығыҙҙы артҡа ташлап, әйҙә, тотоғоҙ ҙа яңы тормош башлағыҙ? Ә, дуҫ?

**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ШИФАЛЫ ТИГӘНГӘ...

## ышанма

■ Арҡаңды төҙ тотоп ултырыу сәләмәтлек һәм матурлыҡ билдәһе булараҡ ҡабул ителгән. The Daily Mail яҙыуынса, һуңғы тикшеренеүҙәр был фекерҙе башкөлләй үҙгәртә. Арҡаһын бөгөп ултырыусының умыртҡа бағанаһына көс төшә, ти ине быға тиклем ғалимдар. Әммә арҡа төҙ булғанда ҡорһаҡ, арҡа мускулдары көсөргәнеш кисерә, был биле ауыртҡан кешеләргә хәүефле булыуы бар. Әгәр арҡаны бөгөп ултырһаң, алда әйтелгән һәм аяҡ мускулдары ял итә. Шуға ла ошо рәүешле ултырыуҙың үҙ файҙаһы бар. Ғөмүмән, тәндең торошон үҙгәртеп алыу яҡшыраҡ. Мәҫәлән, оҙайлы ваҡыт ултырып уҡырға, эшләргә мәжбүр булыусыларҙың ултырыш мускулы яйлап үҙенең функцияларын юғалтыуы бар. Оҙаҡ ултырғанда аяҡ тарамыштары ла ҡыҫҡара һәм уларға даими көс төшә.

■ Ирҙәрҙә йөрәк сирҙәре аҙып китеүе уларҙың ғаилә тормошо менән ҡәнәғәт булмауына бәйле тип тә ҡарала. Тель-Авив университеты хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, никахы менән ҡәнәғәт булмағандарҙа инсульт хәүефе 64 процентҡа юғарыраҡ. Табип-психиатрҙарҙың был яңылыҡҡа үҙенең ҡарашы бар, бәхетһеҙ ғаилә тормошо гел стресс кисерергә мәжбүр итә. Бынан нервы һәм эндокрин системаһы зыян күрә. Әммә ғаилә мөнәсәбәттәре менән бәйле проблемалар ҡатын-ҡыҙға ла сәләмәтлек өҫтәмәй. Соматик ауырыуҙар, уларҙың иң таралғандары - ашҡаҙан сей яраһы, гипертония барлыҡҡа килә. Гүзәл зат өсөн стрестар гормональ тайпылыштар менән дә ҡурҡыныс. Психотепевт Ирина Поташова эзофагоспазм - ҡыҙыл үңәс спазмы уның бер һөҙөмтәһе тип иҫәпләй. Нервылар көсөргәнеше арҡаһында кеше аҙыҡ йота алмай башлай.

■ Бөгөн ризыҡ әҙерләү, әллә ниндәй модалы аҙыҡтар, тәмләткестәр ҡулланыу бик популяр. Ғалимдар ундай "иҫ киткес тәьҫиргә эйә" продукттарға ышанмаҫҡа кәңәш итә. Корицала, мәҫәлән, фәндә коричный альдегид тип аталған берләшмә бар, ул тән ауырлығын, аппетитты, диабет сирлеләрҙә холестерин кимәлен кәметә. Әммә бының өсөн корицаны семтемләп түгел, күберәк дозала ашарға кәрәк. Ҡыҙыл шараптағы ресвератрол уны файҙалы итә тигән ҡараш йәшәй. Был берләшмә антиоксидант, яман шештән, 2-се типтағы диабеттан, Альцгеймер ауырыуынан һаҡлай. Тик был һынауҙар хайуандарҙа үткәрелгәндә генә ыңғай һөҙөмтәләр биргән. Етмәһә, шараптың төрөнә ҡарап, был берләшмәнең тәьҫире лә үҙгәрә. Һәм, иң ҡыҙығы, ғалимдар вәғәҙә иткән яҡшы үҙгәрештәргә өлгәшеү өсөн көнөнә 200 шешә шарап эсергә кәрәк буласаҡ! Ҡара көртмәле лә, ҡыҙыл шарап кеүек үк, ресвератролға бай. Әммә уның тейешле күләме тулһын өсөн көнөнә 10 мең емеш ашарға кәрәк. Ҡара көртмәлелә йөрәк сирҙәренән файҙалы антоциандар ҙа бар, әүҙем дозаһы - 150-300 көртмәле. Шоколад ҡан баҫымын төшөрә, тик бының өсөн уны 100 грамм ашарға кәрәк, ә был иһә 2000 калория тигән һүҙ. Куркума - иң билдәле суперпродукт. Ул шешеүгә, инфекцияларға ҡаршы ҡулланыла. Әммә быны тойоу өсөн куркуманы көнөнә 30 грамм ашайҙар. Етмәһә, уның 25 проценты тирәһе генә үҙләштерелә, шуға ла файҙаһы булһын тигәндәр дозаны 100 грамға еткерергә тейеш була.

ШАҢДАУ

# ҠАШ ТӨҘӘТӘМ, ТИП...



**Яраткан баҫмам "Киске Өфө"нөң 20-се һанында Сибай ҡалаһынан Таңһылыу Басированың "Ҡыуандырманы" исемле сығышын уҡыным да, аптыраңҡырап ҡалдым. Һүҙ әҙәби конкурста еңеп сыҡҡан авторҙарҙың бер тышлыҡ эсендәге "Яңы офоҡтар" йыйынтығы тураһында бара. Ул Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә бынан ике йыл элек донъя күргәйне. Аптырарлыҡ та шул: автор конкурста еңеүсе йәш әҙиптәр ижадына бәйле бер генә лә йылы һүҙ тапмаған тиерлек. Бер һелтәнгәндә быныһын да буш ҡалдырмайым әле, тиепмелер, китапҡа "Баш һүҙ" яҙған бән фәкирегеҙгә лә "өлөш" сығарған.**

Хәҡиҡәт юллауҙы оҙонға һуҙмайынса, Таңһылыу Басироваға, ҡолаҡ һалыр булһа, шуны әйтер инем: художестволы әҫәргә ғәҙел баһа бирер өсөн был өлкәнең үҙенсәлектәрен, шартлылығын, заман талаптарын, һәр авторҙың шәхсән һәләтен күҙаллай алыу һәм был осраҡта инде бигерәк тә әҫәрҙәрҙең конкурс талаптарына ярашлы яҙылыуын иҫәпкә алыу мотлаҡ кәрәк ине. Художестволы әҫәр тыуҙырыу, уға тәғәйен баһа биреү - утын ярыу ҙа, бесән сабыу ҙа түгел. Конкурстың, йыйынтыҡ сығарыуҙың төп маҡсаты ла бит ижади йәштәрҙе ҡанатландырыу өсөн ине. Һеҙ быны, Таңһылыу Басирова, бөтөнләй иҫәпкә алмайһығыҙ, ә үҙегеҙҙең зауығығыҙға бәйле кимәлегеҙҙе асаһығыҙ. Бындай "юл" менән барыусылар, ҡағиҙә рәүешендә, ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарыусан. Иң мөһиме: ҙурҙан ҡубырға кәрәкмәҫ ине. Һеҙ ҡәләм тибрәтергә йөрьәт итеүсегә күҫәк күтәрәһегеҙ. Ипле генә (был да мәҙәнилек билдәһе): "Мин, уҡыусы булараҡ, шулай күрәм, һүрәтләнгән ваҡиғаларҙы, геройҙарҙы шулай ҡабул итәм", - тип, фекерҙәрегеҙҙе нигеҙләп, уларҙы һәүетемсә еткерергә мөмкин ине бит...




"Киске Өфө", теманы дауам итеп, 21-се һанында йәнә бер материал сығарҙы: "Тәнҡит төшөнсәһенә ... "дошман" тигән мәғәнә һалынамы?" тип аталды уныһы. Уның авторы - редакция хеҙмәткәре, бына тигән хәбәрсе, һәләтле йәш әҙип Миләүшә Ҡаһарманова. Төп әйтәһе фекере шуға ҡайтып ҡала: "Тәнҡит" тигән төшөнсә, әҙәбиәттә лә һәм башҡа өлкәләрҙә лә, "дошман" тигән мәғәнә менән алышынған хәҙер. Әгәр һин үҙ фекеренде әйтәһең икән - һин ағымға ҡаршы барыусы, тәнҡитләйһең икән - фетнәсе. Асылда, тәнҡитсе юҡ та ул әҙәбиәттә лә, мәҙәниәттә лә. Ә маҡтау, маҡтамаҫлыҡты ла маҡтау, күрәләтә яһалма маҡтау баштан ашҡан..."

Дөрөҫтө әйтәһең, Миләүшә һылыу! Тик аҡыл эйәләре кәңәшен онотоп ебәрмәһәк ине: кәритәлә сабыйҙы йыуындырғандан һуң баланы йыуынты менән бергә түгеп ҡуймайыҡ. Эйе, һүҙ сурытмайынса, ҡыҫҡа ғына әйткәндә, ысын мәғәнәһендәге әҙәби тәнҡит юҡ тиерлек. Ә ни өсөн юҡ һуң? Ошо өлкәгә күпмелер хеҙмәт иткән кеше булараҡ, уның "кухня"һын белгәнгә, яуаплылыҡ тойоп әйтә алам: әҙиптәрҙең яҡынса туҡһан биш процентына ғәҙел әҙәби тәнҡит кәрәкмәй! Бөтә бәлә ошонда.

Быны аңлатыу өсөн иһә, ҡыҫҡаса ғына булһа ла тарихҡа күҙ һалайыҡ. Донъя әҙәбиәтендә лә әҙәби тәнҡитсене күтәрмәләп тормағандар. Бальзак тиклем Бальзак тәнҡит тураһында "тәнҡитле" фекер ысҡындыра... Урыҫ әҙәбиәтендә (XIX башы) Николай Карамзин "Мәскәү журналы"нда художестволы әҫәрҙәрҙе ғәҙел баһалауҙы юлға һалырға ынтылып ҡарай, әммә ҡыйыулыҡ, теләк кенә етмәүен, ә Миләүшә һылыу әйткәнсә, үҙенә "дошмандар" йыйыу икәнен тиҙ аңлап ала һәм был "эш"тән шундуҡ һүрелә. Белинскийҙы иҫкә төшөрһәк, уның популярлығы, бөгөнгәсә буй еткеһеҙҙәй күренеүе, минеңсә, сығыштарын шул осорҙағы алдынғы идеялар менән һуғарыуына бәйле...

Эйе, ҡәләмдәштәрҙең туҡһан биш процентына ғәҙел әҙәби тәнҡиттең кәрәге юҡ. Башҡаларға ҡағылһаң, һин - шәп! Үҙе хаҡында тейерен әйтә башланыңмы, Миләүшә һылыу әйткәнсә, мәңгелек дошманына әйләнәһең... Уйлаһаң, хәҡиҡәт, һәр ваҡыттағыса, ябайҙарҙың да ябайы: кеше бер ҡасан да идеаль була алмаған кеүек, әҫәрҙәре лә һәр яҡтан камил була алмай. Тап шуның өсөн әҙәби тәнҡит кәрәк тә бит. Лев Толстойҙың әйткәне иҫкә төшә: "Белинскийҙы уҡыным... Пушкинды тулыһынса аңланым..." Хатта бөйөктәрҙең бөйөгө Толстойға әҙәби тәнҡит кәрәк, ә беҙҙең күптәребеҙҙең, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һеркәһе һыу күтәрмәй...

Һүҙ әйтергә сәбәп иткән әлеге ике сығышҡа әйләнеп ҡайтайыҡ. Икеһендә лә хаҡлыҡ бар, әлбиттә, бигерәк тә икенсеһендә. Тик ни өсөн күңелдең төбөндә генә, хатта асылда дөрөҫөн "ярып һалған" Миләүшә һылыуҙың сығышына бәйле ризаһыҙлыҡ тойғоһо ярала һуң? Был, моғайын, әлеге материалдарҙа ла совет осоро һеңдергән - тормошто башлыса ике төрлө буяуҙан ғына торған итеп күреү әҙемтәләрен һиҙемләүҙәндер. Беҙгә һүҙ сәнғәтендә бөтөнләй яңы кимәлгә күтәрелергә ваҡыт. Заман да, мөмкинлектәр ҙә шуны талап итә...

Ниндәйҙер ризаһыҙлыҡ тойғоһо тыуҙырһа ла, Миләүшә Ҡаһарманова сығышы барыбер ҙә әҙәби тәнҡиттең киләсәгенә бәйле өмөтлө уйҙар уята: бар әле, бар, ижад донъяһы сафлығы өсөн үҙ-үҙен онотоп, янып йөрөүселәр. Бына быныһы инде иң мөһиме. Һәр кемдең художестволы әҙәбиәт буйынса ғына түгел, ғөмүмән, тормош-шобоҙҙоң барса яғына ҡарата ла үҙ ҡарашын белдерергә хоҡуғы конституцияла нығытылған. Тик был хоҡуҡты урынлы, һүҙ барған өлкәне тейешенсә күҙаллап, файҙалана белеү генә фарыз.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ.**



**Мин әлеге мәл Өфөлә дауаханала ятам һәм эргәләге киоскынан "Киске Өфө", "Йәшлек", "Йәншишмә" гәзиттәрен алып уҡып барам. "Киске Өфө"ләге "Ҡыуандырманы" тигән мәҡәләгә ҡеүәт итеп яҙыуым. Мәктәптә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләп, хаҡлы ялға сыҡтым. Аҙмы-күпме әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлай белгән кешемен. Һәр хәлдә, уҡыусы булараҡ бик иғтибарлымын.**

# УҠЫУСЫ НАҘАН ТҮГЕЛ

Мәҡәләлә телгә алынған китапты мин дә уҡыным һәм шулай уҡ ҡәнәғәтһеҙ ҡалдым. Ысынлап та, әҙәпһеҙлек ярылып ята. Уйлап ҡараһаң, шул уҡ хис-тойғолар, донъяуи мәсьәләләр, ир-ҡатын мөнәсәбәттәре беҙ уҡыған быуын әҙәбиәтендә лә бар ине. Тик уларҙа барыһы ла тотанаҡлы сиктәрҙә һәм матур итеп бирелә ине. Мәҫәлән, "Кәмһетелгәндәр"ҙә Хаммат менән Сәлимәнең мөнәсәбәте, "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ"та Аҡйондоҙ менән Мәрәһимдең аралары шул уҡ тыйылған "емеш" тә бит, тик уларҙы уҡып ытырғанмайһың, ә, киреһенсә, геройҙар өсөн борсола башлайһың. Тимәк, бында яҙыусының оҫталығы һәм үҙенең донъяға ҡарашы, тағы ла өҫтәп әҙәби тәнҡит булыуы уңышҡа килтерә. Ә әлеге һәм тағы ла күп кенә шундай әҫәрҙәрҙә автор ҙа таҡыто̆ко телле һәм һәләтлеме, етмәһә, уларын тикшергән кешеләре лә шул самамы инде, белмәҫһең...

Мин гәзит-журналдарҙы ла уҡыйым да, әйтер һүҙем тыуһа, шундуҡ шылтыратып әйтәм йә яҙып ебәрәм. Уларҙа ла, әлеге йыйынтыҡтағы кеүек, етлекмәгән генә түгел, беҙҙең әҙәпкә һыймаған сюжетлы хикәйәләр, мәҡәләләр булып тора. Ярай, беҙ өлкән быуын, уларҙы уҡып, донъяға фекеребеҙ ҙә, ҡылыҡ-ғәҙәттәребеҙ ҙә кирегә үҙгәреп китмәйәсәк. Әммә ул әҫәрҙәр беҙҙең йәштәребеҙҙең һәм балаларыбыҙҙың да күҙенә эләгеүе бар бит. Ә йәш саҡта, үҙегеҙ беләһегеҙ, күп өлгөнө шул әҙәби әҫәрҙәрҙән уҡып ала инек. Был фекергә гәзит-журнал мөхәррирҙәре лә яуаплы ҡараһын ине, тигән тәҡдимем бар.

Һүҙемдең ҡыҫҡаһы шул, китап яҙған, әҫәр ижад иткән яҙыусылар һәм уларҙы баҫып сығарыусылар иң беренсе сиратта уҡыусы тураһында уйлаһын ине. Шуның өсөн әҫәрҙәр бик ентекле тикшерелһен, китап булып сыҡҡас та анализланһын. Яратып уҡыйҙармы был китапты, әллә кәштәләрҙә исем өсөн торамы - шул хаҡта ла һүҙ булһын. Уҡыусы наҙан түгел, зауыҡһыҙ ҙа, белемһеҙ ҙә түгел. Шул хаҡта онотмағыҙ.

**Нәҡип ӘЙҮПОВ.**
**Учалы районы.**

✓ *Иртәнге аш урынына кедр тубырсығы яҡшы. Ҡырҡбыуын да ҡышҡы ризыҡ, уны сәйнәргә мөмкин. Ҡышын уның быуындарында һут боҙ булып туңа. Уларҙа глюкоза һәм кремний күп. Тиҫтәне сәйнәһәң, төшкө аш та кәрәкмәй".*



ШАҢДАУ



**Яҙмамды бер тарихтан башлайым әле. Ике ауыл күрше ултырған, ти. Береһендә халыҡ бер-береһенең хатаһын күреп, әйтеп, төҙәттерәп йәшәр булған. Һәр кемдең бер-береһендә эше булған. Икенсе ауылдағы халыҡ "Миңә теймәһәләр - булды", тип йәшәгән, берәү берәүҙе күрмәгән, ҡыҫылмаған, иғтибар итмәгән. Йылдар үтә торған, ауылдарҙың береһе тамырынан ҡороп, береһе генә тороп ҡалған, ти. Ниндәй ауыл ҡороған тип уйлайһығыҙ? Эйе, бер-береһе менән ҡыҙыҡһынмаған халыҡ йәшәгән ауыл. Сөнки улар бер-береһенең хаталарын күреп, төҙәттереп, бергәләп дөрөҫ йүнәлеште эҙләргә теләмәгән...**



# ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ БУЛМАҺА...

Мин ауылда инде ун бер йыл староста булып торам һәм ауыл урамында берәй иҫеректе күрһәм: "Ҡустым, ни эшләп эсеп йөрөйһөң улай?" - тип өндәшәм. Ул кеше был хәлдең йәмһеҙ һәм ярамаған эш икәнен белергә, һис юғы, ауылдаштарының ҡарашын тойорға тейеш тип иҫәпләйем. Ҡатынын ҡыйырһытҡан берәүгә бер мәл: "Ниңә ҡатыныңа һуғаһың улай?"- тием. "Аңламай мине", тип яуаплай был. Мин уға әйтәм: "Бына, мәҫәлән, һыйырға күпме һуҡ, ул һине аңламаясаҡ, әгәр һуҡҡандан ғына ул аңлы булып китә алһа, күптән һыйырҙан аҡыллыһы булмаç ине. Ҡатын бит мал түгел, уның менән ултырып һөйләш, килеш", - тием.

Ошо һөйләгәндәремде әҙәби әҫәрҙәргә лә алып килеп ялғамаҡсымын. Мин, әлбиттә, яҙыусы ла, белемсе лә түгел, ҡырҡ йыл водитель булып эшләгән кеше генә. Әммә мин китаптар һәм гәзит-журналдар уҡырға яратыусы. Миләүшә Ҡаһарманованың "Тәнҡит төшөнсәһенә... "дошман" тигән мәғәнә һалынамы" тигән мәҡәләһен уҡып, бик риза булып ҡалдым. Егеттәр әйтә алмағанды әйткән. Ысынлап та, бөгөн хата төҙәтергә теләүселәр бик аҙ. Тәнҡитте күтәрә белгәндәр, ҡабул иткәндәр ҙә аҙ. Ә бит хата төҙәтә белгәндәр, үрҙә һөйләнгән ауыл кеүек, үҫешәсәк кенә.

**Хәниф МИНИЯРОВ.**
**Миәкә районы.**

ТЕРЕКЛЕК МӘКТӘБЕ



**Хабаровск ҡалаһы тикшеренеүсеһе, ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор, сәйәхәтсе, Традицион булмаған һәм һирәк үҫемлектәр академияһы академигы Анатолий Григорьевич Измоденов 37 йәшендә фән кандидаты диссертацияһын яҡлағас, 30 йыл дауамында ваҡыты-ваҡыты менән урманда йәшәй һәм 67 йәшендә докторлыҡ диссертацияһын яҡлай, силедия (сильва - урман, едио - ризыҡ) фәненә нигеҙ һала. Үҙенең тикшеренеүҙәренән сығып, кешегә тулы бәхет өсөн урман ғына кәрәк, тигән һығымта яһай: ул ашата ла, эсерә лә, йылыта ла, дауалай ҙа.**

# ТӘБИҒӘТТӘ БАРЫҺЫ ЛА БАР!

Былай тип раҫларға уның тулы хоҡуғы бар, сөнки ул тәжрибәне үҙендә яһай: тайгаға бер тәғәмһеҙ, кеҫәһенә шырпы, блокнот һәм ҡәләм һалып сығып китә. Яңы фәндең асылы нимәлә? Ғалим әйтеүенсә, кешелектең аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлегендә. Яңы фәндең төп бурысы - урман продукттарын иҫәпкә алыу, баһалау, ҡанундарҙы асыҡлау һәм тәбиғәткә хилафлыҡ килтермәйенсә, уларҙы аҡыл менән ҡулланыу. Измоденов барлыҡ дарыу үҫемлектәрен салюберустарға берләштергән - ул 1100 атама ағас, ҡыуаҡ, үлән исемлеге. Уларҙың яртыһы, дөрөҫөрәге 682-һен үҙаллы, уларҙан алырға мөмкин булған продукттарҙы иҫәпләп, өйрәнгән. Ул ике йыл бер ниндәй ҙә цивилизация ризығы ашамаған, етерлек үҫемлек базаһы булғанда тәүтормош кешеһе ниндәй тойғо менән йәшәгәнлеген аңларға тырышҡан. "Организм нимәләр етмәгәнен тойманы, - ти ғалим. - Әлбиттә, бөгөн кешегә урманда уңайлы түгел: уға ит ашарға, кәнфит һурырға кәрәк - был психологик фактор. Әммә тәбиғәттә кеше организмына кәрәкле бөтөн нәмә бар".

Ғалим хатта 30-ға яҡын "ҡышҡы ризыҡты" ла аса. Мәҫәлән, ҡышын сәй урынына чаганы бешерергә мөмкин - унда глюкоза күп. Йәки ал һабаҡлы аҡ свидинаны (шулай уҡ мүшмел - кизил) сәйнәргә була.

"Элеутерококк менән аралия бик файҙалы. Ҡышын уларҙы таштарҙан һыҙырып алырға мөмкин, тамырҙарын ҡайнатырға була - көсләө стимулятор, - ти Анатолий Григорьевич. - Тағы ла иртәнге аш урынына кедр тубырсығы яҡшы. Ҡырҡбыуын да ҡышҡы ризыҡ, уны сәйнәргә мөмкин. Ҡышын уның быуындарында һут боҙ булып туңа. Уларҙа глюкоза һәм кремний күп. Тиҫтәне сәйнәһәң, төшкө аш та кәрәкмәй".

Измоденов хатта "Минең үләнем" тигән үҙенең һауыҡтырыу ысулын эшләгән һәм һәр сирҙе дауалай торған үлән булыуына инана. Уның фекеренсә, йәмғиәттең һәм кешеләрҙең үҫешенә ике көс йоғонто яһай: социаль мөхит һәм тәбиғәт. "Беҙ тәбиғәт тураһында бөтөнләй онотҡанбыҙ. Быға тиклем тәбиғәттән барлыҡҡа килгәнебеҙҙе аңламайынса, ниндәй ахмаҡ булғанбыҙ", - ти Измоденовҡа ВАСХНИЛ академигы Григорий Тихонович Казьмин вафаты алдынан. Ул 1967 йылда уҡ Анатолий Григорьевичтың кандидатлыҡ диссертацияһы оппоненты була, әммә ғүмеренең ахырында ғына үҙенең хаҡлы булмауын, ә "силедия - ысын фән" икәнлеген таныйӗ!

Анатолий Измоденов ике китап яҙа һәм уларҙың барлыҡ мәктәптәрҙә, вуздарҙа уҡытылыуын теләй. "Үҫемлектәр арҡаһында ғына беҙ йәшәйбеҙ, - ти ул. - Сөнки тәүҙә үҫемлектәр барлыҡҡа килгән, һуңынан ғына - кеше. Беҙҙең тәбиғәтте цивилизация ярҙамында ҡыйратыуыбыҙ һөҙөмтәһендә күпме ресурстарыбыҙ ҡалғанлығын белергә кәрәк. Ә тулы белем юҡ".

**ИНТЕРНЕТТАН.**

*ҠЫҘ-ҠАТЫН ҠОЛАҒЫНА*

# БИҘӘҮЕСТӘР НИҢӘ КӘРӘК?

**Ҡатын-ҡыҙҙың төп бурыстарының береһе - көн дә матур биҙәүестәр тағып йөрөү. Уның биҙәүестәре мотлаҡ ялтырап, үҙенә иғтибар йәлеп итеп торорға тейеш.**

Кулон, муйынсаҡ, колье, сылбыр иң мөһим энергетика зоналары булған муйын, йөрәк, күкрәк ауыҙын һаҡлай. Тәндең был өлөшөн биҙәү ҡатын-ҡыҙға ижади һәләттәрен, үҙ-үҙенә ышаныусын үҫтерергә һәм булмышын аңларға ярҙам итә. Алҡа өҫкө энергетик үҙәктәрҙе һаҡлай. Алҡа ни тиклем матур һәм ҡыҙыҡлы булһа, шул тиклем яҡшыраҡ. Оҙон алҡаларҙы йышыраҡ тағырға тырышығыҙ, сөнки улар ҡатын-ҡыҙ энергетикаһын көсәйтә.

Йөҙөктәр ҙә тәндең эске көсөнә йоғонто яһай. Һәр ҡатын-ҡыҙҙың һаҡлау көсөнә эйә бетеү йөҙөгө булырға тейеш. Аҫыл таштарҙы эске һиҙемләүгә таянып һайлағыҙ. Магазинда һәр биҙәүесте ҡулға алып, аҫыл таштарын иғтибарлап ҡарап сығығыҙ. Күңелгә яҡҡан йөҙөктө бармаҡтан сисергә лә теләмәйһең, тап шул һеҙҙең бетеү була ла инде.

Тәрлә таҫмалар, яулыҡтар, сәс тирәстәре, таждар, ҡыҫтырғыстар ҡатын-ҡыҙҙың аңын һәм инсафлығын һаҡлай. Гүзәл заттың көсө толомонда булыуын хәтерҙә тотоғоҙ.

Беләҙектәр эске көстө кешеләргә бирер, таратып бөтөүҙән һаҡлай. Ҡатын-ҡыҙ тәбиғәте менән яҡындарына үҙенең йылыһын, һөйөүен биреүгә, бөтәһен дә хәстәрләргә ярата. Йыш ҡына арып-талғансы үҙен тотошлай ғаиләһенә бағышлай. Эштән арып ҡайтһа ла балаларға дәрес әҙерләшергә, ирҙең тамағына яраштырырға, өҫтәүенә, шылтыратып, тормошона зарланған әхирәтенде тыңларға ла кәрәк. Ә үҙеңә ҡайҙан ваҡыт табырға? Көндәлек мәшәҡәттәргә күмелеп, һәр нәмәне хәстәрләйем тип, үҙең тураһында ла оноторға ярамай. Ҡатын-ҡыҙҙың энергияһы уның ҡушҡары һәм ҡулы аша сыға, шуға борондан беләҙектәр умыртҡа һөйәге аша үткән энергетик каналды һаҡлап тора тип иҫәпләнгән һәм улар көн дә таға торған биҙәүес булған.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Оптимизм өҫтәй

Оҙайлы йүгереүҙән һуң (30 минут һәм унан да оҙағыраҡ) эйфория тойғоһо тыуа. Был "бәхет гормоны" - эндорфиндар эшләп сығарыусы гипофиздың көсөргәнешле эшләүе һөҙөмтәһе. Шулай итеп, йүгереү - психик потенциалды арттырыу өсөн депрессияға йоғонто яһаған мөғжизәле сара.

## Ҡан баҫымын нормалләштерә

Бер ритмда оҙайлы йүгергәндә пульс минутына 120-130 тибеүгә барып етә, периферияләғы ҡан тамырҙары киңәйә, уларҙың ҡаршылығы кәмей, был иһә ҡан баҫымының түбәнәйеүенә килтерә. Ә түбән ҡан баҫымы, киреһенсә, күтәрелә. Шуға күрә йүгереү - артериаль ҡан баҫымын көйләүҙең идеаль сараһы.

## Эске органдарҙағы хәрәкәтһеҙлек менән көрәшә

Йүгереү эске ағзаларға ике яҡлы һауыҡтырыу йоғонтоһо яһай: йомшаҡ һелкенеү уларҙың эшмәкәрлеген стимуллай, ә ҡан эс ҡыуышлығында актив әйләнештә була һәм ағзаларҙы кислород, туҡлыҡлы матдәләр менән тәьмин итә. Эс ҡатыуы үтә, үт ҡыуығындағы таштар бөтә, бауыр туҡымаһы тергеҙелә.

## Кимерсәк туҡымаһының дегенерацияһына ҡаршы тора

Оло кешеләрҙең умыртҡа араһындағы дискыларының үҙенең ҡан тамырҙары юҡ. Шуға уларҙы "ярым ас" халәттән умыртҡа һөйәге даими рәүештә вертикаль көсөргәнеш алған йүгереү йәки оҙайлы йөрөү ҡотҡара, сөнки умыртҡа араһындағы дискылар күп тапҡырҙар тирә-яҡтағы туҡымаларҙан туҡлыҡлы элементтарҙы, һыуҙы һәм кислородты һеңдереп, ҡыҫыла һәм ҡуба. Йүгереү һөҙөмтәһендә матдәләр алмашыныуы әүҙемләшә һәм умыртҡа һөйәге тергеҙелә.

## Иммунитет нығына

Йүгергән ваҡытта ҡан һүлендә иммуноглобулиндар артыуы күҙәтелә, эритроциттар, гемоглобин һәм организмдың һаҡланыу үҙенсәлеген арттырған лимфоциттар күләме арта.

## Нисек дөрөҫ йүгерергә?

♦ Яңы башлаусыларҙың үҙенсәлеге - асылып бөтмәү, тартыныу. Йүгереү барышында умыртҡа бағанаһы ғына көсөргәнештә булыуын күҙәтергә кәрәк бит. Ә ҡулдар, аяҡтар, ҡулбаштар, янбаштар, хатта йөҙ мускулдары көсөргәнештән арынған булырға тейеш.

♦ Йүгереү ваҡытында үҙеңә "Мин йәш һәм сәләмәт", "Минең көсөм ташып тора", "Йүгереү миңә шатлыҡ килтерә" тигән көйләнеш ҡуйырға мөмкин.

♦ Тиҙ йүгергәндән һуң 1 - 1,5 километр араны йәйәп ҡына йүгереп үтергә кәрәк.

♦ Йүгерергә урын юҡ икән, торған урында йүгерегеҙ.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 3 ИЮНЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.20 "Сегодня 3 июня. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.15, 17.00, 18.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 3.40 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 2.45, 3.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Свадьбы и разводы". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 "Познер". [16+]
1.00 Т/с "Петля Нестерова". [12+]
4.20 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ангелина". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Штрафбат". [18+]
3.00 Т/с "В круге первом". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Наука 102. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**19.00, 22.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 "Теге өсәү". [12+]**
**23.15 Колесо времени. [12+]**
**0.15 Т/с "Принц Сибири". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Ночной гость". [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 4 ИЮНЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.20, 3.25 "Модный приговор". [6+]
10.20 "Жить здорово!" [16+]
11.25 "Ураза-Байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети.
12.15, 17.00, 18.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 2.35, 3.05 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 1.50 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Свадьбы и разводы". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 Т/с "Петля Нестерова". [12+]
4.10 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 "О самом главном". [12+]
10.05 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Праздник Ураза-Байрам. Прямая трансляция из Московской Соборной мечети.
12.40, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ангелина". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Штрафбат". [18+]
3.00 Т/с "В круге первом". [12+]

### БСТ

**7.00 "С праздником Ураза байрам!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 Учим башкирский язык. [0+]**
**8.30 "Йома". [0+]**
**9.00 "Ураҙа Байрам". Прямая трансляция из Уфимской Соборной мечети "Ляля-Тюльпан".**
**10.00 "Свет Рамадана". Концерт группы "Ятаган". [12+]**
**11.00 Х/ф "Кукушкин чай". [0+]**
**11.30 Добрые дела. [0+]**
**11.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**12.30 Д/ф "Чужой беды не бывает". [12+]**
**13.30 Спектакль "Долгое-долгое детство". [12+]**
**16.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**16.30 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**17.30 "Ураҙа Байрам". Трансляция из Уфимской Соборной мечети "Ляля-Тюльпан". [0+]**
**19.00, 20.00 "Музыка ветра". Концерт группы "Ҡурайсы". [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**21.15 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "Честно говоря". [12+]**
**23.15 Күстәнәс. [12+]**
**23.45 Замандаш. [6+]**
**0.00 Т/с "Принц Сибири". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Мулла". [12+]**
**5.00 Бай баҡса. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 5 ИЮНЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.20 "Сегодня 5 июня. День начинается". [6+]
9.55, 3.25 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.15, 17.00, 18.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 2.35, 3.05 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 1.50 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Свадьбы и разводы". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 Т/с "Петля Нестерова". [12+]
4.10 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ангелина". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Штрафбат". [18+]
3.00 Т/с "В круге первом". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 23.15 Бала-саға. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00, 5.00 "Бай". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**22.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**0.00 Т/с "Принц Сибири". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Не женщина - дракон". [12+]**
**4.45 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 6 ИЮНЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.20 "Сегодня 6 июня. День начинается". [6+]
9.55, 3.25 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.15, 17.00, 18.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 2.35, 3.05 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 1.50 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Свадьбы и разводы". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 Т/с "Петля Нестерова". [12+]
4.10 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ангелина". [12+]
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Штрафбат". [18+]
3.00 Т/с "В круге первом". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 По сути дела... [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**22.30 "Тайм-аут". [12+]**
**23.15 "Песня года". [12+]**
**23.45 Современник. [12+]**
**0.00 Х/ф "Охота жить". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Шаукакай". [12+]**
**4.45 Весело живем. [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 7 ИЮНЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.20 "Сегодня 7 июня. День начинается". [6+]
9.55, 2.45 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.15, 17.00, 18.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 4.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 3.30 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.50 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Три аккорда". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.25 Х/ф Премьера. "Гиппопотам". [18+]
1.55 На самом деле. [16+]
5.00 "Контрольная закупка". [6+]
5.20 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ангелина". [12+]
0.30 Х/ф "Я всё преодолею". [12+]
4.00 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30, 21.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 5.00 Автограф. [12+]**
**14.00 Весело живем. [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**17.00 Д/ф "Моя планета Башкортостан". [12+]**
**18.00 У дачи. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Каникулы мечты". [12+]**
**2.15 Спектакль "Заноза". [12+]**
**4.00 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.30 Д/ф "Равная величайшим битвам". [12+]**

## 8 ИЮНЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Сказ про то, как царь Петр арапа женил". [0+]
8.10 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
8.55 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.10 Д/ф Премьера. К 90-летию певицы. "Людмила Зыкина. "Опустела без тебя Земля..." [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "Идеальный ремонт". [6+]
13.20 Премьера. "Живая жизнь". [12+]
15.10 Х/ф "Берегись автомобиля". Кино в цвете. [0+]
17.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.30 "Сегодня вечером". [16+]
20.30 Время.
20.50 Футбол. Отборочный матч чемпионата Европы-2020. Сборная России - сборная Сан-Марино. Прямой эфир.
23.00 Х/ф Премьера. "Люди Икс: Апокалипсис". [16+]
1.30 Х/ф "Коммивояжер". [16+]
3.30 "Мужское / Женское". [16+]
4.15 "Давай поженимся!" [16+]
5.00 "Модный приговор". [6+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.15 "По секрету всему свету".
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Х/ф "Праздник разбитых сердец". [12+]
13.40 Х/ф "Провинциальная Мадонна". [12+]
17.40 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "На рассвете". [12+]
1.05 Х/ф "Проверка на любовь". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 М/ф "Чичиленд". [0+]**
**8.45 Дорогу осилит идущий. [12+]**
**9.30 "Форум семейного счастья". Репортаж из г. Кумертау. [6+]**
**9.45 "Физра". [6+]**
**10.00 "Перекличка". [6+]**
**10.15 "Книга сказок". [0+]**
**10.30 МузКәрәҙ. [0+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [0+]**
**11.00 Күстәнәс. [6+]**
**11.30 Хазина о Хазине. [0+]**
**12.00 Спектакль "Земляки". [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Легенды Урала". [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байык-2019". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**22.30, 1.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**0.00, 5.00 Х/ф "На краю стою". [16+]**
**2.15 Спектакль "Наследство". [12+]**
**4.00 "Песня года". [12+]**
**4.30 Д/ф "Великий Русский Северный путь". [12+]**

## 9 ИЮНЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Выстрел". [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь других". [12+]
11.10, 12.15 "Видели видео?" [6+]
12.00 Новости с субтитрами.
13.00 Д/ф "Леонид Филатов. "Надеюсь, я вам не наскучил..." [12+]
14.00 Х/ф "Экипаж". [12+]
16.50 Премьера. "Ледниковый период. Дети". Новый сезон. Финал. [0+]
19.30 "Лучше всех!" [0+]
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. [16+]
23.40 Т/с Премьера. "Ярмарка тщеславия". [16+]
1.35 "Модный приговор". [6+]
2.20 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 "Давай поженимся!" [16+]
3.45 "Контрольная закупка". [6+]
4.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

4.20 Т/с "Сваты". [12+]
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Смеяться разрешается.
13.25 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
15.00 "Выход в люди". [12+]
16.00 Х/ф "По щучьему велению". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.30 Д/ф "Георгий Жжёнов. Русский крест". [12+]
3.10 Т/с "Гражданин начальник". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 "Песня года". [12+]**
**10.00 Бирешмә. Профи. [6+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [0+]**
**12.00 Бай баҡса. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [6+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Купола башкирских юрт на земле сибирской". Концерт. [12+]**
**18.00 "Жизнь дается однажды". [12+]**
**18.45 Лидеры региона. [12+]**
**19.15 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 "Теге өсәү". [12+]**
**21.00 Республика Live. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 "Байык-2019". [12+]**
**0.15, 3.45 Х/ф "Идеальные незнакомцы". [16+]**
**2.00 Спектакль "Скупой". [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Июнь (Рамаҙан-Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (29) дүшәмбе | 3:17 | 4:47 | 13:30 | 20:12 | 21:42 | 23:12 |
| 4 (1) шишәмбе | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 20:13 | 21:43 | 23:13 |
| 5 (19) шаршамбы | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 20:14 | 21:44 | 23:14 |
| 6 (20) кесе йома | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 20:15 | 21:45 | 23:15 |
| 7 (21) йома | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 20:16 | 21:46 | 23:16 |
| 8 (22) шәмбе | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:17 | 21:47 | 23:17 |
| 9 (23) йәкшәмбе | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:18 | 21:48 | 23:18 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# І БӨТӨН ДОНЪЯ БАШҠОРТТАРЫ ҠОРОЛТАЙЫ (1995 й.)




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**19-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Безак. Башҡорт. Ҡотоп. Айташ. Мишәр. Америка. Вьетнам. Ләхет. Бобыль. Аҫаба. Ҡаҡ. Әрәмә. Ырыҫ. Азат. Мәсет. Абрек. Һауа. Иттифаҡ. Рәсем. Трамвай. Раштыуа.

**Вертикаль буйынса:** Ватандаш. Александр. Нагасаки. Бура. Типтәр. Шамбы. Башаҡ. Ҡәтғи. Формат. Тартынҡы. Аҡана. Китап. Мал. Әҫмар. Әсир. Еҙем. Рәт. Әйтем.



*ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!*

# ИКМӘКТЕ ҮҘЕҢ БЕШЕР

**Сүпрә.** Кипкән ҡомалаҡтан әҙерләгәндә, бер өлөш ҡомалаҡҡа ике өлөш һыу ҡойоп, уны яртыһына тиклем кәмегәнсе ҡайнатырға кәрәк. Ә йәш ҡомалаҡтан әҙерләгәндә тутыҡмай торған тимерҙән йәки эмаль кастрүлгә ҡомалаҡты тығыҙ итеп тултырып, эҫе һыуҙы өҫтө күмелгәнсе ҡойоп, бер сәғәт ҡайнатыла. Эҫеләй һөҙөп алғас, ярты балғалаҡ тоҙ, бер балғалаҡ шәкәр ҡомо ҡушып, бер стакандай он һалып болғатып, йылы урынға бер тәүлеккә ҡуйыла. Сүпрә әҙер булғас, банкаға һалып, өҫтөн ябып, һалҡын урында һаҡларға.

Файҙалы кәңәштәр: сүпрә тиҙ арала әҙер булһын тиһәң, алты ҡалаҡ ҡур (әҙер сүпрә) өҫтәргә кәрәк. Былай эшләгәндә, кис ҡуйһаң, сүпрә иртәнсәккә әҙер була.

Картуф бешергән һыуҙы йылы көйө ҡушып ебәргәндә, сүпрә оҙаҡ иҫкермәй, хатта ике ай буйына һаҡлана.

Ҡомалаҡты һабағы менән ҡайнаталар, ләкин япрағынан таҙартырға кәрәк, сөнки ул сүпрәне ныҡ боҙа.

**Икмәк һалыу.** Сүпрәне эмаль табаҡҡа һалып, он, йылымыс һыу өҫтәп, йылы урынға ҡуйырға. Ҡамыр әсегәс, тоҙ һалып, тағы ла он өҫтәп баҫып, йәнә йылы урынға ҡуйырға. Ҡамыр ҡабарып сыҡҡас, тағы ла бер ҡат баҫып, май һөртөлгән табаларға бүлеп һалып, ҡабарып сыҡҡас, бешерергә ҡуйырға. Ауыл мейесендә бер сәғәт тә 50 минут самаһы ваҡыт үтеүгә икмәк бешеп сыға. Икмәктең ҙурлығына һәм мейестең ҡыҙыулығына ҡарап, һәр хужабикә үҙенсә бешереп ала инде. Духовкала 200 градуста бешерәләр. Бешкән икмәктәрҙе алғас та, өҫтәрен һыу менән һөртөп, таҙа ашъяулыҡҡа теҙеп, баҫырып ҡаплап һыуыталар. Икмәк иҫкермәһен өсөн уны һалған һауытҡа аҙ ғына итеп тоҙ ҡуйырға кәрәк.

*ФИНАНС ӘЛИФБАҺЫ*



# ҺАҠ БУЛ - ПИРАМИДА!

**Мавродиҙың "МММ"-һы ҡалдырған тәрән эҙ барыһы өсөн дә ул һаҙлыҡҡа батмаҫ өсөн тәжрибә булырға тейеш һымаҡ. Ләкин ысынбарлыҡта еңел килгән ҙур аҡсаға тамшанып, төпһөҙ кәмәгә ултырып ҡалыусылар һаны һаман да кәмемәй. Көн дә тиерлек барлыҡҡа килеп торған финанс пирамидаларҙың төрлөлөгөнә һәм уны булдырыусыларҙың фантазияһына иҫең китерлек. Улар ысын мәғәнәһендә һауанан аҡса эшләй белеүселәр. Мәҫәлән, уҙған йылдың көҙөндә генә Кэшбери компанияһы күптәрҙе аҡсаһыҙ торғоҙоп ҡалдырҙы. Ә унең кеүек эреле-ваҡлы әллә күпме компания бөгөнгө көндә лә эшмәкәрлеген дауам итә һәм үҙ ҡапҡанына потенциаль ҡорбандарын ҡармауын дауам итә. Нисек ундай ойошмалар ҡулына эләкмәҫкә? Таныштарығыҙ теге йәки был компанияға саҡырғанда нимәгә иғтибар итергә?**

**Агрессив реклама.** Бындай пирамиданы төҙөүселәр, ғәҙәттә, үҙҙәре хаҡында күп "һөйләргә" ярата. Улар рекламаға аҡса йәлләмәй, үҙҙәре хаҡында мәғлүмәт биреү өсөн интернетта мөмкин булған бөтә ресурстарҙы файҙалана, билдәле блогерҙарҙы йәлеп итә, төрлө конференциялар үткәрә. Быларҙың барыһы ла вкладсыларға матур һәм бай тормош хаҡында бәйән итә.

**Ҙур вәғәҙәләр.** Ҡапыл һәм ҙур күләмдә килем алыу үтә лә еңел икәнен иҫбатлап, ғәйәт күп вәғәҙәләр бирәләрме? Бында уйланырға урын бар. Һандарҙың күләме ни тиклем юғарыраҡ, хәүеф тә шул ҡәҙәр күберәк. Әгәр ҙә проценттар һаны иҡтисади баҙарҙағы күрһәткестәрҙән үтә лә артыҡ икән, бөтә аҡсанан да ҡолаҡ ҡағыу мөмкинлеге 100 процентҡа тиңләшә.

**Документтар юҡлығы.** Әгәр компания үҙенең эшмәкәрлеге тураһында һөйләй, ләкин уны иҫбатлаусы рәсми документтар күрһәтмәй икән, алдығыҙҙа мутлашыусылар. Үҙҙәрен биржала уйнаусылар итеп күрһәтеүселәрҙең һатыулашыуҙарҙың (торги) отчеты һәм трейдерҙар сертификаты мотлаҡ булырға тейеш.

**Үҙәк банк лицензияһы юҡ.** Рәсәй Үҙәк банкы сайтындағы финанс баҙар ҡатнашыусылары белешмәһендә ошо өлкәлә рәсми эшмәкәрлек алып барыусы компаниялар тураһында мәғлүмәт була. Уның өсөн ойошманың ИНН йәки ОГРН белергә кәрәк. Әгәр ҙә ошо мәғлүмәтте биреүҙән баш тарталар икән, тимәк, ул компания "таҙа" түгел.

Финанс пирамидала вклад яһаусы ошо системаға яңы килеүсе индергән аҡсанан килем ала. Тәүге мәлдә, ысынлап та, ярайһы ҙур ғына килем алырға мөмкин, ләкин иртәме-һуңмы, был системаға килеүселәр һәм, тәбиғи, яңы аҡса килтереүселәр кәмей барып, бөтөнләй туҡтай. Һәм финанс пирамида "ҡолай". Рәсәйҙә бындай пирамида төҙөүселәргә иң ҡаты яза - 6 йылға тиклем иректән мәхрүм итеү. Ләкин ғүмеренең ниндәйҙер өлөшөн ситлектә үткәреү мөмкинлеге лә ҡурҡытмай мутлашыусыларҙы. Уларҙың күбеһе үҙҙәренең эшмәкәрлеген "инвестицион компания" исеме аҫтында йәшереп башҡара. Хәләл көсөгөҙ менән эшләп алған аҡсағыҙҙы кемгәлер ышанып тапшырыр алдынан ете ҡат үлсәргә, мәғлүмәт тупларға, уның эшмәкәрлеген иғтибарлап тикшерергә кәрәк. Яңғырауыҡлы реклама һәм ҙур һандарға ҡыҙығып, бөтөнләй аҡсаһыҙ тороп ҡалыуҙан һаҡ булығыҙ.

*АФАРИН!*

# МИЛЛИ ТЕАТР -
## милләттең рухи ҡиблаһы

**Өфөлә "Туғанлыҡ" төрки телле театрҙарҙың VII халыҡ-ара фестивале тамамланды. "Быйыл - Башҡортостандың, Башҡорт дәүләт академия драма театрының 100 йыллығын, Рәсәйҙә иғлан ителгән Театр йылын үҙебеҙ генә түгел, ҡунаҡтар менән байрам итәбеҙ, халҡыбыҙҙың йолаһы шулай", - тине мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова сараны асыу тантанаһында. Ысынлап та, 8 көнгә һуҙылған "Туғанлыҡ" фестивале тамашасылар өсөн дә, Рәсәй төбәктәренән һәм сит илдәрҙән килгән 13 театр өсөн дә аралашыу, тәжрибә уртаҡлашыу майҙанына әүерелде. Фестивалдең Эксперттар советы рәйесе, Рәсәйҙең халыҡ артисы Борис Морозов та "милләт-ара дуҫлыҡ һәм татыулыҡты һаҡлауға йүнәлтелгән сәнғәт байрамы" тип атаны уны.**







"Туғанлыҡ"ты этнографик фестиваль итеп кенә ҡабул итеү бар. Унда милли кейемдәр, риүәйәттәр, йолалар ғына өҫтөнлөк алырға тейеш тип аңларға кәрәкмәй. Белинский әйтмешләй, милләтте сарафан күрһәтмәй. Шуға ла был фестивалдең девизы - үҙ йолаларыбыҙға, мәҙәниәтебеҙгә таянып, үҙ-үҙебеҙ булып ҡалабыҙ, әммә хәҙерге заман театры донъяһына ла асыҡбыҙ", - фестиваль директоры Айһылыу Сәғитова алдан уҡ был сараға ошондай йүнәлеш биргәйне. Быйылғы ҡатнашыусылар араһында рус һәм сит ил классикаһына мөрәжәғәт итеүселәр байтаҡ булды - Ҡырым татарҙары дәүләт академия музыкаль-драма театры Гоголдең "Өйләнеү", Аҡмола өлкә ҡаҙаҡ музыка-драма театры Шекспирҙың "Ромео һәм Джульетта", Хакас милли драма театры Хемингуэйҙың "Ҡарт һәм диңгеҙ", Ҡырғыҙстандың Дәүләт милли рус драма театры менән республиканың театрҙар берлеге Лермонтов әҫәрҙәре буйынса "Иблис" спектаклдәрен алып килгәйне.

Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы Әхтәм Әхәт улы Абушахманов билдәләүенсә, фестиваль программаһының классикаға бай булыуы һәйбәт күренеш, классик әҫәр, һис шикһеҙ, актерҙарҙы үҫтерә. Һәм уның төп тәғәйенләнеше лә актерҙы тәрбиәләүгә ҡайтып ҡала, тамашасы, ғәҙәттә, бындай спектаклдәргә ҡат-ҡат йөрөмәй, айырыуса - йәштәр. Тик классик әҫәрҙе бөгөнгө заман ритмына һалырға тырышып, уны заманлаштырыуҙың да хәүефле яҡтары булыуын күрһәтте фестиваль. Үҙҙәре хаҡында "замандаштарыбыҙға театр донъяһында ҡулланылған яңы ысул һәм алымдарҙы тәүгеләрҙән булып еткереү бурысын алғанбыҙ", тиһәләр ҙә, ҡаҙаҡ театрының "Ромео һәм Джульетта"һы бөтөнләй башҡаса яңғыраны һәм заман "мөмкинлектәре" артында мәңгелек рухи ҡиммәттәр бөтөнләй төҫһеҙләнеп ҡалды. Ә бына ҡырым татарҙарының билдәле комедияға яңыса төҫ биреп уйнауы тамашасы күңеленә хуш килде, бында халыҡ юморы ла, ирония ла, йырҙар ҙа, бейеүҙәр ҙә урынлы ҡулланыла. Эйе, милли театр эксперименттарҙан һәм яңылыҡтарҙан ҡурҡмаҫҡа тейеш, тик бының да үҙенең сиктәре булыуы шарт.

Төп дәүләт театрҙары менән бер рәттән, Әзербайжандың dOM бойондороҡһоҙ театры, Төркиәнең Хәсән Аджарҙың Bostanci ART продюсер компанияһы ла ҡатнашты. Уларҙың тәүгеһе беҙ өйрәнгән театр тураһындағы ҡараштарҙы бөтөнләй юҡҡа сығара. "Лимбо" иммерсив спектаклендә ҡатнашыусы тамашасылар быны үҙҙәре яҡшы тойҙо.

Тик нимә генә булмаһын, театрҙа төп урында Кеше һәм уның хистәрен, һыҙланыуҙарын, эске асылын асырға тырышыу тора. Фестиваль барышында юҡҡа ғына "рус психологик театры мәктәбе" тигән термин йыш яңғыраманы. Режиссер Айҙар Заббаровтың "Тормошмо был?.." (Камал исемендәге Татар дәүләт академия театры) спектакле фестивалдең "Иң яҡшы режиссура эше" һәм Хәлим ролен башҡарыусы актер Искәндәр Хәйруллин "Иң яҡшы ир-егет роле" номинацияһында еңеүсе булды. Айрат Абушахмановтың "Зөләйха күҙҙәрен аса" (Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры) спектаклендәге Зөләйха роле өсөн актриса Илгизә Ғилманова "СССР-ҙың халыҡ артисы Гөлли Мөбәрәкова исемендәге иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияһында билдәләнде. "Икенсе пландағы иң яҡшы ир-егет роле" Артур Ҡунаҡбаевҡа тапшырылды. Ғөмүмән, "Зөләйха күҙҙәрен аса" спектакле тураһында күп яҡшы һүҙҙәр әйтелде.

Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт драма театрының барлыҡ ауырлыҡтарҙы ла еңеп сығырға ярҙам иткән дуҫлыҡ һәм изгелеккә ышаныу тураһында һөйләгән "Өс таған" спектакле иһә "Туғанлыҡ" фестиваленең "Иң яҡшы спектакле" тип танылды. Фестивалдең президенты Рифҡәт Исрафилов йәш режиссер Антон Федоров менән һоҡланыуын белдереп, милли театрҙа яңы ҡеүәтле эстетика, яңы режиссура барлыҡҡа килә, тине. Ысынлап та, күктән яуған япраҡтар ямғыры, һауалағы болотто иләгән өләсәйҙең орсоғо, сәхнәләге берсә малайҙар, берсә олпат ир-егет ҡарашы булып балҡыған ике күл - былар барыһы ла күңелдә иҫ киткес яҡты һәм нескә хистәр уята. Башҡортостандың халыҡ артисы Ниса Бакирова иһә - "Икенсе пландағы иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле", Антон Федоров менән Лилиә Сөләймәнова "Иң яҡшы сценография" номинацияһында ла билдәләнде. Заман, уның менән бергә йәмғиәт һәм тамашасы ла үҙгәрә тиһәләр ҙә, уларҙың күңелендә изгелеккә, яҡтылыҡҡа ынтылыш һәр ваҡыт йәшәй.

Милли театр - милләттең телен һәм уның мәҙәни йолаларын ғына һаҡлай торған ябай театр түгел. Ул милләттең рухи ҡиблаһы, ул милләтте үҙенең артынан матурлыҡ донъяһына эйәртә, ул уға тормош мәғәнәһен яҡшыраҡ аңларға ярҙам итә. Был фестивалдең беҙҙең өсөн төп һығымтаһы шулдыр - башҡорт милли театры үҙенең ошо төп бурысынан бер ҡасан да ситләшмәне һәм ситләшмәһен ине.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# САРАҺЫҘЛЫҠ...
## сара тыуҙырған

Ағастың тамырына балта сабып, япрағы менән дуҫ булма.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ас кешене ашатҡың килһә, уға балыҡ бир. Ас кеше бер ваҡытта ла асыҡмаһын тиһәң, ҡулына йылым тоттор.

**(Генрих Гейне).**

Кешеләр үҙ аҡылындағы бушлыҡты йыш ҡына асыу менән тултыра.

**(У. Олджер).**

Эш урынынды ваҡытында ҡалдырыу кәрәк. Ижадының һүрәнләнә башлауын тамашасы тоймаҫ элек сәхнәне ҡалдырған балет бейеүсеһе һымаҡ.

**(В. Оствальд).**

Өлгөргән еләкте ҡунаҡҡа ике төрлө биреп була: бысраҡ ҡулдарҙа йә ялтырап торған тәрилкәлә - уларҙың тәме төрлөсә буласаҡ.

**(Леонид Сухоруков).**

Ахмаҡҡа уның ахмаҡ икәнен хатта аҡыллы ла иҫбат итә алмаясаҡ.

**(Л. Гаврилов).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер һунарсы этен эйәртеп Африка джунглиҙарына һунарға сыға. Эте йәш һәм тәжрибәһеҙ була: күбәләктәр ҡыуып йөрөп, джунглиға инеп аҙашыуын һиҙмәй ҙә ҡала. Бына бер ваҡыт ул үҙенә ҙур пантера яҡынлашып килгәнен күреп ҡала. Эт был ҡурҡыныстан нисек ҡотолоу тураһында баш вата башлай. Һәм шунда үҙенән йыраҡ түгел ҙур бер хайуандың һөйәктәре ятыуын күреп ҡала. Тиҙ генә шул һөйәктәр янына барып, уларҙы тәмләп кимерә башлай. Пантера яҡынлағас, ялана-ялана, эт үҙ алдына былай тип һөйләнә: "Их, ҡалай тәмле булды был пантера! Тағын бер ошондай пантера табып ашайһы ине бит әле..." Быны ишетеп ҡалған пантера килгән еренән туҡтап ҡала һәм ҡурҡып кире сигенә лә, артына боролоп, сабып китә.**

**Был хәлде күҙәтеп ултырыусы маймыл пантераны ҡыуып етә һәм уға дөрөҫлөктө аса. Пантераның асыуы ҡабара һәм маймылға: "Әйҙә, ултыр арҡама, хәҙер аҡылға ултыртам мин ул этте", - ти. Арҡаһына маймылды ултыртып алып, пантера эт тороп ҡалған урынға ҡарай саба. Эт маймылдың пантераға үҙе тураһында ошаҡлауын ишетә, уларҙың уға табан сабып килеүҙәрен дә күрә. Ләкин ҡасып китмәй, уларға арты менән боролоп, урынында ултыра бирә. Пантера килеп етеп, ҡысҡырырға ауыҙ асҡанда ғына эт үҙ алдына һөйләнгәндәй итеп, былай ти: "Әй, йүнһеҙ ҙә инде был маймыл! Ярты сәғәт элек үк мин уны бер пантера табып алып килергә ебәрҙем, ә ул һаман юҡ та юҡ..."**

**Тормошта ла шулай: аҙ ғына башынды эшләтһәң, һәр һорауға - яуап, һәр ауырлыҡтан сығырға юл табырға була.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 31 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 436